✓*Почтальондар иғтибарына! Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. Иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен ҡиммәтле бүләктәр көтә.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 - 16 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№50 (468)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Бәхет йәшәгән урын...**

ғаилә усағы дөрләгән өйҙә



5

**"Өфө" атамаһының...**

тарихи сығанаҡтарҙа сағылышы



7

**Ир балаға ныҡлы арҡа...**

атай тәрбиәһе булыр, бел шуны!



8-9

**Димсе диңгеҙ кистерер**



12-13

14 **ТВ-программа**


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Дәүләт Думаһына һайлауҙар булып үтте. Яңы һайланған депутаттар, партия вәкилдәре тормошобоҙҙо яҡшыртыу буйынса иң беренсе сиратта ниндәй бурыстар атҡарырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?

***Мәҙһәр ИСӘНБАЕВ, иҡтисад фәндәре докторы, академик:*** Эште ил иҡтисадын аяҡҡа баҫтырыуҙан башларға кәрәк. Бының өсөн урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү мөһим. Әлеге көндә халыҡ ҡулында бит бер ниндәй ресурс та юҡ. Урмандарыбыҙ, ер өҫтө һәм ер аҫты байлыҡтары, ер-һыуҙарыбыҙ, хатта ки ҡыҙыл балсыҡ менән ҡомона ҡәҙәр федераль милек ҡарамағына күсте. Ә бит эшҡыуарлыҡты үҫтереү өсөн ошо урындағы ресурстар һөҙөмтәле файҙаланылырға тейеш. Эшҡыуарлыҡҡа юл асылһа, халыҡҡа эш урындары ла булдырылыр ине. Эшләгәс, табыш та киләсәк. Шуға күрә депутаттар урындағы халыҡ мәнфәғәттәренән сығып эш итһендәр. Ауылдарҙы тергеҙергә, ә уның өсөн иһә мәктәптәрҙе ябыуҙы туҡтатырға кәрәк. Милләт, туған тел мәсьәләләренә толерантлыҡ күрһәтелергә тейеш. Төбәк компоненттарын уҡытыуҙы ҡайтанан индерергә кәрәк. Ғөмүмән, мәсьәләләрҙе урындарҙағы хәл-торoштан сығып хәл итеү өсөн муниципаль органдарға күберәк вәкәләтлек, мөмкинлектәр бирелһен ине.

***Сәмерхан ҠУНАФИН, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, Сибай ҡалаһының аҡһаҡалдар ойошмаһы ағзаһы:*** Минең уйымса, ил башлығы һәм хөкүмәт етәкселеге үҙҙәренең башҡарған эштәре тураһында парламент алдында, тимәк, халыҡ алдында ла отчет биреп барырға тейештәр. Насармы, яҡшымы, берҙән-бер партия хакимлыҡ иткән совет заманында ла хатта генераль секретарҙар отчет бирә торғайны. Дөрөҫ, һуңғы бер-нисә йылда Дәүләт Думаһында хөкүмәт башлығының отчетын тыңлау ҡаралды ҡаралыуға. Тик регламент буйынса хөкүмәт башлығы эшмәкәрлеген анализлау, уның сығышы буйынса фекер алышыуҙар, хатта ки тәнҡитләү һәм баһа биреү ҡаралмаған, бары тик раҫлау һәм хуплау менән генә сикләнәләр. Рәсәй кеүек донъяла иң бай илдә халыҡтың 80 проценты хәйерселек һәм ярлылыҡҡа, эскелеккә һәм наркоманлыҡҡа дусар ителгән бер мәлдә депутаттар отчет биргән түрәгә аяғүрә баҫып тигәндәй туҡтауһыҙ сәпәкәй итә - Дәүләт Думаһындағы ошо күренеш хәтерҙә йөрәкте һыҙҙырып уйылып ҡалған. Йәмәғәт, боронғоса, бер батшаға, бер етәксе ауыҙына Аллаға ҡараған кеүек ҡарап йәшәгән ваҡыттар артта тороп ҡалды бит инде. Беҙ цивилизациялы XXI быуатта йәшәйбеҙ. Холоҡ-фиғелебеҙҙе, мөнәсәбәттәребеҙҙе ана шул цивилизацияға ярашлы итеп ҡорайыҡ! Ошондайын да ҙур илебеҙҙә аҡыл эйәһе булырҙай ҙур шәхестәребеҙ тыуа торор һәм власҡа килер, тигән өмөттәмен.

Үҙебеҙҙең Башҡортостан Республикаһынан һайланған депутаттарға ла әйтер һүҙем бар: федерация сиктәрендә төбәктәргә, урындағы муниципалитеттарға иҡтисади, рухи, милли-мәҙәни һәм мәғариф мәсьәләләрендә үҙаллылыҡ биреүҙән ҡурҡмаһындар ине, был бит Рәсәйҙе күп милләтле, абруйлы дәүләт кимәленә күтәрәсәк кенә. Рәсәйҙә тормошобоҙ ағышында килеп сығып торған мәсьәләләрҙе хәл итә алырҙай юғары вәкәләтле, абруйлы федератив-милли орган булдырыу мотлаҡ, тип уйлайым. Яңы депутаттар ошо хаҡта ниндәй фекерҙә икән?

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ИМАНҒА ИЛТЕР БАҪМА

Мин "Киске Өфө"нөң күптәнге дуҫы булам. Дуҫ булған өсөн маҡтай, тип уйламаһын гәзит уҡыусылар, тәүҙән үк әйтеп ҡуям: "Киске Өфө" - шәп гәзит һәм башҡа баҫмаларҙан бөтөнләй айырылып тора. Ҡайһы мәҡәләһен тотоп уҡыһаң да күңелгә ятышлы фекере, йә ғибрәт биреүсе һабағы, йә асышы менән күңелде яҡтыртып ебәрә. Ауыл ерендә ҡайһы саҡ ҡулға гәзит тоторға ваҡыт та етмәй китә, ләкин уҡытыусы булараҡ, гәзиттең бер һанын уҡымай ҡалдырмайым, сөнки торғаны бер дәреслек материалы бит ул "Киске Өфө". Мин шулай итеп файҙаланам да уны: мәктәпкә алып барып, тел-стиль, йөкмәткеһе яғынан айырыуса отошло мәҡәләләрҙе дәрестә диктант, инша итеп яҙҙырам балаларҙан.

Гәзитебеҙҙең һуңғы бер нисә һаны хаҡында айырым туҡталып киткем килә. Яҙыусы Әхмәр Үтәбай алып барған "Милли идеяға юл" рубрикаһы бик оҡшай. Рух һәм сәмебеҙҙе уятырлыҡ, уйһыҙҙар күңеленә уй һалырлыҡ аҡыл ҡаҙнаһы ул, тип иҫәпләйем. Тәү ҡарашҡа ябай ғына тойолған халыҡ әйтемдәре, ана, ниндәй тәрән мәғәнә көсөнә эйә. Философик трактаттарың ары торһон!

Фекер ебем үҙенән-үҙе баш мөхәррир Гөлфиә Янбаеваның 48-се һанда донъя күргән "Асылың талабы шул: туған телдә гәзит уҡы!" тигән баш мәҡәләһенә барып тоташа. Асылыбыҙ башҡорт икән, тимәк, үҙ әсә телебеҙгә тоғро ҡалыу - ул Хоҙайға тоғролоғобоҙ, тигән фекер үткәрелә. Үҙ милләтен, милләтенең төп билдәһе - туған телен ҡәҙерләгән, һаҡлаған кешене генә иманлы кеше тип әйтергә була. Тимәк, үҙ телендәге гәзитте алдырып уҡып барыу ҙа кешене иманға алып килеүсе юл, тип аңларға кәрәк! Кинәйәләп, ҡаты ҡағылмай ғына бына шундай бик матур ишара еткерелә аҡылы булғандарға баш мөхәррир мәҡәләһендә.

"Киске Өфө"лә баҫылған шиғри шәлкемдәр ҙә иғтибарымдан ситтә ҡалмай, сөнки унда яңы һүҙ, фекер әйткән әҫәрҙәр генә һайлап баҫыла. Айһылыу Ғарифуллинаның көнүҙәк темаға ҡағылған шиғырҙарын бик яратып уҡыным.

"Киске Өфө"нө сығарыусы ижади хеҙмәткәрҙәргә, редакция коллективының бөтә ағзаларына ла ҙур рәхмәтемде еткерәм һәм ҡайнар сәләмдәремде юллап ҡалам.

**Камил ИЛЕМБӘТОВ,**
**уҡытыусы.**
**Хәйбулла районы Әбеш ауылы.**



ӘЙҘӘГЕҘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЭШЕҢӘ ЯУАПЛЫ ҠАРАҺАҢ...

## эшең уң булыр



**Бөгөнгө көн йәштәре араһында әүҙем, позитив ҡарашлы, аҡса эшләргә тырышыусылар бихисап. Быныҥ өсөн улар төрлө курстарға йөрөп, өҫтәмә белем ала, идеяларын тормошҡа ашырыу өсөн төрлө юлдар эҙләй һәм таба. Шундай йәштәрҙең береһе - Өфөлә йәшәүсе һәм үҙенең шөғөлө менән арыу ғына аҡса эшләүсе Гөлнара ӘХМӘҘУЛЛИНА. Һүҙҙе уның үҙенә бирәйек.**

- Юғары уҡыу йортонда уҡыған саҡта уҡ стипендияға ҡуш булырҙай аҡса эшләү өсөн төрлө урындарҙа эшләнем. Ата-әсәйемдең мине генә уҡытырға хәләнән килә ине, әлбиттә, тик мин үҙем уларҙы был мәсьәләне хәл итеүҙән ҡотҡарып, үҙемде-үҙем ҡарарға кәрәк, тигән фекерҙә тормошҡа ашырыуҙы оҙаҡҡа һуҙырға теләмәнем.

Төрлө урында эшләргә тура килде, төрлө кешеләр менән осраштырҙы тормош. Ләкин был танышыу-осрашыуҙарҙың барыһы ла артабанғы тормошомда хәл итеүсе роль уйнаны, тип әйтә алам, сөнки кеше төрлө хәлдәрҙе йырып сығыу һәм төрлө характерлы кешеләр менән аралашыу барышында сыныға, тормош тәжрибәһе арта, донъяға асығыраҡ күҙ менән баға башлай.

Ҡулыма диплом алып, уҡытыусы булып эшләй башлағас, тағы ла ниндәйҙер һөнәр үҙләштереү теләге тыуҙы. Минә кеше менән эшләү, ҡыҙҙарыбыҙға тағы ла матурыраҡ булыу мөмкинлеге бүләк итеү оҡшай ине, шуға күрә махсус курстарҙа сәс, керпек һәм тырнаҡ үҫтереү, биҙәү серҙәренә өйрәндем. Тәүге тапҡыр алған белемемде апайымда "камиллаштырҙым", йәғни ул модель ролендә сығыш яһаны. Ҡулым арыу ғына шымарғас, дуҫ ҡыҙҙарыма "тотондом". Хәҙер гүзәл заттар үҙенең тышҡы ҡиәфәтенә ныҡ иғтибар итә, шуға күрә артабан клиенттар табыу ауыр булманы. Минең шөғөлдә иң мөһиме - ҡыҙҙарҙы һинә артабан реклама яһарҙай ҡурсаҡ итеп биҙәндереү. Ә бындай һөҙөмтә бары тик үҙ эшенә яуаплы ҡарағанда ғына булырға мөмкин. Мин яуаплылыҡты бер ҡасан да онотмайым: һәр берәүгә йылы мөнәсәбәт һәм яғымлы ҡараш күрһәтеп, үҙемә ихтирам яулайым. Шөғөлөмдөң күңелемә ятыуы һәм эш хаҡыма ҡушымта булып аҡса килтереүе мине тағы ла дәртләндерә, алға әйҙәй.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

### РФ Дәүләт Думаһына һайлауҙар булып үтте. Яңы һайланған депутаттар, партия вәкилдәре тормошобоҙҙо яҡшыртыу буйынса иң беренсе сиратта ниндәй бурыстар атҡарырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Сәбилә СӨЛӘЙМӘНОВА, педагогика фәндәре кандидаты:*** Беҙҙең илдә пенсияларҙың бик бәләкәй булыуы, уның хатта Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһында ҡаралған иң минималь нормаға ла яҡынлаша алмауы һәр кемгә билдәле. Элек әллә ни күҙгә салынмай ҙа ине, әле урамға сыҡҡан һайын сүп-сарҙа соҡоноусы кешеләрҙе күрергә була. Ҡайһылары бит уның йорт-ерһеҙ асарбаҡ та, хәйерсе лә түгел. Мәҫәлән, шундай бер әбей менән һөйләшеп киттек, сүп-сар контейнерҙарын, урналарҙы соҡоп, һыра шешәләре йыйып тапшыра икән. "Икмәк-тоҙлоҡ булһа ла, аҡса бит", ти. Бына шулай ғүмер буйы ил мәнфәғәттәренә бил бөккән граждандарын ҡартлыҡ көндәрендә меҫкенлеккә, аслыҡҡа дусар иткән илдең ҡайҙан абруйы булһын?

Унан һуң мин депутаттар иғтибарын йәштәр мәсьәләһенә йүнәлдерер инем. Йәштәргә лә бик ауыр бит бөгөн. Ни эше, ни ашы юҡ, тигәндәй... Торлаҡ мәсьәләһен әйтеп тә тормайым. Ипотека тоҙағына эләккәндәрҙе тунапмы-тунайҙар. Дөрөҫөн әйткәндә, йәштәр бөгөн баштан-аяҡ кредитҡа йәшәй. Уларға кисекмәҫтән дәүләт ярҙамы талап ителә. Өсөнсө мөһим мәсьәлә - хаҡтарҙы "ауыҙлыҡлау". Был өлкәлә бер ниндәй сик, тотороҡлоҡ юҡ.

Башҡортостандан Рәсәй Дәүләт Думаһына һайланған депутаттарға айырым сәләмдәремде еткерер инем: республикабыҙ халҡы оло ышаныс белдереп, уларҙы һайланы, әммә улар ҙа бит яуапһыҙ ҡалырға тейеш түгел! Республикабыҙ мәнфәғәттәрен ҡыйыуыраҡ яҡлаһын ине улар. Юғиһә, Башҡортостанды элек тә таланылар, әле лә хәл үҙгәрмәне. Күпме түҙергә мөмкин бындай хәлгә? Республикабыҙ үҙе эшләп алған табыштың 50 процентын ғына булһа ла үҙ ҡаҙнаһында ҡалдырһа, беҙҙә халыҡ күпкә яҡшыраҡ көн күрер ине. Буласаҡ депутаттар үҙҙәренең ҡулынан килгән бына ошондай мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса эҙмә-эҙлекле эшләргә бурыслы.

***Фәкиһә ТУҒЫҘБАЕВА, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Рәсәй Дәүләт Думаһына һайлауҙар - илебеҙ тормошонда етди сәйәси ваҡиға. Шуға күрә һайлауҙарҙа ҡатнашмай, был ваҡиғанан ситтә тороп ҡалыу - ул, тимәк, илдең алдында яуаплылыҡ тоймауҙы аңлата. Үкенескә ҡаршы, хәҙер бик күптәр: "Беҙ ни генә эшләй алабыҙ инде?" - тип, сәйәси ваҡиғаларға битараф ҡалыуҙы хуп күрә. Ә бит Башҡортостандың, тотош Рәсәйҙең киләсәк яҙмышы һинең, минең, уның үҙ һайлау хоҡуғын файҙаланыуы йәки файҙаланмауына бәйле. Ниндәй партия ағзалары өсөн тауыш биреү ҙә бөгөн ауыр түгел, миненсә, сөнки уларҙың һәр береһе, шулай уҡ уларҙың лидерҙары ла, үҙ йөҙҙәрен күрһәтеп өлгөрҙө. Һайлау алды осоронда улар үҙәк һәм урындарҙағы киң мәғлүмәт сараларын әүҙем файҙаланып, халыҡты үҙ программалары менән таныштыра барҙы. Бына шунда улар һүҙ көсөн, матбуғат сараларының халыҡҡа тәьҫир көсөн, моғайын, яҡшы аңлағандыр. Шуға күрә киләсәктә лә үҙ һүҙҙәрен халыҡҡа, киң йәмәғәтселеккә тотҡарлыҡһыҙ еткереп торорға теләйҙәр икән, улар урындарҙағы матбуғат баҫмаларын йәшәтеү сараларын күрергә тейеш, тип уйлайым. Юғиһә, электрон мәғлүмәт саралары менән мауығып, заманыбыҙ йылъяҙмалары булған баҫма матбуғатты, бер ҡасан да үҙенең ысын ҡиммәттәрен юғалтмаясаҡ хазиналарыбыҙ - китаптар уҡыуҙы онотоп барабыҙ түгелме? Мин, әҙибә һәм йәмәғәт эшмәкәре булараҡ, бикле архивтарҙың асылыуынан, һүҙ азатлығынан файҙаланып, халҡыбыҙҙың, Башҡортостандың, ҙур Ватаныбыҙ - Рәсәйҙең тарихи яҙмышы тураһында бик күп шиғырҙар һәм поэмалар ижад иттем. Үҙ тормошомдан һәм ижадымдан һығымта яһап барҙым һайлауға. Шуға ла яңы һайланған депутаттарҙы һәм партияларҙы халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың мәнфәғәтен яҡлаған, милләтебеҙҙе һәр йәһәттән үҙгәртергә ынтылған, Рәсәйҙең именлеген һаҡлаған, уның донъялағы сәйәси, иҡтисади, мәҙәни баһаһын күтәргән, һәр граждан тураһында ҡайғыртҡан вәкилдәр итеп күргем килә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ?

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2012 йылдың тәүге яртыһында гәзитһеҙ ҡалмаҫҡа теләһәгеҙ, уға яҙылырға һуңлап ҡуймағыҙ. Был хаҡта күрше-күләндәрегеҙгә, таныштарығыҙға ла еткерегеҙ, зинһар.**

**Декабрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәргә лә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" бүләк итмәксебеҙ.**

Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **270 һум**ға яҙыла алаһығыҙ - почта йәшнигә юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ. Киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, редакцияға шылтыратығыҙ.
- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **228 һум**.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

**Шулай итеп, гәзитебеҙҙең индексы - 50665, ярты йылға яҙылыу хаҡы - 348 һум 24 тин.**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 2012 йылға Башҡортостан Республикаһы бюджеты тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы. Башҡортостан бюджеты сығымдарының дүрттән бер өлөшө 2012 йылда һаулыҡ һаҡлауға китәсәк. Средстволарҙың шундай уҡ күләме, аныҡлап әйткәндә, 24 процент, мәғариф өлкәһен финанслауға йүнәлтелә. Бюджеттың социаль өлкәгә бүленгән өлөшө әүәлгесә ҙур булып ҡала һәм 2012 йылда ул 73,3 процентты тәшкил итәсәк. Республика ҡаҙнаһының табыш өлөшө 91,5 млрд һум күләмендә раҫланған, сығымдар 106,5 млрд һумды тәшкил итәсәк.

✓Башҡортостанда РФ Дәүләт Думаһына депутаттар һайлау һөҙөмтәләре ғәмәлдә тип танылды. Бындай ҡарар Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһының тауыш биреүгә йомғаҡ яһауға бағышланған ултырышында ҡабул ителде. Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе урынбаҫары Нәйлә Алтынова хәбәр итеүенсә, һайлау һөҙөмтәләрен ғәмәлдә түгел тип иҫәпләргә сәбәптәр юҡ.

✓Башҡортостанда үткән Дәүләт Думаһына һайлауҙа һайлаусыларҙың 79,3 проценты ҡатнашҡан. Ҡариҙел (һайлаусыларҙың 98,6 проценты тауыш биргән), Ҡырмыҫҡалы (98,1 процент), Балтас (98 процент) райондары халҡы һайлауҙа айырыуса әүҙемлек күрһәткән. Шулай уҡ 26 районда һайлауҙа һайлаусыларҙың 90 процентtan ашыуы ҡатнашҡан. Был күрһәткестәр буйынса ҡалалар араһынан Сибай беренсе урында килә (һайлаусыларҙың 81 проценты тауыш биргән). Өфөлә тауыш биреүҙә һайлаусыларҙың 70,3 проценты ҡатнашҡан. Ағиҙел ҡалаһында һайлаусыларҙың ни бары 50,6 проценты тауыш биргән.

✓Башҡортостан социаль йүнәлешләге коммерцияға ҡарамаған ойошмаларға ярҙам итеү программаһын тормошҡа ашырыуға 23 миллион 774 мең һум аҡса аласаҡ. Рәсәй Хөкүмәте әлеге программаларҙы тормошҡа ашырыу өсөн федераль бюджеттан төбәктәргә субсидия бүлеүҙе раҫлаған. Был маҡсатҡа йәмғеһе 600 миллион һум йүнәлтелгән. Иң ҙур субсидияларҙы Санкт-Петербург - 37 миллион 591 мең һум, Башҡортостан - 23 миллион 774 мең, Татарстан - 25 миллион 914 мең, Краснодар крайы - 29 миллион 511 мең, Түбәнге Новгород, Свердловск һәм Һамар өлкәләре 23 миллион һумдан ашыу аҡса аласаҡ.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ЭТ БУЛМАҒАН ЕРҘӘ...

## төлкө йөрөр

**Был әйтемдең бер варианты итеп "Һағыҙаҡ күп ерҙә себен юҡ" әйтемен дә килтерергә була. Уларҙың икеһенә лә бер үк мәғәнә-йөкмәтке һалынған кеүек булһа ла, тәү ҡарамаҡҡа ғына шулай тойола. Ни өсөн тигәндә, әйтемдәрҙең төпкеһенең мәғәнәһе тәрәнерәк булғанға оҡшаған. Шул хаҡта фекер йөрөтәйек.**



Башҡорт халыҡ мәҡәлдәренең һәм әйтемдәренең ғәжәйеп үҙенсәлекле бер сифаты ошо ике миҫалда тулыһынса сағыла ла инде. Уларға, асылда, бер оло фекер һалынған хәлдә лә, мәғәнәләрен аңлауҙың һәм аңлатыуҙың кәмендә ике йәки унан да күберәк ысулы, юлы, варианты, кинәйә-ишараһы булыусан. Был шулай уҡ шиғриәттең образлы фекерләү асылы ла. Хәҙер инде юғарыла килтерелгән әйтемдәрҙе ошо контекста тикшереп ҡарайыҡ. Ысынлап та, ни өсөн һағыҙаҡ күп ерҙә - себен юҡ та, эт булмаған ерҙә төлкө йөрөй һуң? Ғөмүмән, бында һүҙ тик бөжәктәр һәм йәнлектәр хаҡында ғына барамы?

Беренсенән, һағыҙаҡ күп ерҙә себен юҡ, сөнки һағыҙаҡ эре, көслө, зәһәр, аҙау "тешле", етмәһә, яман геүелдәп оса, ҡанаттарының елпеүенән үк себендәр осоп китерлек, шуға күрә улар булған ергә себен килергә ҡурҡа. Эт булмаған ерҙә ни өсөн төлкө йөрөүе лә аңлашыла, сөнки бер-береһенә оҡшаш был йәнлектәр тәбиғи булмышы буйынса бер-береһенә антагонист, дошман, береһе - һунарсы, икенсеһе - һунар итеү объекты. Әйтемдәрҙең мәғәнәһен тик ошо рәүешле генә итеп аңларға һәм аңлатырға тырышыу тик бер яҡлы ғына килеп сығыр ине барыбер. Шуға күрә бында тағы ла "икенсенән" тигән һүҙ менән башланған аныҡлама талап ителгәне көн кеүек асыҡ.

Икенсенән, һағыҙаҡтар үрмәксе, ҡуңыҙ, себен, бал, нектар, ә себен, асылда, тиҙәк менән туҡлана, шулай булғас, һағыҙаҡ күп ерҙә себендең ни өсөн булмауы аңлашыла, тимәк, һағыҙаҡтар себендәрҙе ашап бөтөрә, тәүге осраҡтағыса, себен һағыҙаҡтың һунар итеү объекты. Төлкөбикә иһә, сысҡандарҙы тәмләп ашарға ратһа, эттәр сысҡан еҫе сыҡҡан урындан тиҙ генә һыпыртыу яғын ҡарай, сөнки еҫен үҙһенмәй...

Тағы ла әйтемдәрҙең мәғәнәһен тулыһынса асып бөтә алманыҡ кеүек. Ни өсөн тигәндә, "Ярар, һағыҙаҡ менән себендең, эт менән төлкөнөң бер-береһенә антагонист-дошман булыуы, менюлары тап килмәүе генә уларҙың бер урында бер үк ваҡытта була алмауын аңлатмай бит", тип әйтер мәғлүмәтле уҡыусы. Дөрөҫ иҫкәрмә. Тимәк, бында үҙенән-үҙе "өсөнсөнән" тигән һүҙ башы талап ителә.

Өсөнсөнән, һағыҙаҡ менән эт себен менән төлкөнән ҡәтғилек, уҫаллыҡ һәм етдилек менән айырылып тора. Ысынлап та, эт булған урында төлкөнөң хәйләкәрлегенә, мәкеренә, аҫтыртынлығына, икейөҙлөлөгөнә; һағыҙаҡ бар ерҙә себендең хәшәрәтлегенә, ләпәкәйлегенә, ваҡсыллығына урын юҡ. Тимәк, бында эт менән һағыҙаҡ ниндәйҙер кимәлдә үҙҙәренең донъяһын икейөҙлөлөктән, хәйләкәрлектән, мәкерҙән, хәшәрәтлектән һәм ваҡсыллыҡтан һаҡлаусы санитар-намыҫ ролен дә башҡара. Әгәр ҙә был әйтемдәр бары тик бөжәктәр һәм йәнлектәр донъяһына ғына ҡағылһа, уларҙың әһәмиәте лә шул кимәлдән артмаҫ ине. Шуға күрә лә бында тағы ла "дүртенсенән" тигән һүҙ башы талап ителә.

Дүртенсенән, хәҙер инде ошо урында йәнлектәр һәм бөжәктәр донъяһындағы ошо күренеш менән кешеләр донъяһына параллель үткәреп ҡарайыҡ. Ҡайһы илдә, дәүләттә, республикала ришүәтселек, коррупция, енәйәтселек, уғрылыҡ сәскә ата? Әлбиттә, әйтемдәргә ярашлы образлы итеп әйткәндә, "төлкөләр" һәм "себендәр" ояланған ерҙә. Бөгөн беҙгә коррупция, ришүәтселек, енәйәт, уғрылыҡ ил, дәүләт, закон сиктәрен генә емереп килеп инмәй, улар беҙҙең вайымһыҙлығыбыҙ, үҙ яҙмышыбыҙға битарафлығыбыҙ, үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа булмауыбыҙ арҡаһында килеп инә һәм сәскә ата. Эт булмаған ерҙә төлкө йөрөй һәм йөрөр шул. Ҡасандыр ҡарағайҙар үҫкән урмандарҙы ла - уҫаҡ, игендәр гөрләп үҫкән яландарҙы әрем баҫа. Һүҙемде үткән быуаттың 90-сы йылдарында яҙған "Урманда" тигән мәҫәлем менән тамамлайым:

Ҡарағайҙар үҫер ерҙе уҫаҡ баҫҡан,
Ҡайынлыҡта һәрпенделәр күңел асҡан.
Имәнлекте яулап алған өйәңкеләр,-
Таҡмаҡ әйтеп бейеп йөрөй кейәңкеләр.

Ҡарт еректе ҡосаҡлаған миләш-кәләш,
Тегенеһе кәләшенә бирә кәңәш:
"Тик ерексә һөйләшһен, ти, балабыҙ, ти,
Һин үҙең дә ерек булып ҡалаһың, ти."

Ҡарағастар, ҡарамалар ҡасып киткән,
Урындарын әрәмәлек баҫып киткән.
Үрмәкселәр һәр ботаҡҡа ҡорған мәкер,
Шомға һала һәр бер уйың, һәр бер фекер.

Тайыштабан үксәләрен ялтыратҡан,
Бүреләре ҡуян ише ҡалтырашҡан.
Был урманға хәҙер инде хужа төлкө,
Урманы ла урман түгел, бары көлкө.

Биҙгәгенән сығырмы был башҡайҙарым,
Нисек итеп өйрәнгән һуң ҡошҡайҙарым:
Һандуғасым ҡарға булып ҡарҡылдарға,
Кәкүктәрем баҡа булып баҡылдарға?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# КҮҘЕМ НАСАР КҮРҺӘ ЛӘ...

## гәзитте алдырыуҙан туҡтамайым

Гәзитебеҙ йылдан-йыл бөтә йәһәттән дә тик яҡшыра ғына. Йыл да "Киске Өфө"гә яҙылмайынса ҡалғаным юҡ. Һуңғы йылдарҙа күҙем ауыртып, гәзитте тулыһынса уҡый алмаһам да, эре хәрефтәр менән яҙылғандарын уҡып сығып, фәһем алам. Киләсәктә, Алла бирһә, тупланған гәзитте берәй мәктәпкә йәки мәсеткә тапшырырға уйым бар.

Киленем Алтын ҡасабаһында гәзит таратыусы булып эшләй. "Йөрөгән ерендә "Киске Өфө"гә яҙылырға өгөтләп йөрө", - тип әйтеп ҡуйғанмын. Әлеге көндә ул гәзит тараҡкан биләмәлә барлығы 2 генә кеше алдыра был баҫманы. Башҡорттарыбыҙ "Киске Өфө"нө, "Йәшлек" те, башҡорт телендә сыҡҡан башҡа ваҡытлы матбуғатты күберәк алдырһындар ине, тип теләгем килә. Шулай булһын өсөн, әлбиттә, халыҡ араһында аңлатыу, төшөндөрөү эшен алып барыу ҡамасауламаҫ ине, ә бөгөнгө көндә бындай эш менән шөғөлләнеүселәр юҡ кимәлендә.

Гәзиттең киләһе йыл буласаҡ 10 йыллыҡ юбилейын оло ҡыуаныстар һәм шатлыҡтар менән, баҫманың тиражын тағы ла арттырып ҡаршыларға яҙһын.

**Мәхмүзә ИСЛАМҒОЛОВА.**
**Баймаҡ районы.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәйҙең Милли һәм олимпия уйындарына индерелмәгән спорт төрҙәре комитетының Попечителлек советы составына инде. Республика башлығы кандидатураһы 1 декабрҙә Спорт ойошмаһы идараһы ултырышында Мәскәүҙә раҫланды. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Өфө 2021 йылда Милли һәм олимпия уйындарына индерелмәгән спорт төрҙәре буйынса Бөтә донъя уйындарын үткәреү хоҡуғына дәғүә итә.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов экологик сәнәғәт хәүефһеҙлеге мәсьәләләре буйынса ведомство-ара йәмәғәт именлеге советы ултырышын үткәрҙе. Башҡортостан Президенты фекеренсә, экологик хәүефһеҙлеккә бигерәк тә яғыулыҡ-энергетика комплексы предприятиеларында иғтибар бирелергә тейеш, сөнки тирә-яҡ мөхитте бысратыуға алып килгән аварияларҙың күбеһе тап ошо комплекстың предприятиеларына тура килә. Һауаның зарарлы газдар менән бысраныуына бәйле иң күп ялыуҙар Өфө, Салауат, Стәрлетамаҡ һәм Ишембай халҡынан килә. Орджоникидзе һәм Калинин райондары халҡы, мәҫәлән, әүәлгесә әсе еҫкә зарлана, ул айырыуса төнөн, иртәнгә табан йәки ял көндәрендә ныҡ һиҙелә.

✓Башҡортостанда Яңы йыл байрамына шыршылар әҙерләнә. Республиканың Урман хужалығы министрлығы бойороғона ярашлы, шыршылар министрлыҡҡа ҡараған дәүләт унитар предприятиелары менән әҙерләнә һәм һатыуға сығарыла. Декабрҙә дөйөм алғанда 206 мең шыршы ҡырҡып алынасаҡ. Урман һылыуҡайҙарын иң күбеһе "Белорет урманы" дәүләт унитар предприятиеһы әҙерләмәксе - 22 мең төп. "Туймазы урманы" - 20 мең, "Йылайыр урманы" - 12 мең төп ағас әҙерләйәсәк. Министрлыҡ ҡарамағында булған дәүләт унитар предприятиеларынан һатып алынған ике метрға тиклем оҙонлоҡтағы шыршы хаҡы 150-200 һум тәшкил итәсәк.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "2012 йылда Өфөлә йәйге биатлон буйынса донъя чемпионатын әҙерләү һәм үткәреү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Төбәк башлығы чемпионатты әҙерләү һәм үткәреү буйынса республика ойошторою комитеты составын раҫларға һәм 2011 йылдың 15 декабренә тиклем тейешле саралар планын әҙерләргә ҡушты. Ярыштар Өфөлә 2012 йылдың август-сентябрь айҙарында үтәсәк.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫНАН... балалар баҡсаһына ла түлә

**РФ Хөкүмәте ҡарары менән Әсәлек капиталын баланы уҡытыуға тотоноу ҡағыҙәләренә үҙгәрештәр индерелде.**

Ошоға тиклем дәүләт сертификаты эйәләре Әсәлек капиталын балаларҙы уҡытыуға һәм уҡыу осоронда дөйөм ятаҡта йәшәгән өсөн тотона ине. Яңы ҡағиҙәләр буйынса, Әсәлек капиталынан сабыйҙы балалар баҡсаһына, шул иҫәптән шәхси (түләүле) баҡсаға йөрөткән өсөн түләүгә лә рөхсәт бирелә. Әсәлек капиталына хоҡуғы булған ата-әсә балалар баҡсаһы менән килешеү төҙөгәндә баланы ҡараған өсөн түләү күләмен һәм түләү ваҡытын мотлаҡ күрһәтергә тейеш. Әсәлек капиталы аҡсаһы килешеүҙә күрһәтелгән балалар учреждениеһы иҫәбенә күләҡсаһыҙ рәүештә Пенсия фонды тарафынан күсереләсәк. Тәүге түләү Әсәлек капиталы аҡсаһын тотоноу тураһындағы ғаризаны ҡабул итеп алғандан һуң ике айҙан күсерелә, ҡалғаны килешеүҙә күрһәтелгәнсә башҡарыла.

Шулай итеп, Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров билдәләүенсә, Әсәлек капиталын торлаҡ шарттарын яҡшыртыу, балаға белем биреү һәм әсәнең хеҙмәт пенсияһының тупланма өлөшөн булдырыу өсөн һәм хәҙер сабыйҙы балалар баҡсаһына йөрөткән өсөн дә йүнәлтергә мөмкин.

Башҡортостанда әсәлек (ғаилә) капиталына 120 мең дәүләт сертификаты тапшырылған. Бирелгән сертификаттар иҫәбе буйынса Башҡортостан Мәскәүҙән генә ҡалыша. Республикалағы Пенсия фондында сертификаттар буйынса мөрәжәғәттәрҙең артыуын билдәләйҙәр. Закон ғәмәлгә ашырылған тәүге йылда - 16,7 мең, 2008 йылда - 23,5 мең, 2009 йылда 30,3 мең сертификат тапшырылған. 2011 йылдың 17 ноябренә 21 меңдән ашыу сертификат бирелгән.

Сабыйҙарына өс йәш тулған Башҡортостан халҡы әсәлек капиталынан әүҙем файҙалана. 16521 сертификат хужаһы әсәлек капиталын тулыһынса ҡулланған. 381 ғаилә капиталды балаларҙың уҡыуына тотонһа, 11 сертификат хужаһы уны хеҙмәт пенсияһының тупланма өлөшөнә күсергән. Пенсия фонды белгестәре билдәләүенсә, республика халҡы үҙенең сертификаттарын бик йыш торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн файҙалана. Был маҡсатҡа 10,6 млрд һумдан ашыу сумма, шул иҫәптән торлаҡ кредиттарын һәм займдарын ҡаплауға 7,9 млрд һум йүнәлтелгән.

Ауыл ерендә сертификаттар нигеҙҙә шәхси торлаҡ төҙөү өсөн файҙаланыла. Айырым райондарҙа һәр алтынсы сертификат хужаһы әсәлек капиталын ошо маҡсатҡа йүнәлткән. Хәтерегеҙҙә төшөрәйек, ҡануниәткә индерелгән үҙгәрештәр арҡаһында 2010 йылдың декабренән башлап төҙөләш ойошмаһы-подрядсылар ярҙамынан тыш шәхси йорт төҙөүгә йәки реконструкциялауға, шулай уҡ төҙөлгән йортҡа сығымдарҙы компенсациялауға әсәлек капиталы средстволарын йүнәлтеү мөмкинлеге булдырылды.

Әсәлек капиталы аҡсаһын файҙаланыу йүнәлештәре генә түгел, аҡса күләме лә йыл һайын арта бара. 2012 йылдың 1 ғинуарынан ул 387,6 мең һум тәшкил итәсәк.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАЙРАМ КИЛӘ, БАЙРАМ!



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Яңы йылға әҙерлек һәм байрам сараларын уҙғарыу тураһында мәғлүмәт тыңланды.**

● Яңы йыл байрамы сараларына старт 21 декабрҙә биреләсәк. Был көндә "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында Президент шыршыһы буласаҡ. Ошонда уҡ 22 һәм 23 декабрҙә баш ҡала һәм социаль шыршы байрамдары уҙасаҡ.

● 22 - 30 декабрҙә 299 ғәрип баланы өйҙәрендә ҡотлау өсөн бөтә ҡала социаль акцияһы уҙасаҡ.

● 25 декабрҙә Өфөнөң иң яҡшы 11 уҡыусыһы Мәскәүҙә уҙасаҡ төп Шыршы байрамына юллана.

● 26 декабрҙә Ленин майҙанында Ҡыш бабайҙар парады һәм ҡаланың Үҙәк шыршыһы майҙансығын асыу тантанаһы булһа, 27 декабрҙә ҡаланың башҡа райондарында шыршы майҙансыҡтары эш башлаясаҡ. Асыҡ майҙандарҙа театрлаштырылған тамашалар ойоштороласаҡ.

● Яңы йыл төнөндә Ленин майҙанында 21.00 сәғәттән төнгө 02.00-гә тиклем баш ҡала халҡына һәм ҡунаҡтарға эстрада-мауыҡтырғыс программа тәҡдим ителәсәк.

● "Вьюговей" традицион Яңы йыл фестивале ай аҙағында үтәсәк. Фестиваль программаһына "Яңы йыл хыялдары", "Боҙло ҡала", "Әкиәти боҙ", "Ҡыш бабай-2012" һәм быйыл беренсе тапҡыр "Ҡыш бабай экипажы" кеүек конкурстар инәсәк.

● Байрам көндәрендә һәм каникулда мәҙәниәт йорттарында балалар өсөн Яңы йыл байрамдары, мәктәп уҡыусылары өсөн бал һәм дискотекалар, өлкәндәргә Яңы йыл кисәләре уҙасаҡ. Шулай уҡ ял итеү һәм күңел асыу парктарында ла төрлө саралар ойоштороласаҡ.

## ҠАЙҘА ЙӘШӘҮ ЯҠШЫ?

**Быйыл сентябрь-октябрҙә үткәрелгән социаль һорау алыуҙар шуны асыҡлаған: баш ҡала халҡының 63,5 проценты үҙенең матди хәлен ыңғай баһалай, 31,9 проценты яҡын арала матди хәленең яҡшырырына өмөт итә. Баш ҡаланың һәр дүртенсе кешеһе бер ниндәй ҙә үҙгәреш көтмәй, һәр унынсы кеше иһә киләсәккә пессимистик ҡарашта.** Өфөләләрҙең 35,9 проценты - һуңғы йылда килеменең артыуын, һәр бишенсе кеше, киреһенсә, ғаилә килеменең кәмеүен билдәләй. Шул уҡ ваҡытта халыҡтың бер өлөшөнөң кредитҡа йәшәгәнен күҙәтергә мөмкин. Мәҫәлән, ун яуап биреүсенең дүртеһе кредит түләй.

Эш мәсьәләһенә килгәндә, 56,2 процент өфөлә эше менән ҡәнәғәт. Бары тик 6,6 процент кешене генә - эш урыны, өстән бер өлөшөн эшендәге ҡайһы бер мәлдәр ҡәнәғәтләндермәй. Респонденттарҙың 14 проценты "һоро" йәки килешеү буйынса эш хаҡы алыуын белдерә. 57,3 процент хеҙмәткәр үҙе эшләгән предприятиеның ниндәй формала булыуына ҡарамаҫтан, тулы күләмдә социаль пакет менән файҙалана, 11,5 проценты бындай дәртләндереү төрөнөң бөтөнләй ҡаралмауын, 25,2 проценты социаль пакеттың тулы күләмдә бирелмәүен белдерә.

Яуаптарҙан күренеүенсә, баш ҡалала эш урынын юғалтыу проблемаһы киҫкен тормай. Һәм иң мөһиме: өфөләләр тыуған ҡалаһын мөкиббән китеп ярата, уларға бында йәшәүе оҡшай. Яуап биргән 1 мең кешенең 88,5 проценты был һорауға ыңғай яуап бирһә, 61,4 проценты уның илебеҙҙең башҡа төбәктәренән килгән туристарҙы күпләп ылыҡтырыуын билдәләгән.

## ҮҘЕБЕҘСӘ, САФ БАШҠОРТСА!

**Башҡортостан юлдаш телевидениеһында беренсе тапҡыр башҡорт телендә аҙна ваҡиғаларына йомғаҡлау-аналитика программаһы эфирға сыҡты.**

- Ижади төркөмдөң төп маҡсаты - тамашасыға сифатлы, ҡыҙыҡлы, дөрөҫ һәм оператив мәғлүмәт еткереү. Журналистар Рафиҡ Әхмәтшин, Илдар Байбулатов, Рәмзиә Кәримова, Лилиә Тунасова үҙ сюжеттарында аҙнаның иң көнүҙәк темаларын күтәрергә тырышты, - ти мәғлүмәт программалары редакцияһының башҡорт редакцияһы етәксеһе Рәмзит Әбүләев.

Былтыр йәйгеһен республиканың Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығы халыҡ араһында социологик һорау алыуҙар үткәрә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Башҡортостан юлдаш каналы таныլыу буйынса "Беренсе канал"дан ҡала икенсе урында килә, ә инде каналды ҡараусы даими аудитория проценты буйынса өсөнсө урында тора. Бигерәк тә халыҡ мәғлүмәт программаларын ыңғай яҡтан билдәләй, шуға ла тап шундай сығарылышҡа өҫтөнлөк бирелә лә инде. Өҫтәүенә, яңы миҙгелдән каналда сәғәт һайын, шул иҫәптән башҡорт телендә лә туғыҙ тапҡыр яңылыҡтар эфирға сыға.

Баш ҡала Башҡортостан юлдаш телеканалының төрлө темаға арналған мәғлүмәт программаларын халыҡтың 36,7 проценты ҡараһа, республика ҡалалары буйынса был күрһәткес - 58,9, ауылдарҙа иһә 56,6 процент тәшкил итә. Хәҙер был нисбәттең саҡ ҡына үҙгәреүе лә ихтимал, сөнки "Аҙна яңылыҡтары" һәр йәкшәмбе һайын көндөҙгө беренсе яртыла эфирға сығасаҡ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда 181,9 мең кеше даими йәшәү урынын алмаштырған. Быйыл республиканан 30,3 мең кеше киткән. 24,1 мең кеше үҙҙәренең элекке йәшәү урынын Башҡортостан Республикаһына алмаштырған. 64 мең самаһы кеше республика эсендә бер урындан икенсе урынға күскән. Һөҙөмтәлә туғыҙ айҙа республикала миграция арҡаһында халыҡ иҫәбе 6200 кешегә кәмегән. Былтыр иһә, киреһенсә, республика халҡының 1224 кешегә артыуы күҙәтелгән булған. Миграция иҫәбенә халыҡ артыуы ике ҡалала - Өфөлә һәм Октябрьскийҙа, йәнә 9 муниципаль районда ғына күҙәтелә.

✓Студенттарҙың стипендиялары 2012 йылда 26 процентҡа артасаҡ. Федераль, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһының власть органдары ҡарары менән стипендия фонды 1 ғинуарҙан - 20 процентҡа, 1 октябрҙән йәнә алты процентҡа арттырыласаҡ. 2012 йылға республика ҡаҙнаһының сығымдар өлөшөн формалаштырғанда бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә хеҙмәт хаҡын арттырыу ҙа иҫәпкә алынған. Ағымдағы йылда уларҙың эш хаҡы ике тапҡыр күтәрелде: 1 ғинуарҙан һәм 1 октябрҙән.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында бер вакантлы урынға рәсми рәүештә эшһеҙ теркәлгән ике кеше дәғүә итә. Бөгөнгө көнгә ҡалала яҡынса 11600 буш эш урыны иҫәпләнә. Әлеге ваҡытта ҡалала 8500-ҙән ашыу эшһеҙ теркәлгән, уларҙан яҡынса 7700 кеше эшһеҙлек буйынса пособие ала. Өфөлә бөгөнгө рәсми рәүештә теркәлгән эшһеҙлек кимәле 1,53 процент тәшкил итә. Ҡаланың Халыҡ мәшғүллеге үҙәгендә йөмгеһе туғыҙ меңдән ашыу кеше иҫәптә тора. Уларҙан 500-ҙән ашыуы бөгөнгө хеҙмәт баҙарында кәрәкле булған һөнәрҙәр буйынса уҡыуын дауам итә.

✓Дөйөм Рәсәй Яңы йыл шыршыһына Дәүләт Кремль һарайына Башҡортостандан 115 бала саҡырылған. Әкиәт тамашаһы 25 декабрҙә үтәсәк. Кремль шыршыһына балалар йорттарында һәм интернаттарҙа тәрбиәләнеүселәр, социаль яҡланмаған ғаиләләрҙән балалар, уҡыу алдынғылары, олимпиада, ярыш, ижади конкурстарҙа еңеүселәр, призерҙар һәм лауреаттар барасаҡ.

*АФАРИН!*

**Бөгөнгө заман шарттарында ғаилә ҡороу, уның нигеҙен һаҡлау йәштәр өсөн бик ауырға төшә, тигән зарланыуҙарҙы йыш ишетергә тура килә. Рухи ҡиммәттәр алышыныуы, бер туҡтауһыҙ матди проблемалар тыуып тороуы ғаилә тигән ҡәлғәне селпәрәмә килтерә лә ҡуя, тигән аҡланыуҙарҙы ла әленән-әле ҡабатлайҙар. Заман ғына ғәйепләме икән бындай хәбәрҙәргә? Атай-әсәйҙәребеҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙ рәхәт йәшәгәнме ни! Улар тормошо ла матди байлыҡтан һығылып тормаған даһа. Әммә улар иң мөһим таяуға - рухи байлыҡҡа нигеҙләп ҡорған донъяһын! Шул байлыҡтан ғаиләнең рухи ҡәлғәһе ҡалҡҡан. Ниндәй генә ауыр хәл килеп тыумаһын, ғаиләне ошо ҡәлғә һаҡлап торған бит. Бөгөн иһә йәш ғаиләләрҙең рухи донъяһы ел уйнатып торған ҡыуышты хәтерләтә. Тап шуның өсөн йәш иштәрҙең тарҡалыуы күбәйәләр. Ә рухи ҡәлғәгә һыйындырылмаған балалар насар ғәҙәттәр тотҡонона әүерелә...**

# БӘХЕТ ЙӘШӘГӘН УРЫН...

## ғаилә усағы дөрләгән өйҙә

Әммә йыл һайын үтеп торған "Йәш ғаилә" конкурсын ҡарағандан һуң борсоулы уйҙарҙан бер аҙ арынаһың кеүек. Сәхнәгә сыҡҡан татыу, ныҡлы ғаиләләрҙе күреп, күңелдә киләсәгебеҙ өсөн өмөт осҡондары ҡабына. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында үткән "Йәш ғаилә-2011" республика конкурсының гала-концертында ла шундай тойғолар уянды. Конкурстың финалына 12 ғаилә сыҡҡайны. Әммә йомғаҡлау тамашаһында алты ғаилә иң сағыу сығыштары менән һөйөндөрҙө.

Өфө, Күмертау, Октябрьский ҡалаларынан, Бөрйән, Ҡырмыҫҡалы, Йәрмәкәй районларынан килгән йәш ғаиләләрҙең һәр береһенең рухи, әхлаҡи ҡиммәттәрҙе үҙ итеүе аңлашыла. Әммә ул ҡиммәттәрҙең дә төрлө йүнәлештә, төрлө сағылышта булыуына иғтибар итергә мөмкин ине. Ҡала ғаиләләре, әйтәйек, үҙ сығыштарында замансараҡ күренгән йыр-бейеүҙәргә өҫтөнлөк бирҙе. Ғөмүмән, улар үҙҙәрен нигеҙҙә ҡала мәҙәниәте вәкилдәре итеп күрһәтте. Ҡала мәҙәниәтен икенсе төрлө массалар мәҙәниәте тип тә әйтергә була. Уның әхлаҡи ҡиммәттәр эсенә ниндәй кимәлдә инеү-инмәүе, әлбиттә, ҙур мәсьәлә. Әммә ундай мәҙәниәт бик киң даирәле, киреһе менән бергә ыңғай яҡтары ла етерлек. Бөтә хикмәт шундалыр: уны нисек файҙаланаһың, ниндәй кимәлдә үҙ итәһең. Ә бөгөн, бигерәк тә ҡалала йәшәп, ул мәҙәниәттән ситләшеп тә, ҡасып та булмай. Уның үҙ ҡанундары бар. Шуға күрә конкурста ҡаланан ҡатнашҡан йәш ғаиләләрҙең үҙ йәшәү рәүешен сәхнәгә сығарыуы бер ҙә ғәжәп түгел. Улар үҙ ҡиммәттәрен ыңғай яҡтан ғына күрһәтә алыуҙары мөһим. Был бурысын ғаиләләр уңышлы башҡарып сыҡты, тип әйтергә мөмкин.

Райондарҙан ҡатнашҡан ғаиләләрҙең сығышы иһә үҙенсә айырылып тора. Ауыл йәштәре тәү сиратта сәхнәлә үҙ халҡының йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен сағылдырҙы. Милли традицияларҙы тамашасыға күрһәтеп, уларҙы һаҡлап алып ҡалыу иң башта ауыл иңенә йөкмәтелә килә. Был да тәбиғи. Йәш ғаиләләр бына шул бурысты, маҡсатты тормошҡа ашырыуға үҙ өлөшөн индерҙе. Ошоно иҫәпкә алып, Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылынан Исламғоловтар һәм Ҡырмыҫҡалы районының Малай ауылынан Ғәйфуллиндар ғаиләһенә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы исеменән махсус бүләктәр тапшырылды. Исламғоловтар милли традицияларҙы сәхнәгә сығарыуы менән генә түгел, башҡа төрлө һәләттәре менән дә ҡалған ғаиләләрҙән айырылып торҙо. Актерлыҡ таланты, ижади табыштары, сығыштарының сағыулығы менән башҡаларҙан алдыра ине улар. Ошоноң менән миллилек сифаттарын да заманса баҙыҡландырып ебәреүгә өлгәштеләр. Бына шунышы иң мөһиме булғандыр. Исламғоловтарға лайыҡлы рәүештә Гран-при бирелеүенә бер кем дә дәғүә белдерә алмауы ла ҙур әһәмиәткә эйә. Гәҙел енеүҙәре менән тамашасылар, халыҡ алдында улар үҙҙәрен генә түгел, милләтте лә күтәрҙе бит. Исламғоловтар һәм Ғәйфуллиндар ғаиләләренең башлыҡтарына - атайҙарға һүҙ бирәйек әле:

**Рәмис ИСЛАМҒОЛОВ:** Биш балалы ғаиләлә үҫтем. Атай-әсәйҙән алған тәрбиәне хәҙер ҡыҙыма бирәм. Ҡатыным Айгиҙә хореография уҡытыусыһы. Шуға дүрт йәшлек ҡыҙыбыҙ ҙа бейеүгә бик әүәҫ. "Дан минуты" конкурсында сығыш яһап, иң йәш ҡатнашыусы номинацияһында еңеүсе булды. Ауылдарҙа милли традицияларҙы хәҙер күбеһенсә мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре һаҡлап киләләр ул. Ололар ҙа бар, әлбиттә, ләкин урта, йәш быуын үҙ мәҙәниәтен төплө белә, тип әйтә алмайым. Үҙ йолаларыңды белер өсөн беҙгә башҡа халыҡтарҙың да мәҙәниәтенә төшөнөү ҡамасауламаҫ ине. Тормошта сәхнәләге кеүек һәр ваҡыт күңелле йәшәп булмай, ләкин ғаилә усағын бер ҡасан да һүндерергә ярамай.

**Ғайса ҒӘЙФУЛЛИН:** Башҡа ғаиләләрҙән айырылмайбыҙ, айырылып торорға ла тырышмайбыҙ. Ни бары атаәсәнән күскән йолаларҙы, ғаиләнең ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап киләбеҙ, татыу йәшәйбеҙ, эште эш итеп күрәбеҙ, ваҡытында ял да итәбеҙ. Өс балабыҙ ҙа башҡорт телендә аралашып үҫә. Ҡатыным ауылда мәктәп директоры. Мәҙәни сараларҙа, конкурстарҙа бик йыш ҡатнаша. Ошо конкурста ҡатнашыу теләгене дә тәүҙә ул белдерҙе. Үҙенә күрә һынау булды ул беҙҙең өсөн. Конкурста ҡатнашып, бер-беребеҙгә тағы ла яҡынайҙыҡ. Ғаилә ошоно ныҒыраҡ тойһа, ул, әлбиттә, көслөрәк була. Үҙебеҙгә ышаныс та артты, шул уҡ ваҡытта яуаплылыҡ та өҫтәлде. Тәү сиратта балаларыбыҙ алдында. Беҙҙән өлгө алалар бит. Үҙем ғаиләлә төпсөк бала булып үҫтем. Шуға атай йортоноң нигеҙен ҡоротмайым. Яңы йорт та төҙөп бөтөп барабыҙ. Уныһы инде төпсөк малайым Ильясҡа буласаҡ. Беҙҙең халыҡ талантлы, тик уны дәртләндереп торорға кәрәк. Шуға башҡаларҙы ла бындай конкурстарҙа ҡатнашырға саҡырыр инем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғаилә тормошо хаҡында бер хикәйәт бар. Ни өсөндөр бер йорттан бәхет сығып китергә булған. Оҙаҡ йылдар йәшәгән өйҙө ташлап китер алдынан һәр ғаилә ағзаһының бер теләген үтәйем, тигән ул. "Һин ни теләйһең", тип һораған бәхет хужабикәнән. "Минең шәшке туным юҡ", тигән хужабикә һәм тунға эйә булған. "Нимә теләйһең", тип хужабикәнең өлкән ҡыҙынан һораған бәхет. "Мин сит илдә йәшәгән кешегә кейәүгә сығырға теләйем", тигән ҡыҙы. Уның да теләге ҡабул булған. Хужабикәнең малайына сират еткән. "Велосипедым булһа, бәхетле буласаҡмын", тигән ул. Малайҙың да теләген үтәгән бәхет. Өйҙән сығып барғанда ул хужаны күреп ҡалған. Ә һин нимә теләйһең, тип һораған унан бәхет. Хужа бер аҙ уйлап торған да: "Йортомдан бер ҡасан да ғаилә усағының йылыһы китмәһен, тип теләйем", тигән. Бәхет хужаның теләген үтәгән һәм өйҙән сығып китмәгән, сөнки бәхет ғаилә усағы дөрләгән өйҙә генә йәшәй. Әлеге конкурста ҡатнашыусылар ҙа ошо хәҡиҡәтте аңлаған ғаиләләр икәнен сәхнәлә, тамашасы-шаһиттар алдында раҫланы.**

**Әҡсән МӨНИРОВ.**




## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы

### Хәрәкәттә булығыҙ



Сәләмәт йәшәү өсөн көнөнә ун мең аҙым йәйәү йөрөгөҙ. Көнөнә дүрт сәғәт тирәһе саф һауала булырға тырышығыҙ. Сөнки йәйәү йөрөү матдәләр алышыныуын яҡшырта, уның үҙәк нервылар системаһына, быуындарға файҙаһы ҙур. Хәрәкәт аҙ булһа, йөрәк ауырыуҙары, шәкәр диабеты, һимеҙлек сире барлыҡҡа килә. Хәрәкәт итеү ҡорһаҡ мускулдарын да ныҒыта, был үҙ сиратында ғүмерҙе оҙайта.

### Яңаҡ биҙе шешһә

❖ Кесерткән орлоғон төйөп йәки быуҙа тотоп, ҡолаҡ алдына бәйләргә. Был дауа теш һыҙлауын да баҫыр; ❖ ҡуҙғалаҡты төйөп, ҡолаҡ янына бәйләргә; ❖ 200 грамм кәкерттә 50 грамм гәрсис (горчица) оно менән бергә 100 мл йылы һыуҙа бутарға һәм яңаҡ биҙенә бәйләп ҡуйырға; ❖ ҡара ҡурғаш пластинкаларын бәйләү ҙә килешә.

### Ҡайнар ванна

Ҡайнар ванна ла дауа була ала. Мәҫәлән, һеңерҙәргә зыян килеүҙән бармаҡтар кәкерәйгәндә ҡайнар ваннаға ҡулдарҙы тығып торорға була. Ул түбәндәгесә эшләнә: ваннаны бер көндә аш тоҙо, бер көн сода һалып әҙерләргә. Процедураның ваҡыты 30 минут, тоҙ менән соданы күпме теләйһегеҙ, шунса һалығыҙ.

### Тоҙ ҡыуыу

Организмдан тоҙ ҡыуыу өсөн: 0,5 кг кәрәндә (хрен) әрсемәйенсә яҡшылап йыуырға, ит үткәргестән үткәрергә һәм өҫтөнә сыҡҡансы 1,5 л һалҡын һыу ҡойорға. 12-15 сәғәт тотҡас, һөҙөргә. Һөҙгәндән һуң ҡалған кәрәнгә яңы ҡайнап сыҡҡан һыу ҡушырға (һыу кәрәндә саҡ ҡына ҡапларлыҡ булһын). Һыуынғас, тағы ла һөҙөргә, кәрәнен һығып ташларға. Килеп сыҡҡан шыйыҡлыҡҡа 0,5 л бал өҫтәргә, һыуытҡысҡа ҡуйырға. Банка өҫтөн марля менән ябырға. Көнөнә 3 тапҡыр, ашағандан һуң 2-шәр ҡалаҡлап эсергә. Кәрәк тип тапһағыҙ, был исулды йылына 2-3 мәртәбә эшләй алаһығыҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

**✓ Башҡорт теле уҡытыусыһы ябай педагог ҡына түгел. Ул сәйәсмән, дипломат та. Шуға ла һәр көн, һәр аҙым һайын һүҙ әйтергә бәләкәй генә хоҡуҡ өсөн дә көрәшергә тура килә.**






# БАЛАЛАРҘЫ ӨЙЛӘНДЕРЕҮ...

## ата-әсәнең төп бурысы

**Кейәүгә биреү ваҡыты килеп еткәс, ҡыҙ баланы, ни ҡәҙәр генә малһыҙ һәм йыһазһыҙ булһа ла, динле, гүзәл тәрбиә алған кеше менән ҡауыштырырға тырышыу - ата менән әсәнең бурысылыр. Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡыусы һәм кешеләрҙән оялыусы зат, ҡатынын һөйһә, уны хөрмәт менән тотор.**

Малына йәки дәрәжәһенә ҡыҙығып, боҙоҡ инаныулы, дингә иғтибарһыҙ кешеләргә ҡыҙ биреү ярамай. Донъя малы ни ҡәҙәр күп булһа булһын, донъя дәрәжәһе ни ҡәҙәр бейек һаналһа һаналһын, әхирәт ғәләменән күсереп иҫәпләгәндә, ул юҡ хөкөмөндәлер.

Балаларҙы өйләндергәндә ата һәм әсәгә балаларҙы йәберләү рөхсәт ителмәгән кеүек, уларҙы тамам үҙ ихтыярҙарына ҡалдырып, ситтән күҙәтеүсе булып тороу ҙа ярамай. Тамам үҙ ихтыярҙарына бирелһә, йәшлек иҫәрлеге сәбәпле яңылышырҙар, яңылышыуҙарын белмәй ҙә ҡалырҙар. Бының һөҙөмтәһе булараҡ, оло үкенестәргә осрарҙар.

Хәл былай булғанда, ата һәм әсә үҙҙәренең камил солтан булыуын, балаларын өйләндергәндә үҙ ихтыярҙарына ҡуйырға ярамағанлығын, мөмкин булған хәүеф-ҡурҡыуҙарын ҡыҙҙарына һәм улдарына аңлатып бирергә тейеш.

Ирекһеҙ сүрәттә булған никахта күңелдәр бер-береһенә тартылмағанлыҡтан, йәштәрҙең тормошо зәһәрле һәм йәһәннәм ғазабы дәрәжәһендә ауыр булыуы мөмкиндер. Балаларҙың бәхетле булыуын теләгәндә көсләп никахлау ярамаҫ.

Ирекһеҙләп өйләндереү йәки ирекһеҙләүгә бик яҡын булған никахтарҙың сәбәбе - ирҙәрҙең ҡарт йәки бай булып, ҡыҙҙарын бай ҡатыны итеп, бәхетле йәшәтеү теләге булыр. Ләкин бәхет тип аталған нәмә бер ваҡытта ла мал менән һатып алынмаҫ. Шуның өсөн йәш ҡыҙҙарҙы йәштәренә тура килмәгән ҡарттарға, тәрбиәле ҡыҙҙарҙы тәрбиәһеҙ байҙарға биреү - фәҡәт мал бәрәбәренә барлыҡты һәм бәхетте һатыуҙыр.

Аҡыл һәм шәриғәт теләгән никах - ата һәм әсәнең, өйләнеүсе балаларҙың ризалыҡтары һәм шатлыҡтары менән булдырылған никахтыр. Әгәр ҙә балалар, үҙҙәренең ябайлығы һәм тәжрибәһеҙлеге сәбәбенән, ата менән әсә белдергән ҡараштарға ризаһыҙлыҡ күрһәтһә, был тәҡдирҙә өйрәнеү юлы менән күңелдә булған шөбһәне бөтөрөү өсөн тырышыу кәрәк булыр. Нисек кенә булһа ла, балаларҙы ирекһеҙләп өйләндереү - ярай торған эш түгел. Сөнки ихтыяждарынан башҡа һатылып китергә улар мал түгел бит.

Бер-береһенә ҡарата тәрбиә йәһәтенән ҡәнәғәтләнерлек булған һәм бер-береһен теләгән егет менән ҡыҙҙың никахына фәҡәт фәҡирлеген сәбәп итеп кенә ризалыҡ бирмәгән ата менән әсә үҙ бурысын үтәгән тип иҫәпләнмәҫ. Сөнки әхлағы гүзәл булған кешенең фәҡирлеге һис ғәйеп түгел. Малһыҙ кеше - кешеһеҙ малдан хәйерле түгелме?

ТЕЛЕМ-ТЕЛГЕНӘМ...

# МИЛЛӘТЕНӘН СИТЛӘШКӘН ЙӘЛ



**Беҙҙең балалар урыҫ мәктәптәрендә уҡыһалар ҙа, "Беҙ башҡорттар", тип ғорурланып, саф башҡортса һөйләшеп үҫте. Улар башҡортса китаптар, гәзит-журналдар уҡый, ә ҡыҙҙарыбыҙ икеһе лә, әсәләре кеүек, башҡорт халыҡ йырҙарын да йырларға әүәҫ.**

Улыбыҙ Рәйес башҡа милләт ҡыҙына өйләнеүҙе күҙ алдына ла килтермәй ине. Заводта бергә эшләүсе ҡыҙ менән танышҡас, ҡыҙҙың паспортындағы милләт графаһына "башҡорт" тип яҙылғанын күрә һәм: "Ул да башҡорттор, тик теле генә башҡасараҡтыр", - тип уйлай. Ул ҡыҙ Балтас районының Яңы Ташкүл ауылынан һәм, ысынлап та, төньяҡ-көнбайыш диалектта һөйләшеүсе башҡорт булып сыҡты.

Күп тә үтмәй, ҡатыным, улым менән өсөбөҙ буласаҡ киленебеҙҙең ата-әсәһе менән танышыр өсөн ауылдарына барып ҡайтырға тип юлға сыҡтыҡ. Шаҡшанан Өфөгә тиклем электричкала, Өфөнән Бөрөгә, Бөрөнән Иҫке Балтасҡа тиклем автобуста, унан Штандыға тиклем ЗИС-5 йөк машинаһының кузовында барҙыҡ. Штандынан Яңы Ташкүлгә урман аша 5 саҡрымды ат менән генә барырлыҡ юл үтергә кәрәк. Аптырап торғанда, ошо ауылдарҙы берләштергән колхоздың баш инженеры машинаһы менән килеп сыҡты. Беҙҙең ҡайҙа барыуыбыҙҙы белгәс, өсөбөҙҙө лә ултыртып алды. Кешелекле һәм кеселекле заттар бар бит ул донъяла. Ул туп-тура беҙҙе буласаҡ ҡоҙабыҙҙың ҡапҡа төбөнә килтереп еткерҙе. Ҡоҙа-ҡоҙағый буласаҡ Фәйезовтар менән матур итеп һөйләшеп сәй эскәндән һуң, мулла саҡырып, йәштәргә никах уҡытып та ҡуйҙыҡ. Был тиклем йыраҡ ергә ҡунаҡтарҙы бимазалап йөрөтмәҫ өсөн туйҙы Шаҡшала ғына үткәрергә һөйләштек һәм шулай эшләнек тә.

Ҡоҙа-ҡоҙағый менән һөйләшеүҙән шуны аңланым: Балтас районының Яңы Ташкүл ауылында элек-электән башҡорттар көн иткән. Ҡоҙам Фәйезов Ҡәүи ҙә, уның ҡатыны ла башҡорттар. Уларҙың алты балаһының - Фәйрүзә, Кларида, Әҙһәм, Әҡсән, Фәрзәнә һәм Фәриҙәнең һәр береһенең тыуыу тураһындағы таныҡлығына, милләте башҡорт, тип яҙылған. Тик мәктәпкә барып, ун йыл буйы татар телендә белем алғас, дәреслектәрҙән "Республикабыҙ - Татарстан, башҡалабыҙ - Ҡаҙан" тип уҡығас, улар үҙ милләттәрендә бутала. Иптәштәре һәм туғандары менән башҡорт теленең төньяҡ-көбайыш диалектында аралашыуҙарына ҡарамаҫтан, дәреслектәрҙә яҙылғанды ҡабатлап, "Беҙ татар", тип үҫәләр. Ғалим Әнүәр Әсфәндийәров үҙенең хеҙмәтендә Иҫке Ташкүл менән Яңы Ташкүл башҡорт ауылы булыуы тураһында яҙа. Шул районда тыуып үҫкән тарихсы Әбүбәкер Усманов та ауылдаштарына: "Беҙҙең тел бит татар теле түгел - башҡорт теленең төньяҡ-көбайыш диалекты", - тип аңлата торған булған...

...Шулай итеп, улым менән киленем татыу ғына йәшәп киттеләр. Ике ейәнебеҙ тыуҙы. Балалар беҙҙең ҡул аҫтында оҙаҡ йәшәргә теләмәне, икенсе фатирға күсеп киттеләр. Ейәндәрҙе тәрбиәләшеүҙән, бигерәк тә уларҙы туған телгә өйрәтеүҙән мәхрүм булып ултырып ҡалдыҡ. Һөҙөмтәһе шул булды: ейәндәр әсәләренә эйәреп, татарса һөйләшә башланы. Улыбыҙ өндәшмәй, балалары ниндәй телдә һөйләшһә лә, уға барыбер һымаҡ. Ә беҙ, төньяҡ-көнбайыш диалектта һөйләшкән башҡорт киленебеҙ беҙгә, улыбыҙға эйәреп, әҙәби башҡорт телен үҙләштерер, балаларын да шул телгә өйрәтер, тип өмөтләнгәйнек. Йәл, сит телдә уҡыу, сит мәҙәниәтте, тарихты өйрәнеү барыбер ҙә үҙенекен итә, үҙ тамырҙарынан ситкә алып китә икән милләттәштәрҙе...

**Ҡазыйхан ҺАҘЫЕВ,**
**Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, 2-се төркөм инвалиды.**

ШАҢДАУ

# ТУҒАН ТЕЛ УҠЫТЫУСЫҺЫ...

## сәйәсмән дә, дипломат та булһын



**"Киске Өфө"нө даими алдырам. Унда донъя күрә килгән мәҡәләләрҙе яратып уҡыйым. Гәзиттең 41-се һанында баҫылған "Үҙ илендә йәшәп, үҙ илен һағынып йәшәйҙәр" тигән мәҡәлә уйландырҙы.**

Мин үҙем дә Силәбе өлкәһенең Сосновка районында Сиреүсе (Табын) ауылында тыуып үҫкәнмен. Өфөлә педагогия институтын тамамлап, тыуған ауылымда ете йыл рус теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡыттым. Инде күптән Өфөлә йәшәйем. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһымын. Ошо йылдар эсендә шуны аңланым: башҡорт теле уҡытыусыһы ябай педагог ҡына түгел. Ул сәйәсмән, дипломат та. Шуға ла һәр көн, һәр аҙым һайын һүҙ әйтергә бәләкәй генә хоҡуҡ өсөн дә көрәшергә тура килә. Өндәшмәһәң, битараф ҡалһаң, һине ситкә этәрергә әҙер генә торалар.

Мин үҫкән саҡта тыуған ауылым халҡы башҡортса һөйләшеп, башҡортса йырлап йәшәй ине. Йәштәрҙең "Иҙел"де йырлап, урам буйлап үтеүе йөрәгемдә уйылып ҡалған. Туйҙар йолалар буйынса үтә торғайны. Туған телгә һөйөү уятыуға уҡытыусыбыҙ Ғилмит Насир улы Хәкимов ҙур йоғонто яһаны. 8-се синыфта уҡыған мәл хәтерҙә ныҡ һаҡланған. Яҡташыбыҙ Ғәлимов Сәләмдең ижадын өйрәнәбеҙ. Һәр дәрес шағирҙың "Ап-аҡ ташҡа баҫып ҡарап торҙом Республикамдың мин иртәһен!" тигән юлдарҙан башлана, беҙ ул поэманы яттан белә инек. Ғилмит ағай башҡорт йырҙарын бик яратты. Йорто янында бейек тирәктә уның радиоһы эленеп торҙо. Йәйге иртәләрҙә радионан Фәриҙә Ҡудашева, Мәғәфүр Хисмәтуллин, башҡа йырсыларҙың моңло тауыштары яңғырап торор булды. Ошо ябай ғына ғәмәлдәр ҙә күңелгә туған моңдо, башҡорт һүҙен һеңдереүгә булышлыҡ иткән бит.

1966 йылдың май айы. Мин - сығарылыш синыф уҡыусыһы. Шул көндәрҙә әсәйем мәктәп йыйылышынан ҡайтып инде һәм, иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ, тигәндәй, былай тине: "Ҡайһы бер ата-әсәләр балаларына башҡорт телен уҡытыуҙан баш тартты". Эш нимәлә? Улар фекеренсә, бала башҡорт телен өйрәнһә, башы буталып, русса насар белә, йәнәһе. Бына шулай, ниндәйҙер бер наҙандың һүҙҙәренә эйәреп, үҙ ҡулыбыҙ менән үҙебеҙҙе быуабыҙ шул ҡайһы саҡта. Шул ваҡыттан бирле ауылымда башҡорт телендә һөйләшеү онотола бара.

Бөгөн, Силәбелә булһынмы, Башҡортостандамы, һәр башҡорт туған телен өйрәнһен өсөн, башҡорт теле дәрестәрен һаҡлап ҡалыу өсөн көс һалырға кәрәк. Был тәңгәлдә битараф ҡала алмайбыҙ. Тел бөтһә бит - ил бөтә.

**Рәйсә ӘСӘҘУЛЛИНА.**
**Өфө ҡалаһы.**

# "ӨФӨ" АТАМАҺЫНЫҢ...

## тарихи сығанаҡтарҙа сағылышы



**1. Боронғо гректар мәғлүмәте.**

Беҙҙең эраға тиклем VII быуатта уҡ гректарға Өфө дин үҙәге торған изге тау билдәле булған, улар уны Рипа (Үр-Өпә//Үр-Өфө йәғни Өфө торған үр - тау), Рипей (Үр-Өпә-өй), Рифей (Үр-Өфө-өй) тауҙары тип яҙған. Ғөмүмән, Урал тауҙары ла шул исемдә йөрөгән.

**2. XI быуаттағы Мәхмүт Ҡашғариҙың "Төрки телдәре һүҙлеге"нә теркәлгән географик карта.**

М. Ҡашғари Каспий диңгеҙенең төньяғынан буйлап көнбайыштан көнсығышҡа табан үткән һәм шул йүнәлештә осраған төрки ҡәүемдәрҙең бер-бер артлы урынлашыу тәртибен төньяҡҡа табан һуҙылған һыҙыҡтар ярҙамында билдәләп яҙған. Был ерҙәр - ул саҡтағы Башҡортостандың көньяҡ сиге булып тора. Төньяҡҡа табан тартылыусы Ирәмәл (Урал) тауҙары, Яйыҡ (Жайҡан), Иҙел һ.б. йылғаларыбыҙ, исемле һәм исемһеҙ бик күп ҡалаларыбыҙ билдәләнгән. Шулар араһында беҙҙең был мәҡәлә темаһына иң ҡыҙыҡлыһы - Ағиҙелгә Өфө (исемдәре яҙылмаған) йылғаһы ҡойған ерҙә тирә-яғы һыу менән уратыулы "утрау"ҙа (тап баяғы Алтай тауындағы сал карталағылай!) урынлашҡан изге ҡуш ҡалабыҙ: Иуфи (Өфө) - хәҙерге Иҫке Өфө яғы һәм Ҡуба (Ҡоба тау)- хәҙерге телебашня торған яҡ.

**3. Беҙҙең эраның VI быуат башы, Ҡытай тарихнамәһе.**

500 йылда, башҡорттоң бөйөк Ҡошан империяһының төньяҡ (Эске Башҡорт һәм Тышҡы Башҡорт) яртыһында тәхетләнеп ултырмыш бөйөк Афзал ҡағандың вафатынан һуң, унының вариҫтары араһында тәхет өсөн башланған болғаҡлыҡтан файҙаланып, Ҡошандың һәм Ҡытайҙың ҡан дошманы жужандар Ҡошанға ябырыла. Арал диңгеҙенең төньяҡ ярында башҡорт һәм жужан ғәскәрҙәре ҡаты бәрелешеп, башҡорт ҡағаны Ими-Бату көнбайышҡа ҡаса, ә жужан ханы Таған төньяҡ тауҙарҙағы Өфө (Иву) ҡалаһына килеп етеп туҡтала. Тап шул осорҙа көнсығыштағы Турфан ҡалаһының гөбөрнаторы, үҙен шул Иву (Өфө) ҡалаһына илтеп ҡуйыуҙы һорап, Ҡытай императорынан юл һағауылына ғәскәр саҡыртҡан булған; ошо ғәскәр тураһында мәғлүмәт алған жужандар, ҡурҡышып, кире ҡабат үҙҙәренең далаһына тәгәрләй; ә быны ишеткән Ими-Бату иһә ғәскәре менән жужандарҙың артынан төшөп, Арал диңгеҙенең төньяғында жужандарҙы тулыһынса тар-мар итә, Таған ханды үлтереп, сәсен тиреһе менән ҡуша һыҙырып алып, Ҡытай ғәскәр башлығына улъя ҡылып ебәрә. Оҙаҡламай тағы Ҡытай императорына илселек арҡылы бүләктәр ҙә оҙатыла: биш аҫыл арғымаҡ, алтын-көмөш, кеш йәнлек тиреләре һәм төрлө сәнғәт әҫәрҙәре. Ҡытайҙан да йәнә илселек килеп, моң ҡоралдарының бөтә төрҙәре менән һикһән музыкант, бурҙат төҫлө - ун төргәк, төрлө төҫлө алтмыш төргәк ебәк туҡымалар тапшырыла бүләккә. Бүләктәрҙе ҡабул ҡылып алыу билдәһе итеп, Ими-Бату Ҡытай һарайына бер килке сәнғәт әҫәрҙәре менән тағы бер илсеһен оҙата. 516 йылда Ими-Бату ғәскәрҙәре жужан ханы Вафа (ҡытайҙарса Фубахан) ғәскәрҙәре менән бәрелешеп, Ими-Бату әсир алына. Вафа хан уны, атландырған килеш ат бауыры аҫтына аяҡтарын ҡуша шаҡарып бәйләп (иғтибар итегеҙ: эпосыбыҙҙағы Күҫәк бей Ҡарағөләмбәткә ҡулланған яза!), ат арҡаһында бер өҙләкһеҙ һелкетеп йөрөтөп үлтерә, баш һөйәгенән эсер өсөн туҫтаҡ яһатып ала. Ими-Батуҙың яҡындары Иран яғына ҡаса. Тәхеткә Ими-Батуҙың кесе ҡустыһы ултыра, уны "Өфө (Иву) ҡағаны" тип яҙып йөрөтәләр, һәм ул Ҡытай һарайы менән илселәр алыша. 521 йылда "Өфө ҡаған" жужандарҙы тар-мар итеп, хәҙерге монгол далаларына ҡыуа. 522 йылда Ҡытай һарайына һуңғы тапҡыр килә унының илсеһе, ыңғай һөйләшеп, бик күп бүләктәр алып ҡайтып китә. Ләкин Өфө (Иву) ҡаған оҙаҡламай жужандар менән нәүбәттәге бәрелештә еңелеп, ҡаш менән күҙ араһында үҙенең кесе ҡустыһы Яйыҡҡай (Юегюй) тарафынан үлтерелә, тәхеткә Яйыҡҡай ултыра. 534-537 йй. араһында Яйыҡҡай үҙе лә жужандарҙан еңелеп һәм мәрхүм ҡаған Өфөнөң улы Бәҙи (Биди) тарафынан үлтерелеп, тәхеткә Бәҙи ултыра, ә үлтерелмеш Яйыҡҡайҙың улы Һәүбән иһә Ҡытай һарайына ҡаса ла тиҙҙән ауырып үлә. Күп йылдар буйы үҙ-ара талаш-тартыш арҡаһында дәүләтебеҙ ныҡ бөлөп, жужандар уғата көс туплап өлгөрә. 540 йылғы нәүбәттәге һуғышта Бәҙи жужандарҙан тамам еңелеп, Бәҙиҙе лә тыуҙырмыш ошо шанлы "бүре малайҙары" тарафынан төҙөлгән, Бөйөк Ҡошан империяһының төньяҡ яртыһын тәшкил иткән дәүләтебеҙ йәшәүҙән туҡтап ҡыйрала.

**4. VIII быуат ғәрәп ғалимы Мөхәммәт ибне Муса әл-Хваризми яҙған "Ер һүрәте" китабы.**

Етенсе климаттан (45 градус арҡауҙан) төньяҡтараҡ урынлашҡан ҡалалар исемлегендә: Ауфатарийа. Географик координаттары: 55 градус 20 минут буйлыҡ (долгота), 52 градус 10 минут арҡау (широта). Был билдәләмә баш ҡалабыҙ Өфө торған координатҡа тап килеүен иҫәпкә алһаҡ:

Ауфа-тар-ийа - Өфө-Тора-өйө, йәғни - "хан тәхете торған өй Өфө".

**5. X быуат ғәрәп географы Ибне Һаукал яҙмалары:**

"Хазарға яҡын, Иҙел буйында, Бертас (Бүре-Атас йәғни ата бүрегә табыныусы Күбәләк-Тиләү башҡорттары. - **Й.С.**), ләкин ул кешеләрҙең ере ғөмүмән Хазар, Ырыҫ йәғни Сәрир (Ырыҫ йәғни Сәрир - Үҫәргән башҡорттары. - **Й.С**) тип атала... Был ырыҫтар өс ҡәүем тәшкил итә: береһе Болғар иленә яҡын; унының батшаһы Гунаба (Көн-Аба//Көн-Өфө. - **Й.С.**) ҡалаһында йәшәй, был ҡала Болғар иле баш ҡалаһынан ҙурыраҡ. Икенсе ҡәүеме Артандар йәғни Артайҙар тип атала; унының батшаһы Арт (ғәрәпсә боҙоп яҙылған, йәки боҙоп уҡылған Артау//Уртау -хәҙерге Орск. - **Й.С.**) ҡалаһында йәшәй. Ә Желәбе (Силәбе. - **Й.С.**) исемле өсөнсө ҡәүем үрҙәрәк урынлашҡан. Ләкин сауҙагәрҙәрҙән бер кем дә Болғар баш ҡалаһынан артабаныраҡ бармай; берәү ҙә Артауға тиклем бармай, сөнки ул ерҙәрҙә йәшәгән кешеләр осраған һәр бер сит ил кешеһен үлтерә".

Күренеүенсә, бында ла Башҡортостан тасуирланған һәм Көн-Өфө (хәҙерге Өфө) ҡалаһы үҙ исемендә яҙылған.

**6. 1221 йылда Сыңғыҙ хан ыҫтанына Ҡытайҙан илсе булып килгән Чжао Хундың яҙмаһы.**

"Үҫәргән тәүәрихе"ндәге шәжәрә буйынса самалаһаҡ, әле әйтелгән Түлғата Байан - Бөйөк Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы Нөн-Өфө тәхетендә ултырған кенәз - көләр Ҡаҙансы Тура улына, ә Ҡоман-Гүзәл - Туҡсаба Ҡаҙансы улына, Селәүһен Ҡайсы - Ҡарада Ҡиә Ҡаҙансы улына һәм Ябаға - Ислам Ҡиә Ҡаҙансы улына тап килә. Был өсәү ысынлап та Көн-Өфө тәхет эйәһененең улдары икәнлеген ышаныслы тоҫмаллатҡыс мәғлүмәт бар ҡытайҙарҙың тәүәрихендә. Беренсенән, уларҙың атаһы Ҡаҙансы, ошо исеме менән түгел, ә үҙе тәхеттә ултырған баш ҡалаһының исеме менән ләҡәпләнә унда, ҡытайҙар тәүәрихендә: "Кун-вэнь Кува" йәки "Кун-вень У-хэ". Быларҙан шул күренә: Кун-вэнь тигәне - Көн-Апан (Көн-Әсә), Ку-ва тигәне - Ҡоба (хәҙерге Ҡоба тау), йәғни "Ҡоба тау ҡалаһының көнәсе//кенәзе"; ә ләҡәптең икенсеһе (У-хэ) лә шулай уҡ: "Өфө (Өхө) кенәзе...

**7. "Үҫәргән тәүәрихе"ндәге батшалар шәжәрәһенән.**

Трә (Тура) бин Баба Төкләс - XII быуатта йәшәгән Турахан үҙе. Был Тура-хандың ҡәбер кәшәнәһе унының баш ҡалаһы булған хәҙерге Өфөнән алыҫ түгел Шишмә районының Түбәнге Тирмә ауылы эргәһендә һаҡланған әлегәсә, архитектор-белгестәр унының ҡоролошон ысынлап та XI - XII быуаттарға ҡарата (Б.Г. Калимуллин. Башкирское народное зодчество. Уфа, 1978; 114-се бит).

Боронғо башҡорт тәүәрихсеһе Ҡыҙрас Муллаҡаевтан заманында атаҡлы П.И. Рычков (Топография Оренбургской губернии, Уфа - 1999; 372 - 373-сө биттәр) һорашып яҙып алғанса, "хан Тура бин Баба Төкләс оҙонлоғо ун саҡрымға һуҙылмыш бөйөк Өфө ҡалаһының аҙаҡҡы ханы булған". Мәсетле районы Һөләймән ауылында табылған Әйле ырыу шәжәрәһендә боронғо Башҡортостан 9 ханлыҡҡа бүленгәнлеге, һәр бүлемдә кем хан булып торғанлығы күрһәтелеп, "1-се. Өфи ҡәлғәсен, Дим тамағын Тирәй хан биләде", - тип әйтелгән, йәғни "Тирәй" тигәне - Торахан. (Башкирские шежере. Филологические исследования и публикации. Уфа - 1985, 67-нсе бит).

**8. XIII быуат: төрөк солтандарының бабаһы - Өфөнән.**

XIII быуат башында Ғосман дәүләтенең (хәҙерге Төркиәнең) беренсе нигеҙ ташын һалған һәм артабан дауам иттерткән Иртоғрил бәһлеүәндең асылда кемлеген, ҡайҙан һәм ҡайһы ырыуҙан килеп сыҡҡанлығын әлегәсә бер кем дә төплө генә белмәгәнлектән, шуны башҡорт хәтеренә таянып билдәләү мөмкин.

Иртоғрил исемен тап шул "Үҫәргән тәүәрихе"нең 60-сы битендә Мүйтән бей ейәне Йоруҡ (Жеруҡ) исеме тәңгәлендәге тарихи аңлатма рәүешендә күрәбеҙ: "Жеруҡ, Тоғрил хан заманында бәк булып, хөкүмәт итер ине". Тимәк, шәжәрәне төҙөүселәр бәһлеүәнебеҙ Иртоғрилдың алыҫтағы Анталияла бөйөк хан-солтан дәрәжәһенә ирешеүен, ә Мүйтән ейәне Йоруҡ иһә унының шанлы бейҙәренең береһе булғанлығын яҡшы белгәндәр. Ана шул хан-солтанлығын иҫәпкә алыптыр инде, "Үҫәргән тәүәрихе"ндә Иртоғрил нәҫелдәренең бөйөк төрөк солтандары рәүешендәге үҙаллы-айырым шәжәрәһен төҙөгәндәр. Был ҡомартҡы хәҙерге ғилми белешмәгә лә (К.Э. Босворт. Мусульманские династии. Справочник по хронологии и генеалогии. М., 1971, 185 - 186-сы биттәр) шаҡтай тап килеү генә түгел, хатта уны бер килке мәғлүмәттәр менән байыта ла. Әммә беҙҙе шәжәрәнең изге ҡалабыҙ Өфөгә бәйле баш өлөшө ҡыҙыҡһындыра:

1. Бәһлеүән Тоғрил (Ир-Тоғрил).

2. Хан бин Тоғрил Ғосман Ғази.

3. Солтан Ур хан Ғази бин Ғосман.

(Күренеүенсә, был унының исеме түгел, ә ләҡәбе: Ур йәки Уртүбә ҡалаһының ханы, тигән һүҙ. Был Уртүбә - хәҙерге Ур йылғаһы тамағында Орск ҡалаһы урынындағы боронғо ҡалабыҙ, 1391 йылда уны Аҡһаҡ Тимер емергән. Атаһы Ғосман Ғази вафатына тиклем был зат Башҡортостандың Ур ханы булып торғандыр. "Ур хан тарих 724-селә" (һижрә менән) тигән аңлатмаһы бар).

4. Солтан Морат Өфө бин Ур хан Ғази. --

(Атаһы Ур хандың, йәғни аҙаҡ Ғосман дәүләте солтанының, вафатына тиклем был зат Башҡортостандың Өфө ханы булып торған).

5. Йылдырым Баязид... (артабан дауам итә).

9. XV быуаттағы "Өфө ханы".

Урыҫ йылъяҙмаларында 1481 йыл менән билдәләнгән "хан Тюменский" Ибан// Ивак//Упак шул йылда үҙенең улдары Муса, Ямғырсы менән бергә Азов диңгеҙе яҡаһында ҡышларға ҡалған Алтын Урҙа ханы Әхмәтте барып үлтерә.

Был Ивак//Упак - "Өфө (Өфө) кенәзе" тигән һүҙ, ә асылы - башҡорт Уаҡҡас хан. Өфө кенәзе булып ултырған сағында Уаҡҡас үҙенең кейәүен - Себер ханы Марҙы үлтереп, унының тәхетендә (Төмән ҡалаһы) хан булып ҡала, ләкин урыҫ йылъяҙмаларында һаман Ибак//Упак - Өфө ханы исемендә яҙылып йөрөй.

Килтерелгән бөтә мәғлүмәттәр изге ҡалабыҙ Өфөнөң саллығын, "донъя яратылған" мифик замандарҙан уҡ барлығын һөйләй.

**Йыһат СОЛТАНОВ.**

✓ *Үҙебеҙҙең хоккей командаларыбыҙ бар. Боҙ туңҙыу менән һаҡмар йылғаһында ярыштар үткәрәбеҙ. Командалар составында 6 йәшлектәр ҙә, Таһир исемле ағайыбыҙ кеүек 60 йәшлектәр ҙә бар.*



**Бөгөн, ысын ир тәрбиәһе ниндәй булырға тейеш, тигән һорауға яуап эҙләйбеҙ икән, тимәк, тормошта ул проблема бар. Шулай уҡ был һорауға яуап бирерлек өлгөләр ҙә бар. Шундай өлгөләрҙең береһе тураһында һөйләй Баймаҡ районы Билал мәктәбендә уҡытыусы булып эшләүсе Иршат Мосауар улы ӘМИНЕВ.**

## Ысын ирҙәр ҙә илай икән…

Оҙаҡ йылдар уҡытыусы булып эшләп, әлеге көндә тыҡһан һигеҙенсе йәше менән барған атайым Мосауар Айытбай улы Әминев тәрбиәһе тураһында бәйән итмәксемен. Ул әсәйем менән 9 бала үҫтереп, барыбыҙҙы ла уҡытып, кеше итте. Тырыш, кешеләр менән матур мөғәмәлә итә белеүсе, аҡыллы йәшәүсе, бар нәмәне нескә тойоусы атайым беҙҙә лә ошондай сифаттар тәрбиәләргә тырышты. Ул беҙҙең өсөн иң талапсан уҡытыусы ла, шул уҡ ваҡытта иң яҡын дуҫ та... илайым", - тип яуаплаған ул. Ул йылдарҙа беҙҙең ыңғайға йөрөп, ут яғып, сәй ҡайнатып, салғы сүкергә, һис юғы, усаҡҡа утын ташырға булһа ла ялаңға сығырға тырыша ине атайыбыҙ. Ә был юлы, ял иттерәбеҙ, тигән булып, уның күңелен уйламағанбыҙ икән...

## Ата менән ул дуҫлығы бар ул

Көнбайышта атай менән уландар мөнәсәбәттәренә иғтибар ҙур. Һәр хәлдә, ул менән атай араһында дуҫтарса мөнәсәбәт булырға тейеш, тип ҡарала. Йәғни, ҡайҙа ғына эшләһә лә, ни тиклем генә эш менән мәшғүл булһа ла, яҡшы атай ғәләкәй генә сағыбыҙҙан беҙҙең менән бергә ҡышын сәкән һуҡты, яҙын ер ҡарҙан әрселә башлау менән бура уйнаны, йәйен туп типте. Ҡумәкләп сәкән уйнаған саҡта төшөрөлгән фотолар ҙа һаҡланған. Уларҙы ҡараған һәр кем бала саҡ хәтирәләренә бирелеп китә. Атайымдың йәштәштәре Харис, Хәмит ағайҙар ҙа беҙҙең менән бергәләп төрлө уйындар уйнай ине. Оло йәштәгеләрҙең үҙ балалары менән бергә сәкән һуғыуы беҙҙең ауылда әле лә һаҡланып ҡалған. Үҙебеҙҙең хоккей командаларыбыҙ бар. Боҙ туңҙыу менән Һаҡмар йылғаһында ярыштар үткәрәбеҙ. Командалар составында 6 йәшлектәр ҙә, Таһир исемле ағайыбыҙ кеүек 60 йәшлектәр ҙә бар. Былдай ярыштар йәштәргә ололар менән аралаштыра. Уйын уйнағанда йәш айырмаһы юйылған кеүек була. Шулай уҡ атай менән бала араһында булған кәртәләр ҙә юҡҡа сыға. Икенсенән, йәштәрҙең ялын файҙалы үткәреү мөмкинлеге көндә балаларына ла, үҙенә лә уны ташлай алырлыҡ көскә эйә булыуы хаҡында иҫбат иткән. Хәл былай була: 5 һәм 7 йәшлек ике ағайым "Беломор-канал" тәмәкеһенең асылмаған ҡабынан атайым һиҙмәслек итеп иплән кенә тәмәке һөйрәп сығарып, йәшереп кенә тартып ҡараған. Быны әсәйем һиҙеп ҡалған һәм атайға был турала шиген белдергән: "Мин һинә магазиндан алып ҡайтҡан тәмәке ҡабың теүәл инеме?" - тип һораған. Атай: "Әллә, мин уны һанап ҡарайымдыр шул..." - тип аптырап яуаплаған. Бәләкәй балаларҙың тәмәке тартып йөрөрө башҡа һыймаҫлыҡ хәл була шул. Шулай ҙа атайым малайҙарын ҡаршыһына ултыртып ҡуйған да: "Һеҙ әсәйегеҙ алып ҡайтҡан ҡаптан тәмәке алдығыҙмы?" - тип һораған. Яуап урынына: "Юҡ", - тигән һүҙҙәрҙе ишеткән. Күңеле менән был һүҙҙәргә бик тә ышанғыһы килеүенә ҡарамаҫтан, артабан һораған: "Тартағыҙмы?" тигән мәкәл тапҡыр әйтелгән. Атайһыҙ бала, ысын ир ниндәй булырға тейеш, тигән төшөнсәне бик һуң аңлаясаҡ. Аңлау менән дә әле был ҡағиҙәләрҙе үҙе күҙәтә башлаясағы икеле. Ир бала өсөн уға ныҡлы арҡа - атай тәрбиәһе мотлаҡ шул.

## Олатай ҡалас менән һыйлай…

Бәләкәстән ҡаласын да, ҡамсыһын да күп күрҙек. Бер яҡтан, ҡаты булды, икенсе яҡтан, бер ҙә юҡҡа рәнйетмәне беҙҙе атай. Шундай атай-әсәйҙең балаһы булыуым менән үҙемде бәхетле һанайым. Ғөмүмән, икеләтә бәхетлемен, тип әйтә алам, сөнки минең балаларым да бит шундай олатаһы, өләсәләре ҡарауында үҫте. Олатай ейәндәренә ҡамсы менән һуҡмай бит - ҡалас менән генә һыйлап тәрбиәләй. Беҙ бирәп еткермәгән тәрбиәне улар бирҙе. Уларҙың яныбыҙҙа булыуы балаларҙы тәрбиәләү мәсьәләһендә беҙгә бик

# ИР БАЛАҒА НЫҠЛЫ атай тәрбиәһе булыр,



*Шул ваҡыт атайым ағайҙарымдың икеһен дә мейес алдына баҫтырған да, тәмәке ҡаптарын янып ятҡан мейес эсенә бырағтыра башлаған. Гөлт итеп янып киткән беренсе тәмәкегә ымлап: "Бына, күрәгеҙме: тәмәке янғанда бит ҡыҙыл ут сыҡмай, күк ут сыға. Унда бит никотин яна. Никотин кеше һаулығына үтә лә зарарлы нәмә. Уның бер грамы атты үлтерә. Грамм - бер семтем генә. Һеҙ бит аҡыллы егеттәр. Әйҙәгеҙ, ошонда бер-беребеҙгә һүҙ бирешәйек: мин дә, һеҙ ҙә был алама нәмәне бер ваҡытта ла ауыҙыбыҙға алып тартмаясаҡбыҙ", - тигән. Атайымдың үҙ хатаһын балаларына ошо рәүешле аңлатыуы бик ныҡ тәьҫир иткән, ағайҙарым тәмәкегә бөтөнсә әйләнеп тә ҡарамаған. Үҫеп еткәс, ағайҙарым һәм атайым кеүек, мин дә сәләмәтлек юлын һайланым.*

Балаларға "Һин шулай бул, былай бул" тип әйтеп тәрбиәләү генә етмәй, әйткәндәреңде үҙ тормошондағы миҫалдар менән нығытып ҡуйһаң, һөҙөмтә ышаныслыраҡ була. Бына мин дә йыш ҡына балаларыма атайым менән булған хәлдәрҙе һөйләйем. Бер ваҡиға айырыуса фәһемле. 1953-1954 йылдар тирәһе. Атайыбыҙ ат менән Әбйәлилгә йөрөп эшләй: иртә менән китә, төн уртаһында ғына ҡайтып төшә. Шулай бер көндө эштән ҡайтыуына, һәр ваҡыттағыса, балалары йоҡлап бөткән, әсәйем уны көтөп ултыра. "Бына һуңғы көлсә, балаларға ашарға бүтән икмәк юҡ", - тип, әсәйем атайға хәлде аңлата. Атай икмәктең ситен семтеп кенә тешләп, картуфлы аш ашай ҙа, "Иртәнсәк нимә булһа ла уйлармын", тип, йоҡларға ята. Таңғы дүрттә башҡорт тоҡомло атын егә һалып, ғаилә башлығы Хәлил ауылына саба. Һис ҡасан юғалып ҡалмай торған атайыбыҙ бер танышы менән һөйләшеп, бер бот он алып ҡайта. Балалар уянмаған да була әле. Бәләкәй генә дүрт бала өй эсенә таралған тәмле икмәк еҫенә уянып китә... Ошо миҫалдан күренеүенсә, ир-егет, ғаилә ҡорғас, үҙенең ғаиләһе өсөн ныҡлы терәк була белергә тейеш. Бала саҡтан ошо һабаҡты һеңдерҙе атайыбыҙ беҙгә, улдарына.

Атайыбыҙҙың тәбиғәтен беҙҙең менән булған тағы бер ваҡиға асып бирә. 90-сы йылдарҙа бесәнден иң ҡыҙған мәлендә "Әйҙә ҡалып тор, ял ит, атай", тип, уны бесәнгә алып бармағайныҡ. Беҙ тейәлешеп бесәнгә киткәс, урамда бүрәнәләр өҫтөнә ултырған да, шым ғына илап ебәргән атайыбыҙ. Әсәйемдең: "Ниңә илайһың?" - тип, аптырап та, ҡурҡып та һорауына: "Мине, кәрәкмәгән кеше кеүек, бесәнгә алып барманылар, шуға иләһенә, бигерәк тә балаларына тейешенсә иғтибар, ваҡыт бүлергә тейеш. Америка, Европа педагогтарының был фекере менән килешмәү мөмкин түгел. Сөнки башҡорт ғаиләһенең нигеҙе лә шуға, уның ағзаларының үҙ-ара дуҫлығына таяна. Был - яһалма түгел, ә ихлас дуҫлыҡ. Мәсәлән, беҙҙең атайҙың, бәлки, балалары менән оҙаҡ итеп ултырып һөйләшергә ваҡыты ла булмағандыр. Шуға күрә уның менән ҡыҫҡа уйындар барышында ғына аралаша инек. Ул тыуа. Өсөнсөнән, бар "уйынсылар" ҙа сәләмәт йәшәү рәүешенең ләззәтен татый. Мәсәлән, тәмәке тартҡан кешенең ул уйынға дәрте лә, дарманы ла булмай. Әйткәндәй, тартыу тураһында...

## Атай, һин тәмәке тартмағас, мин дә тартмайым…

Атайыбыҙ ҙа был алама ғәҙәт менән йәш сағында бер аҙ мауыҡҡан булған. Әммә берҙән-бер

Тегеләр өндәшмәгән. Шул ваҡыт атайым ағайҙарымдың икеһен дә мейес алдына баҫтырған да, тәмәке ҡаптарын янып ятҡан мейес эсенә бырағтыра башлаған. Гөлт итеп янып киткән беренсе тәмәкегә ымлап: "Бына, күрәгеҙме: тәмәке янғанда бит ҡыҙыл ут сыҡмай, күк ут сыға. Унда бит никотин яна. Никотин кеше һаулығына үтә лә зарарлы нәмә. Уның бер грамы атты үлтерә. Грамм - бер семтем генә. Һеҙ бит аҡыллы егеттәр. Әйҙәгеҙ, ошонда бер-беребеҙгә һүҙ бирешәйек: мин дә, һеҙ ҙә был алама нәмәне бер ваҡытта ла ауыҙыбыҙға алып тартмаясаҡбыҙ", - тигән. Атайымдың үҙ хатаһын балаларына ошо рәүешле аңлатыуы бик ныҡ тәьҫир иткән, ағайҙарым тәмәкегә бөтөнсә әйләнеп тә ҡарамаған. Үҫеп еткәс, ағайҙарым һәм атайым кеүек, мин дә сәләмәтлек юлын һайланым.

Әле ҡуптән түгел Айтуған улым: "Атай, әгәр һин тәмәке тартҡан булһаң, моғайын, мин дә тартыр инем. Һин тартмағас - мин дә тартмайым", - тип әйтеп ҡуйҙы. Ир балаға үҙ атаһына ҡарап үҫеү фәһемле лә, файҙалы ла. "Атайлы бала - арҡалы бала",

ныҡ ярҙам итте. Хәҙер ҙә балалар ситтән ҡайтһа, иң тәүҙә: "Олатай ҡайҙа әле? Күрәйем әле уны, һағындым", - тип, уны күрергә ашҡынып торалар.

Атайым да, әсәйем дә һөнәрҙәре буйынса уҡытыусылар. Атай Ырымбурҙа педагогия училищеһын тамамлап, математика фәненән, ә әсәйем Темәс педагогия училищеһын тамамлап, башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡытты. Беҙҙең барыбыҙға ла юғары белем бирҙеләр. Минең ике улымдың да өләсәләре юлынан китеп, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булыуына, ҡыҙымдың БДПУның экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу факультетында уҡып йөрөүенә олатайҙары һөйөнөп бөтә алмай...

## Атым бар, йүгән табайым…

Ирҙе ир итеп тәрбиәләр өсөн беҙҙең атай һымаҡтар күберәк булһын ине ул, тим һәр ваҡыт. Бер ниҙән дә ҡурҡмаҫҡа өйрәтте ул беҙҙе. Батырлыҡ һуғышыр өсөн генә түгел, эшкә ҡурҡмай тотоноу өсөн дә кәрәк, тип һаналы ул. Бер ҡасан да икеләнеүҙәргә, "Белмәйем... Әллә килеп сығыр, әллә юҡ..." һымаҡ һүҙҙәргә юл ҡуйманы. Тотонған эшен азағынаса атҡарып сыҡты. Уны үҙебеҙҙең ауылда ла, күрше-тирә ауылдарҙа ла бар нәмәгә оҫта кеше булараҡ беләләр. Ҡулынан килмәгән эше юҡ, тиҙәр ундайҙар тураһында һөйләгәндә саҡта. Ул тәҙрә рамдары ла эшләне, янағын да ултыртты, бураһын да бураны, мейесен дә сығарҙы. "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ" ти торғайны ул. Ҡайһы берәүҙәр ауылда йәшәп, балта ла һаплай

*Ҡайҙа ти ул ситкә китеү. Мин шуны беләм: атай нигеҙендә һин ырамлы, һин ҡотло, балаларың да иманлы, ипле һәм тәрбиәле була. Бала тәрбиәле, айыҡ аҡыллы икән -тамырҙарың да ныҡлы була.*

# АРҠА... бел шуны!

Атайҙың эшләй белгән эштәре һанап бөткөһөҙ. Матур ғына итеп быйма табанлай, ат арбаларына тәгәрмәстәр ҙә яһай, эйәрөпсөнөн дә рәтләп ала ине. Әсәй өлгөрмәһә, һис тә кәмһенеп тормай, кейеменә тиҙ генә төймәһен тағып, тишелгән берәй урынын ямай һалып ҡуя ине. Ул, атым бар - йүгәнем юҡ, тип ултырмай, һәр ваҡыт эҙләнеү өҫтөндә. Эҙләнеү - атайымдың йәшәү рәүеше.

## Таш менән атҡанға - аш менән ат

Атайым менән әсәйем бик матур йәшәне. Татыу булдылар, һәр ваҡыт бер-береһенә таяныс була белделәр. Сит кешегә бер-береһенең кәмселектәрен һөйләмәнеләр. Кешеләргә лә игелекле инеләр. Беҙ ҙә, хатта беҙҙең балалар ҙа, улар кеүек ябайбыҙ, игелеклебеҙ.

Тағы... Атай-әсәйебеҙҙең иң яҡшы сифаты - сабыр итә белеүҙәрелер, моғайын. Бер эште лә ороп-бәреп, ватып-емереп барманылар. Бөгөнгө көндә сабырлыҡ төшөнсәһе юғала бара. Кешеләр сабырһыҙға әйләнде. Кеше менән кеше сабыр ғына итеп, мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеп кенә хәл итеү тигәнде онота бара. Ябай халыҡ араһында ла, оло түрәләр, ил башлыҡтары араһында ла күҙәтелә сабырһыҙлыҡ...

Беҙҙең атай һәр ваҡыт башҡаларға ҡарата иғтибарлы. Өйөбөҙ ауылдың осондараҡ урынлашҡанлыҡтан, юлда китеп барып, кискә ҡалғандар һәр ваҡыт беҙҙә ҡунып сығыр ине. Минең әрменән ҡайтҡан ваҡыттараҡ, 80-се йылдар урталарында йәй көнө булды был хәл. Ленинград ҡалаһынан Магнитогорскиға лар тота алырмы икән, тип борсолам ҡайһы саҡ...

## Тәрбиә һәм мәктәп...

Бөгөнгө көндә ауылда тәрбиә мәсьәләһе, уҡыуға булған ҡараш кеүек үк, икенсе, хатта өсөнсө планға күсте. Аҡса табыу ниәте һәр ваҡытта ла уйланылған аҙымдар ярҙамында ғына тормошҡа ашырылырға тейеш булыуы онотолдо. Аҡса табыу - урманда йәнлеккә һунар итеү түгел. Беҙ үҙебеҙҙең йыртҡыс түгел, ә кеше булыуыбыҙҙы аңлаған хәлдә генә ауылға ла, ҡалаға ла элекке матур мөғәмәләләр кире ҡайтыр ине.

Тәрбиәлелек ҡанундарын күҙ ҡараһылай һаҡлаған иң һуңғы ҡәлғә - мәктәп. Тик был ҡәлғәгә лә "аждаһалар" ажғырып ҡарап тора түгелме? Кемдәрме? Улар - шул уҡ эшһеҙлектән йонсоп бөткән ҡайһы бер әҙәмдәр. Бөгөн кеше үҙенә торошло шөғөл таба алмағанлыҡтан, бер-береһе менән, хатта тағы ла ҡурҡыныраҡ - мәктәп менән булыша башланы. Был, әлбиттә, күңелде ҡырмай ҡалмай. Икенселәре, аҡса тип сабауыллап, балаларына тәрбиә бирергә лә онотоп ебәрҙе, аҡсаларын ҡапсыҡҡа йәшерергә теләп, үҙҙәрен дә мәңге йомоҡ аҡса ҡапсығына әйләндерҙе. Тик быны үҙҙәре генә аңлап етмәй, ахыры...

## Һәр башҡорт күңеле менән йырсы

Башҡорттар тураһында бер урыҫ сәйәхәтсеһе былай тигән: "Башҡорт кешеһе ҡайҙа йөрөһә лә, йыр йырлай. Урманда йөрөһә - урман тураһында, йылға буйында - йылға тураһында йыр һуҙа". Башҡорт халыҡ йырҙарын атайым оҫта башҡара. Әле белмәй. Атайым балта тураһында бына ниндәй ҡараšта: "Балта йөҙө - ир-егеттең йөҙө. Балтағыҙҙы һаплаһағыҙ, һаптың төбөн ҡалай менән ҡапламағыҙ. Егеттең булдыҡһыҙы ғына шулай итә ул. Сарсылып, йәмерәйеп бөткән һапҡа ҡарап, ағас эшенә оҫталығы булмаған кешене танырға мөмкин".

Һәр эштең яҙылмаған ҡанундарын яҡшы белеүе арҡаһында эше ырамлы, хеҙмәт емештәре күҙ яуын алырлыҡ булғандыр атайымдың. Теләһә ниндәй эште теләге булған һәр кем эшләй ала. Әммә еренә еткереп, матурлап эшләй белеүселәр һирәк. Ябай ғына бағана ултыртыу ҙа үҙенә күрә оҫталыҡ талап итә бит. Һәр бағанаһын төҙләп, тап килтереп ултыртҡан атайымдың донъяһының ниндәй булыуын күҙ алдына килтереүе еп-еңелдер. Былар барыһы ла беҙгә өйрәткән оҫталыҡ һабаҡтарының нигеҙле, ныҡлы булыуы тураһында һөйләй.

самолетта осоп килеп, йыйылмалы велосипеды менән беҙҙең яҡтарҙан уҙып барыусы бер кеше төндә ҡунып сығырға рөхсәт һораны. Атай һимеҙ генә бер тәкәһен һуйып, боронғо йола буйынса матур итеп хөрмәт итте юлсыны. Был тиклем ихласлыҡты үҙ ғүмерендә лә күрмәгән юлсы хайран ҡалды: "Мин бит һеҙҙең ҡунағығыҙ ҙа түгелмен. Нисек былай булыуы мөмкин?" - тип ғәжәпләнде ул. Ленинградҡа ҡайтҡас, атайға хаттар яҙып торҙо аҙаҡ.

Атайым гел генә: "Таш менән атҡанға - аш менән атығыҙ, бер ваҡытта ла һүҙ йөрөтмәгеҙ, ҡайҙа йәшәһәгеҙ ҙә, шул ауылдың кешеләрен яҡшылап ҡабул итегеҙ", - тип әйтә ине. Хәҙер кеше ваҡсылланды. Бар нәмә аҡса менән иҫәпләнгән заманда кеше менән кеше араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә һыуына башланы. Халҡыбыҙҙың "Таш менән атҡанға - аш менән атығыҙ" тигән алтын аҡылын атайымдар тотҡан да ул, уны беҙҙең бала-

97 йәштә булһа ла, оҙон көйҙәрҙе һуҙып, йырлап ала. "Урал", "Ғилмияза", "Уйыл" йырҙарын ярата.

Бер хәлде һөйләп үтке килә. Ат арбаһына ултырып, атайым, ҡатыным менән бергә бесәндән ҡайтып килешләй, ямғырға эләктек. Атайым беҙгә плащ ябындырҙы ла, үҙе: "Әйҙә, күңелде асып алайыҡ әле", - тип, "Ғилмияза"ны һуҙып ебәрҙе. Беҙ, моңға тирбәлеп, ҡайтып еткәнебеҙҙе лә һиҙмәй ҡалдыҡ. Бына шулай, йырлап алырға ла форсатын да, мәлен дә таба атайым. Аллаға шөкөр, үҙем дә йырлайым. Бик күп йырҙарҙы атайымдан отоп алдым. Өс йәштә мәжлестәрҙә ултырғысҡа баҫтырып йырлатыуҙарын әле лә иҫләйем. Атайымдың халыҡ көйҙәренә һалып йырлаған үҙе генә белгән йырҙары бар. Мәҫәлән:

Турысай ҙа атым, ай, ашамай,
Ашаһа ла, ятып та юшамай.
Йырлайыҡ та, дуҫтар, һуҙып-һуҙып,
Бер йырламай күңел дә бушамай...

## Кәләште ике алмайҙар

Халҡыбыҙҙа кинйә малайҙың ата-әсә нигеҙендә йәшәү йолаһы бар. Атайым бәләкәйҙән күңелемә: "Улым, һин кинйә малай, халҡыбыҙҙағы боронғо йола буйынса, һин беҙҙе көтөргә тейешһең", - тигән уй һалды. Унын шулай уҡ: "Һин - нигеҙ ҡото. Минән ҡалған донъяны һин ҡарарға тейешһең", - тип, кинәйәләп, һирәклəп кенә әйтә йөрөүе лә күңелгә һеңешкән, булмышты билдәләргә ярҙам иткән. Был һүҙҙәр, әлбиттә, бала күңеленә генә түгел, ә оло кеше күңеленә лә ныҡ тәьҫир итерлек.

Бер мәл мин кәләш алырға булып, был хаҡта ата-әсәйемә белгерттем. Атайым мине саҡырып алды ла, былай тип әйтте: "Улым, был теләгеңде хуплайбыҙ, ҡыуандырҙың. Шулай ҙа баштан уҡ әйтеү хәйерле булыр: кәләште ике алмайҙар. Алғас, йәшәргә кәрәк". Атайҙың ябай ғына итеп, тапҡыр әйтелгән фәһемле һүҙҙәре беҙҙең ғаиләнең ныҡлығына булышлыҡ иткәндер. Туғандарым миңә йыш ҡына: "Иршат, һиңә сабырлыҡ бирһен, атай йортон ҡалдырып, етем итеп, ситкә күсеп китә күрмә", - тип әйтеп, минең бурысымды иҫкә төшөрөп тора. Ҡайҙа ти ул ситкә китеү. Мин шуны беләм: атай нигеҙендә һин ырамлы, һин ҡотло, балаларың да иманлы, ипле һәм тәрбиәле була. Бала тәрбиәле, айыҡ аҡыллы икән -тамырҙарың да ныҡлы була. Быны минең Айнур һәм Айтуған улдарым да, Лилиә менән Гөлнаҙым ҡыҙҙарым да яҡшы аңлай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иршат Мосауар улының атаһы тураһында һөйләгәндәре үҙе үк бер тәрбиә мәктәбе. Атаһын ысын мәғәнәһендә остаз да, дуҫ та, ысын ир өлгөһө лә итеп күргән тағы кемдәр бар арағыҙҙа? Беҙ шундай ир-егеттәрҙән хаттар көтәбеҙ "Ир-азамат" рубрикаһына.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

## БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ

### Олатай ҡайҙа?

Улыма ике йәш ярым саҡта атайым үлеп китте. Өлкән улым ошо ике йәшлек ҡустыһына былай тип аңлата: "Олатай һауаға осоп китте, башҡа ҡайтмаясаҡ..." Ярты йыл самаһы ваҡыт үткәс, үлем төшөнсәһен аңлай башлаған булғандыр, күрәһең, бәләкәй улым минән һорай ҡуйҙы: "Олатайым һауаға осоп китте лә, ҡолап төшөп үлдеме?.."

### Сикәләрең ҡартайған...

Бер йылдан һуң, йәғни өс йәш ярым сағында улым менән өйҙә икебеҙ генә ҡалғанбыҙ. Мин диванда телевизор ҡарап ятам. Улым минең эргәмә килде лә: "Ҡартайҙым, тип, телевизор ҡарап ятаһыңмы?" - ти. Мин: "Ҡартаймағанмын да һуң, - тим, аптырап. "Сикәңде тотоп ҡара һуң, атай", - булды улымдың дәғүә-яуабы. Сикәләрҙе тотоп ҡараған булдым да: "Юҡ, ҡартаймағанмын, улым", - тим. Үҙем, малайға берәйһе өйрәтеп торамы икән әллә, тип аптырап, сит бүлмәгә күҙ атам. Бер кем дә юҡ. Заһит улым үҙенең артығын ысҡындырыуын һиҙеп: "Һинең сикәләрең генә ҡартайған, башҡа ерең ҡартаймаған, эйе бит", - тип, һүҙен йомғаҡлай һалды.

### Мине ҡайҙан алдығыҙ?

Дүрт йәш ярым тирәһе булғанда, малайҙы бер һорау борсой башланы: "Мине ҡайҙан алдығыҙ?" Беҙ уға былай тип яуаплайбыҙ: "Баймаҡта тапмағас, Сибай дауаханаһынан һатып алып ҡайттыҡ", - тибеҙ. Бер аҙға тынысланып йөрөнө лә, икенсе яҡтан алып килеп һуҡтырҙы: "Һеҙ мине һатып алмаҫ борон беҙҙе (мине, тимәй, нәҡ, беҙҙе, ти) ҡайҙан алып килделәр икән бальнисҡа? Унда нимә ашаттылар һәм беҙҙе кем имеҙҙе икән?" Был көрсөктән сығыу юлын таба алмайынса аптырағас: "Унынһын бальнистағы врач апайҙар ғына белә, беҙгә лә әйтмәнеләр", - тигән булдыҡ. Тағы күпмелер ваҡытҡа тынысландырҙыҡ, буғай.

### Ауыҙыңды ипләп ас...

Улыма биш йәш. Ҡайнымдарҙа ҡәйнештең Силәбенән ҡайтыуы уңайы менән ҡунаҡҡа йыйылғанбыҙ. Элек булған хәлдәрҙе иҫкә төшөрөп, геү килешеп көлөшөп ултыра инек, улым мине киҫәтә: "Атай, ауыҙыңды ҙур асып көлмә, йәмһеҙ тештәреңде күрһәләр, оят булыр". Көлөү ҡайғыһы китте, ауыҙҙы баҫып ултырҙым ары.

### Өсмөйөш дискы уйлап табасаҡтар

Улыма биш йәш ярым. Минең - телевизор, ә улымдың видеомагнитофондан йәнһүрәт ҡарағыһы килә. Мин әйтәм: "Мин ни, ҙурайғас, йәнһүрәт ҡарағым килмәй, ҙурайһаң, һинең дә ҡарағың килмәҫ әле", - тим. Улым: "Ул саҡта мин видеоны сығарып ташлайыммы инде?" - тип һорай. Мин: "Юҡ, малайың булһа, уға күрһәтерһең", - тим. Ул мәлдә кассеталы видео булмаҫ инде", - ти был уйға ҡалып. "Уға ҡалһа, түңәрәк дискылы DVD ла булмаҫ әле", - тип, унын һүҙен ҡеүәтләйем. Улым тағы аптыратты: "Алайһа, ул ваҡытта өсмөйөш дискылы берәй нәмә булыр әле", - ти. Баланың фекер йөрөтөүенә хайран ҡалдым, сөнки видеоның кассетаһы шаҡмаҡ, ә DVD-ныҡы иһә - түңәрәк. Тимәк, киләһе асыш өсмөйөш дискылы буласаҡ.

### Бүләк кәрәкмәй, күлдәк кәрәк!

90-сы йылдар ине. Февраль аҙаҡтары. Бер көн иртән бәләкәй ҡустымдың өлкән улы 5 йәшлек Илгиз яңы һалып сыҡҡан йорттарынан йәйәүләп беҙгә килеп инде. Өләсәһенә: "Һин беләңме, бөгөн минең атайҙың тыуған көнө бит", - тип хәбәр һалды. Өләсәһе: "Эйе, беләм", - тип, арҡаһынан һөйөп алды малайҙың. Шуны ғына көткән малай, тартына биреп, йомошон йомошлауға күсте: "Мин күлдәк алырға килдем!" Өләсәһе "күлдәк" һүҙен "бүләк" тип ишетеп: "Уй, бүләк алып өлгөрмәгәнмен бит әле атайыңа", - тип, малайҙың үҙенә күстәнәс булһа ла биреп сығарайым тип, кәнфит-күстәнәстәр һандығына ыңғайланы. Үҙенең тыуған көнөнә гел төрлө-төрлө күлдәктәр тотоп килеүҙәренә күнегеп бөткән малай, тыуған көнгә һәр саҡ күлдәк биреү ҡаралғандыр донъяла, тип уйлап, атаһын иң тәүгеләрҙән булып ҡыуандырырға теләп, күлдәк "давай"лап йөрөүе икән өләсәһенән: "Бүләк тимәйем бит, күлдәк, тим, к, к хәрефе менән әйтәм, өләсәй", - тип, орфоэпия законы менән "ультиматумын" нығытып ҡуйҙы был.

### Әсәй, ағай "балыҡ тотҡан"

Үҙемдең бәләкәй саҡтағы бер хәтирә иҫкә төштө. Ҙур урындыҡта беҙ, ағалы-ҡустылы ыбыр-сыбыр балалар, бергә йоҡлай торғайныҡ. Шулай бер көндө иртәнсәк нимәгәлер бик борсолоп уянып киттем. Баҡһам, ни күрәм, Вәхит ағайым яғынан минең аҫтым еүешләнгән. Шунда уҡ "мин түгел" тигән уй-теләк барлыҡҡа килде. Мин яу һалып, ағайҙың "йөҙөн асырға" керештем: "Ағай балыҡ тотҡан!" Тауышҡа әсәй килде лә, минән ни өсөн ҡысҡырыуым тураһында һораны. Яу һалып, ағай янында ятып, үҙемдең ниндәй хәлгә ҡалыуым тураһында зарландым. Тоям: эргәлә ятҡан ағайым да уянды, тик нисек ятҡан, шулай ята бирә әле. Был тиклем тауышҡа уянмаҫһың, уянмай ни... Әсәй ағайҙың кейемдәрен тотоп ҡараны ла, уныҡы ҡоп-ҡоро булыуы тураһында әйтте. Унын ҡарауы, минең кейемем еүеш ине. Вәхит ағайым башҡаларҙың күңелен уйлай белә, кешене ҡыйырһытмай торған кеше, мине әрләмәне. Бала сағынан ололарса зирәк аҡыллы булған икән, тигән һығымтаға киләм хәҙер.

**Әхәт ИШБУЛАТОВ.**

***✓ Ул мәлдәрҙән ауыл үҙгәрҙе. Ят заманалар килде. Сит ғәҙәттәр тамыр йәйҙе. Шулай ҙа ейәндәре аҡыллы булып үҫте. Береһе лә зимагор аталарына тартмағайны, шуға ҡыуанып бөтә алманы ҡарт.***






Ҡапҡаны шар асып барып ингән Камил ишек алдын байҡап: "Тағы ҡырғын кеүек килеп тулғандар", - тип уйланы. Олатаһы менән күҙгә-күҙ һөйләшеп ултырғыһы килгәйне. Моразына ирешә алмаҫ, ахры, өй тулы халыҡ бит. Тупһа тирәләй рәт-рәт булып теҙелеп киткән аяҡ кейемдәре шуға ишара. Шулай ҙа килеүен килгәс, инмәй китмәҫ инде. Һаҡ ҡына ишек тотҡаһын тартты. Һиҙенеүе дөрөҫ булған икән. Өйҙәге эскәмйәлә лә, ултырғыстарҙа ла олоһо-кесеһе шым ғына ултыра. Бала-саға хатта балаҫ йәйелгән иҙәнгә сүгәләгән. Төпкө өй ишеге ябыҡ. Кешеләр ваҡыт-ваҡыт баштарын шул яҡҡа бороп, үҙ-ара шыбырлашып ала һәм сабыр ғына ниҙер көтә.

Бында аш бүлмәһен бүлеп торған ҡола стенанан тыш, мөйөштәге ҡулйыуғыс, янына һөйәлгән һепертке һәм сөйҙәге таҫтамалдан башҡа күҙгә эленерҙәй нәмә юҡ тиерлек. Тышҡы ишек башындағы бик зауыҡлап үрелгән өс быуынлы, суҡлы оҙон ҡара сыбыртҡыны иҫәпкә алмағанда, әлбиттә. Йыйылған халыҡ ҡарашы менән бүлмәне байҡай ҙа, шул сыбыртҡыны күреп, өнһөҙ ҡала. Береһе һораулы ҡарашын күршеһенә төбәй. Уныһы ғәжәпләнеп яурынын һикертә. Билдәле, баш осонда сыбыртҡы эленеп тороуы сәйер тойола. Биҙәү әйбере йә өй кәрәк-ярағы түгел бит инде. Бөтәһенә лә аңлайышлы ат дағаһы йәки "Аятел көрси" ҙә түгел хатта. Сыбыртҡы!

Камил йыйылған кешеләрҙе шым ғына сәләмләне лә аш бүлмәһенә үтеп, буш торған бүкәнгә сүгәләне. 10-15 минут һайын төпкө ишек асылып, берәүҙәр инә, икенселәр сыға торҙо. Егет бүкәненең артына һөйәлеп, аш бүлмәһе ишеге аша күренгән теге сыбыртҡыға ҡарап көләмһерәп ҡуйҙы. Ул да ҡасандыр ошо кешеләр ише аптырап ҡарай ул сыбыртҡыға.

Иҫ белгәненән алып эленеп тора унда был сыбыртҡы. Сабый сағында иғтибар ҙа итмәне. Бәпес донъяны аяҡ аҫтына ҡарап таный башлай бит. Эләгеп ҡоламаһа - булған. Саҡ ҡына башын күтәрһә, әсәһенең яғымлы йөҙөн, үҙенә саҡырып торған хәстәрлекле ҡулдарын күрә. Ә шул ғәзиз кәүҙә артындағы мөхитте, таныш түгел донъяға алып барған ишекте, уның башындағы шомло сыбыртҡыны ул шәйләмәй. Шәйләмәһен, әйҙә. Ваҡыты етмәгән...

Үҫә төшкәс, бер мәл сыбыртҡыға күҙе төштө Камилдың. Түҙемһеҙләнеп, олатаһының еңенә барып йәбеште малай:

- Олатай, олатай! Был сыбыртҡыны нишләп унда элеп ҡуйҙың ул?

Ғүмәр бабай башындағы түбәтәйен рәтләне, һаҡал-мыйығын һыйпап ҡуйҙы. Шунан күҙҙәрен хәйләкәр ҡыҫып, тамағын ҡырҙы:

- Бик ныҡ белгең киләме?

- Ныҡ, ныҡ, олатай!

- Һуң, әләйһә, әйҙә, утынлыҡҡа. Аяғөҫтө һөйләшкән һүҙҙең бәҫе китә ул. Халыҡ аҡылы малайҙарҙы төндә, йоҡлағанда ғына һөйөргә кәрәк, тиһә лә, яратҡан ейәненең арҡаһынан ҡағып-ҡағып алды ул. Икәүләп түмәрҙәр өҫтөнә ҡунаҡлағас, Ғүмәр бабай тәмләп кенә һүҙен башланы:

- Сыбыртҡы, тиһең инде. Үҙемде белә-белгәндән ишек башында тора ул. Мин ҡуймағанмын уны, атайым да түгел, ә уның атаһы - олатайым. Ошо ерҙәрҙең серегән байы булған ул. Өйөр-өйөр ҡуй, йылҡы, хатта дөйә лә тотҡан. Урманынан солоҡ балы алған, ағас, таш сығарған. Шулай төрлөсә кәсеп иткән. Оло донъяны тигеҙ алып барыр өсөн кеше лә күп кәрәк булған. Ялсылары ла мыжғып торған. Үҙе юлда саҡта улар менән өйҙә ҡалған ике ҡатыны идара иткән. Ә көндәштәр араһында юҡ-юҡта ыҙғыш та сыҡҡылаған. Балалар, хеҙмәтселәр ҙә ике яҡҡа бүленгән. Дөйөм эшкә зыян килгән. Был олатайға оҡшамаған, әлбиттә. Шуға күрә тоғро көтөүсеһенән ҙур ҡара сыбыртҡы үрҙерткән. Шуның менән яман итеп бер һелтәнгән дә күренеп торған ергә - ишек башына элеп ҡуйған. Һөйләүҙәренсә, сыбыртҡы унан бер ҡасан да төшмәгән. Әммә бөтәһен дә иҫкәртеп, ҡурҡытып торған. Ике ҡатын да башҡаса һүҙгә килешмәгән. Балалар татыу уйнаған, ялсылар тырышып эшләгән. Тормош яйлы ғына алға тәгәрәп, олатайҙың донъяһы нығынған...

Олатай менән ейән араһындағы ошо һөйләшеүгә тиҫтә йылдан артыҡ ваҡыт уҙған. Камил сыбыртҡыға төбәлеп, шул хикәйәтте иҫкә төшөрөп ултыра. Олатаһының - тирә-яҡта данлыҡлы имсе-күрәҙәсенең бушауын түҙемһеҙләнеп көтә.

Кеше кәмене. Кемдеңдер быуыны сыҡҡан, икенсеһенең малы күҙеккән, өсөнсөһө сиренән мандып китә алмай, дүртенсеһенең башмағы юғалған... Сират тороп һыйпалып-өшкөрөлөп, сәйен-тоҙон да өшкөртөп алып ҡайтып китә торҙо йыйылыусылар. Һуңғы ҡунағын оҙатып, ҡулын сайып алғас, Ғүмәр бабай ейәненә һүҙ ҡатты:

- Йә, ни йомош, улым? Һайрап ебәр.

- Кәңәшләшергә килдем, олатай. Кәләш алырға уйлайым. - Егет йылмайып ебәрҙе.

- Һа-ай, бик хуп, бик мәслихәт. Өйләнеп, балалар үҫтереп йәшәү һәр кемгә лә фарыз инде ул.

- Тик... ней... туйҙы араҡыһыҙ үткәрергә ине. Икебеҙ ҙә шул уйҙабыҙ. Нисек булыр икән, олатай?

Камил ауыҙынан был яңылыҡты ишетеп, Ғүмәр бабай бер ҙә аптыраманы. Бигерәк инсафлы бала бит уның ейәне. Бәләкәйҙән ололар аҡылы булды үҙендә. Хәләл нәмәләрҙе һеңдереп, уның аяҡ аҫтында ғына уралып үҫте бит һуң! Йәһәтләп ҡыуанысын белдерергә ашыҡты:

- Собханалла! Нисек булыр тип, дөрөҫ булыр! Тап мосолманса. Үҙ аҡылың менән шундай ҡарарға килгәнеңә һөйөнәм. Фатихамды бирәм, улым. Ә атайың нимә тине һуң?

- Уға әйтмәгәнмен әле. Ҡаршы булыр инде ул...

- Ярай, ҡурҡма, үҙем һөйләшермен.

Олатаһының дәртләндереүе күңеленә май булып ярылды Камилдың. Тынысланып ҡайтып китте. Ә Ғүмәр бабай урамға сығып, ҡапҡа алдындағы эскәмйәгә хәл алырға ултырҙы. Әле генә ишеткән хәбәргә шатланып туя алмаһа ла, кейәүен иҫкә төшөргәс, йөҙө ҡара янып китте. Араҡыны Алла урынына күргән бәндә һис ризалашмаясаҡ бит инде ул.

Хәйерһеҙ, ана, ҡәүемен рисуай итеп, урамдан ҡып-ҡыҫҡа ыштанында килә лә ята. Боҙоҡ кешеләр мулланың өйөн ярты саҡрымдан урап үтә. Кемдекен сәлдергәненде, күпме эскәнеңде, нимә уйлағанынды белеп торғанынды кем теләһен. Хәҙер төртмә теле менән элеп алып һелкеп һалғанын көт тә тор. Оҙон һаҡалының осон ҡулы менән өйөрөлткөләп, сыбыртҡы осона оҡшатып сыуалта-сыуалта, халыҡсан теле менән тураһын ярған һәр кемгә лә оҡшап етмәй шул. Ә бәғзе берәүҙәргә сыбыртҡы менән тамыҙғандай тәьҫир итә был. Өйө лә ауылдың ҡап уртаһында, ике төп урам киҫешкән ҡалҡыу ерҙә ултыра. Унан килеп, был әҙәмдәрҙең дә сире бар, малы бар. Бер булмаһа, бер уға көндәре төшәсәк. Шуға ла шөрләйҙәр, асыҡтан-асыҡ бәхәскә инмәйҙәр. Кейәүе Хисамдан башҡалары. Ул, киреһенсә, тәмәкеһен арҡыры тешләп, ауыҙынан араҡы еҫе аңҡытып, бөтә ҡиәфәте менән ҡайныһына ҡаршылашҡандай әҙәпһеҙ тота үҙен. Уның мәртәбәһен төшөрөргә итәме? Үҙһүҙлелеген күрһәткеһе киләме? Донъя тотҡаһы беҙҙең ҡулдарға күсә, тимәксеме? Ҡарале, бер көн: "Бөгөн барһың, иртәгә - юҡ", - тип янап та киткәйне түгелме?

Ҡыҙы уға кейәүгә сығам тигәндә үк күңеле һиҙгәйне хәйерле эш булмаҫын. Нәҫел-нәсәбе менән зимагорҙар ине шул. Ер эшен ташлап, ҡайһыһы ҡайҙа оҙон аҡса артынан олағып тороусылар затынан. Шул киткән еренән ауылға алама ғәҙәттәрҙе лә йыйып алып ҡайтты. Бына шул әтрәгәләмгә барып ҡына харап булды ҡыҙы. Мөхәббәт тигән булып. Тиҙ аңланы ла, һуңланы. Бер-бер артлы балалары тыуҙы. Етмәһә, ир менән айырылышыу ул саҡта үҙе ҙур оят һанала ине.

Ул мәлдәрҙән ауыл үҙгәрҙе. Ят заманалар килде. Сит ғәҙәттәр тамыр йәйҙе. Шулай ҙа ейәндәре аҡыллы булып үҫте. Береһе лә зимагор аталарына тартмағайны, шуға ҡыуанып бөтә алманы ҡарт. Бына килеп Камилы ла матур һүҙҙәр һөйләп китте.

* * *

Камил өйгә дәртләнеп ҡайтты. Белә, атаһы ҡырталашып маташыр. Уның ҡарауы, олатаһы хупланы! Әсәһе менән буласаҡ ҡайны-ҡәйнәһе лә ризалар. Күмәк көс менән нисек тә күндерерҙәр әле.

Кисен атаһы яу ҡуптарҙы. Ҡулындағы шешәһен тартып алдылармы ни! Төкөрөгөн сәсә-сәсә ҡысҡырыныуҙан туҡтаманы:

- Араҡыһыҙ туй буламы? Балаңдың байрамында рәхәтләнеп бер типтереп тә ҡалмағас... Эсмәгәс, нимә ҡарап ултырмаҡ кәрәк, ә? Иҫәр һымаҡ, айыҡ башҡа йырлап-бейепме? Не бывать этому! И не думай!

Ғәҙәтенсә, һуҡмыш сағында шулай урыҫсаға күсеп киткән атаһын тыңлап бөтмәйенсә, тышҡа атланы егет. Аулаҡ мөйөштә ултырып, алдағы көндәргә план ҡорҙо. Барыбер ҙә эскеһеҙ үткәрәсәктәр туйҙы!

Туй тип әйтеүе генә анһат. Күпме әҙерләнергә кәрәк. Йәш егет ары сапты, бире сапты. Әле быныһын хәстәрләне, әле - тегеһен. Тантанаға һанаулы ғына көндәр ҡалғайны, бәлә тыуҙы. Ғүмәр бабайҙың өйө янып китте. Район үҙәгенән янғын һүндереү машиналары килеп туҡтағанда, йорт-ҡаралты көл-күмергә ҡалғайны инде. Уттың ялы-ҡойроғо юҡ - ун биш минут етте быға. Ярай әле, мулла үҙе ҡотолдо. Йүгереп барып еткән күршетирә ишектән сәсәй-сәсәй сыбыртҡы тотоп сығып килгән бабайға тап була. Һөрөм менән ағыуланып, иҫен юйған аҡһаҡалды "тиҙ ярҙам" машинаһына һалғанда ла ҡулынан оҙон ҡара сыбыртҡыһын ысҡындырмай маташҡан, тиҙәр.

Бөтә ауыл мәж килеп янғында йөрөгәндә, Хисам ғына зым-зыя юҡ булды. Килеп тә ураманы. Мәхшәр араһында ла шуны һиҙеүселәр табылды, мәгәр. Ҡолаҡтан ҡолаҡҡа шыш-быш китте...

Табып алып ҡайтты ул сыбыртҡыны Камил. Тик атаһы күреп ҡалып, ҡулынан тартып алып, келәткә сығарып атты.

- Әҙәм көлдөрөп, ишек башына элә күрмә тағы! Алйыған олатаңа эйәреп. Сматри у меня! - тип улына янап ҡуйырға ла онотманы.

Ғүмәр бабай оҙаҡ ятты дауаханала. Тын юлдары янып тәүҙә - реанимацияла, унан бүлексәлә дауаланды. Янғын сәбәбен асыҡлаусы тәфтишселәр уның эргәһенә йыш килде. Әйтеүҙәренсә, бөтә электр йыһаздары төҙөк булған. Берҙән-бер сәбәп - ут төртөүҙер, тинеләр. Бабайҙан дошмандарың бармы-юҡмы, кем менән һүҙгә килешкәйнең, тип төпсөнөп-төпсөндөләр ҙә, ул өҙөп кенә яуапламағас, күренмәҫ булдылар. Енәйәтсене тапмай, эште ябып ҡуйҙылар, ахыры.

Камил унан бигерәк олатаһының һаулығы өсөн борсолдо. Дауахана юлына саң ҡундырманы. Һаҡалын ҡырып ташлағастар, йөҙө уғата ҡаҡсаланып киткәйне ҡарттың. "Олатай сыҡһын да гөрләтеп туй үткәрербеҙ", - тип хыялланды егет. Шундай өмөтлө уйҙар менән ҡайтып ингәнендә атаһының дәртләнеп машинанан йәшник-йәшник араҡы бушатҡанына тап булды.

- Атай, нимә эшләүең ул? - тине егет ниҙер һиҙенеп.

Хисам улына һынсыл ҡараш ташланы ла иҫе китмәй генә:

- Күрмәйһеңме, туйға әҙерләнәм...

Камил һүҙһеҙ аптырап ҡалды.

- Йә-йә, бүре кеүек ҡарама. Алдыңдан алырға олатаң юҡ бында! Ана, күрмәгәнен күрҙе хәҙер. Күп лығырлай башлағайны ла... - Атай кеше һүҙҙе ситкә борҙо. - Нисек кешенән оялмай араҡыһыҙ туй уҙғармаҡ кәрәк? Һыҡмыр, һаран Хисам тиһендәрме? Бер кем дә аңламаясаҡ. Аң-ла-ма-я-саҡ! Уйлап ҡара, бер туған ағайым килә туйға, һыу һәм һут менән һыйлайыммы? Это - раз. Яратҡан кейәүем килә, бер ярты ла ҡуймайыммы? Это - два. Ут күршеләр инәсәк, беҙҙә айыҡ туй, тип бороп сығарайыммы? Улар минең менән уттыһыуҙы кискән кешеләр ҙәһә! Берәүһе картуф баҡсамды һөрөп бирҙе, икенсеһе һыйыр быҙаулағанда ярҙам итте. Баш ауыртып торғанда ла сәмәйҙәрен йәлләмәйҙәр!

Хисам йәшниктәрҙе келәткә ташыны. Әҙәм рәтле һөйләшеүгә өмөтләнгән Камил быныҡ файҙаһыҙ булырын самаланы. Йәне әрнеп, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәне. Үҙ аллы тормош юлын айыҡ башларға теләгәйне бит! Баштан уҡ! Үҙе үҫкәндәге кеүек түгел, балаларына матур өлгө биреп йәшәргә тигәйне! Белеп тора, атаһы эсеп алһа, туйҙың да йәмен ебәрәсәк. Низағ, ыҙғыш сығарасаҡ. Ҡоҙалары менән сәкәләшмәйенсә ҡуймаясаҡ. Саҡ башланып торған яңы тормошто ҡыйратасаҡ.

"Нимә эшләргә? Кемдән кәңәш һорарға? Исмаһам, олатай ҙа юҡ бит янда", - Камил әсенеп уйланды. Бер ҡарарға килә алмайынса, келәткә табан атланы. Ишекте асыуға, ни өсөндөр араҡы шешәләренең урталағы

өҫтәл өҫтөнә теҙеп ҡуйылғанын күрҙе. Күрәһең, атаһы шулай итеп уларға ләззәтләнеп ҡарап торғандыр.

Камилдың ҡарашы мөйөштә ятҡан сыбыртҡыға төштө. Олатаһының сыбыртҡыһы. Ҡулына алды. Алды ла, ҡымшанмай, оҙаҡ итеп уға ҡарап уйға сумып торҙо. Шунан ҡапыл өҫтәлгә боролоп, йән көсөнә һелтәнде. Сыбыртҡы осо оҫта ғына итеп ситке бер шешәнең муйынынан эләктереп алды ла уны иҙәнгә осорҙо. Егет икенсегә сыбыртҡыһын шыйылдатып тартты - тағы берәү иҙәнгә тәкмәсләнә. Тәкмәсләне лә тәүгеһе өҫтөнә тура килеп ярылып китте.

Әле генә нимә эшләргә кәрәклеген белмәгән-аңламаған Камилдың йөҙөнә яҡтылыҡ йүгерҙе. Һунар ҡомарына бирелгәндәй, уңға-һулға һелтәнергә тотонды: "Бына шул кәрәк һеҙгә! Шул кәрәк!" Өҫтәлдәге шешәләр осоп төшә торҙо, бер-береһенә бәрелеп, мең ярсыҡҡа әүерелә барҙы. Ҡыҙып, тирләп-бешеп донъя ҡыйратҡан егет келәткә кеше килеп ингәнен дә һиҙмәне. Йән асыуына ҡысҡырған тауышҡа әйләнеп ҡарағас ҡына, йөҙө бурҙаттай ҡыҙарған, һауа етмәгән балыҡтай ауыҙы ҙур асылып ауыр тын алған атаһын күреп, туҡтап ҡалды. Хисам ҡулдарын шешә ярсыҡтарына һуҙып, аңлайышһыҙ ауаздар сығарып, тыпырсынып бейеп тора ине. Шунан тотлоға-тотлоға улына ҡысҡырып ебәрҙе:

- К-каналья! Что ты творишь?

Камил терт итеп ҡалды. Ҡапыл ғына әйтер һүҙ таба алмай китте. Ул арала атаһы ҡарсығалай янына осоп килеп етте лә, ҡулынан сыбыртҡыһын тартып алып, арҡаһына һыҙырып ебәрҙе. Егет тәненең уттай янғанын тойҙо. Әммә ҡымшанмай тора бирҙе. Был күренеш һуҡмыш ирҙе уғата ярһытты. Хисам, үҙ-үҙен белештермәй, улын ҡотороноп туҡмай башланы. Хәлдән тайғансы ярҙы ла ярҙы ул. Камилдың бөтә тәненең ҡыҙыллы юлаҡтар менән ҡапланыуын күрмәне лә. Сөнки аңы томаланғайны, күҙенә ҡан һауғайны уның...

* * *

Иртәгеһе көндә ауыл буйлап йәшен тиҙлегендә ҡот осҡос хәбәр таралды.

- Хисамдың улы аҫылынған! Келәттә олатаһының сыбыртҡыһына!

Был ҡурҡыныс һүҙҙәрҙе ишетеп, барыһы ла албырғап ҡалды. "Ярай, шайтан ҡотортоп, күҙҙәре томаланған эскеселәр башын элмәккә тығып тора. Шап-шаҡтай, кәләш алырға йөрөгән бынамын тигән аҡыллы егет нишләп үҙ-үҙенә ҡул һалһын ти ул? Булмаҫ". Кемгә ҡарама, шулай тине. Үҙ күҙҙәре менән күрмәйенсә, берәүҙең дә бындай башҡа һыймаҫлыҡ хәбәргә ышанғыһы килмәне. Шуға күрә халыҡ ағымы эркелешеп Хисамдың өйөнә ҡарай йүнәлде. Стаканына араҡы һалып, баш төҙәтергә генә йыйынған сәрхуштәр ҙә, шөғөлөн ташлап, башҡалар артынан эйәрҙе.

Йортҡа иң беренсе булып килеп инеүселәр ғәжәп хәлгә тап булды: әллә күп эсеүҙән, әллә илауҙан бите-күҙе шешенеп бөткән Хисам ишек башына оҙон ҡара сыбыртҡыны элеп маташа ине...

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ҮҘЕҢ САҠЫРҒАН ТАЛАПҠА...

## Башта үҙең яуап бир

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Фәнил КҮЗБӘКОВ, шағир, әҙәби тәнҡитсе, филология фәндәре докторы:** Әҙипте нимә борсой, тигән һорауҙы, намыҫлы әҙипте нимә уйландыра, тип тулыландырыр инем. Әҙип һүҙенең тамыры әҙәпкә барып тоташа. Күренеүенсә, әҙәпле, юғары әхлаҡлы булған талант эйәһе генә әҙипкә йөкмәтелгән миссияны тейешенсә атҡара ала. Әҙәплелек, әхлаҡлылыҡ критерийҙарын, үлсәмдәрен нисек билдәләргә һуң? Апрелдә уҙған Башҡортостан яҙыусыларының съезын ғына алайыҡ. Ябай ғына талаптарҙы (әхлаҡ тураһында әйтерлек тә түгел!) тупаҫ боҙоу арҡаһында уның ҡарарҙары нигеҙһеҙ тип табылды. Әҙәп, намыҫ тигән сифатҡа эйә булған әҙиптәр (был осраҡта съезды ойоштороусылар, президиумда ултырыусылар) быға бер нисек тә юл ҡуймаҫ ине. Ә инде бысраҡ эштәре бар йәмәғәтселеккә фашланғас, кәм тигәндә идара ағзаһы булыуҙан баш тартырҙар ине. Бер уйлаһаң, битһеҙҙәрҙең бөгөнгәсә бер ни булмағандай йөрөп ятыуҙарына ла аптырарға ярамай. Ә бына күпселектең ошондай хәл менән килешеүен нисек аңларға һуң? Тимәк, бөгөнгө йәмғиәттәге катаклизмдар әҙипте лә урап үтмәгән. Әхлаҡһыҙлыҡ яман сир кеүек әҙиптәргә лә таралған. Ә үҙе ауырыған кеше башҡаларҙы нисек дауалаһын?! Мине әҙәпле булырға тейешле әҙиптәрҙең берҙе һөйләп, икенсене яҙып, дөрөҫөрәге алдап яҙып, өсөнсө төрлө йәшәп ятыуҙары борсой. Тап шул арҡала беҙ һүҙҙең баһаһын нык төшөрҙөк, бәҫен ебәрҙек. Шул сәбәпле әҙип һүҙенә лә, журналист сығышына ла хәҙер күптәр ышанмай. Хәлде дөрөҫлөктөң, ысынбарлыҡтың күҙенә тура ҡарап, асыҡтан-асыҡ һөйләшә алғандан һуң төҙәтә башларға мөмкин. Мин төҙәтә башлау тураһында әйтәм, сөнки ул хатта ғүмерҙәрең етмәҫлек оҙайлы эш. Граждандыҡ позицияһы, шәхес ҡыйыулығы талап иткән ифрат ауыр, ҡатмарлы эш. Етмәһә, дөрөҫлөк бөгөн проблемаларҙы хәл итә алырҙай даирәләргә, яуаплы вазифа биләгән яуапһыҙ әҙәмдәргә кәрәкмәй. Әммә дөрөҫлөк күпселек өсөн кәрәк. Тимәк, иртәме - һуңмы беҙ барыбер проблемалар хаҡында туранан - тура һөйләшергә мәжбүр булабыҙ. Шул осраҡта ғына тормошобоҙ ыңғайға китеүе ихтимал. Үҙең ысынында дөрөҫлөк өсөн көрәшәм, халыҡ өсөн тырышам, тиһәң, шуға ышанаһың икән, бер кемгә һылтанмай, зарланмай ҡулыңдан нимә килә, шуны эшләргә тейешһең. Ә бигерәк тә беҙгә, әҙиптәргә, шул иҫәптән журналистарға, алдашмаҫҡа кәрәк. Үҙең саҡырған талаптарға башта үҙең яуап биреү бик мөһим.

**Рубриканы Мөнир ИҠСАНОВ алып бара.**

ЗАУЫҠ

# ҮҪМЕРҘӘРҘЕҢ КҮҢЕЛ ТҮТӘЛЕНӘ

## Сит орлоҡтар инде сәсәләр



**Фидаил Әбелғаян улы Сафин Ҡариҙел районының Балмазы ауылынан. Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетын тамамлап, әлеге ваҡытта тыуған ауылында тарих дәрестәре уҡыта. Башҡортостан республикаһының мәғариф отличнигы. Зәйнәп Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә "Быуат артылғанда" тигән китабы баҫылып сыҡты. Шиғырҙарына тормош айышына төшөнөргә тырышыу, тәбиғәт, күңел, рухиәт хаҡындағы уй-хистәр хас.**

### Ҡырылған күңел

Киттем әле урмандарға,
Тәүге ҡарҙан һунарға,
Киттем әле урмандарға
Саф һауалар һуларға.
Тайыш табан ятмағандыр,
Әҙләйҙер ятыр урын,
Тап булмаһа...
Урманымдың
Тыңлап йөрөрмөн йырын.
Урмандарым һағынғандыр,
Мине күптән көтәләр,
Байлыҡтарын ул күрһәтеп,
Күңелемде күтәрер.
Юлым минең әүәлгесә
Урманым үтәһенән,
Йә, Хоҙайым, ник көлгәндәр
Еремдең үпкәһенән?
Урманымда кем йөрөгән,
Алйот, әллә иҫәрме?
Был ҡырҡылған делянкала
Ҡабат ағас үҫерме?
Туҡмалғандай мин айыуҙан
Урмандан ҡайтып киләм,
Бөтә ерҙе ҡар ҡаплаған,
Күренмәй йәшел сирәм.

* * *

Аҫты өҫкә килде донъялар,
Йома түгел хәҙер йомалар,
Тотош тиҫкәрегә боралар,
Ҡайҙа булды матур йолалар?
Йырлап үтһән кисен урамдан,
Эскән, алкаш тиеп көләләр.
Киске йырға шиғыр сығарһам,
Шағирҙар ҙа, тимәк, йүләрҙәр.

Ә ул киске йырҙар барыбер
Ишетелә теге быуаттан,
Урамдарға гармун моңдары
Ҡайтмаҫ микән инде ҡабаттан?

### Тапшырылмаған аманат

Бабам кеүек ян эшләнем
Сәтләүек ағасынан,
Һайлап ҡына ныҡ һәм төҙөк
Башҡалар араһынан.

Ат ялынан кереш үреп
Тартҡас, янға йән керҙе.
Ҡайҙа икән тапшырырға
Батыр егет - ил күрке?
Күңелемдән барлап сыҡтым
Ауылым егеттәрен,
Бер егет юҡ тапшырырҙай,
Һүрелде өмөттәрем.

Ҡарт-ҡоролар ғына ҡалған,
Егеттәр ситкә киткән.
Ҡалғандары "фунфур" эсеп
Теге донъяла икән.

Ата-бабам аманатын
Тапшырырға кемдәргә?
Ул аманат утта түгел,
Яна янғын - күңелдә.

### Уҡытыусы монологы

Үҫмерҙәрҙең күңел түтәленә
Орлоҡтарҙың халҡым биргәнен
Сәсә инем. Улар шытып сығып,
Емеш бирә ине бер мәлен.

Үҫмерҙәрҙең күңел түтәленә
Сит орлоҡтар инде сәсәләр,
Нимә үҫеп сығыр, мөһим түгел,
Ҡалынайһын бары кеҫәләр.

Тәбиғәттә ҡаты ҡанундар бар,
Һис боҙорға уны ярамай.
Аҡ айыуға банан кәрәкмәй шул,
Маймыл да бит балыҡ ашамай.

Нисә тапҡыр яҡлап ҡанундарҙы
Ихтилалдар булды, күтәрҙем.
Күтәрҙем дә, тағы баҫтырҙылар,
Еңелеүҙе ауыр кисерҙем.

Үҫентегә кәрәк үҙ мөхите,
Шунда ғына улар сирләмәй.
Аңлаһаңсы, теле-батша*, беҙгә
Ғәрип үҫентеләр кәрәкмәй.

*телевизор

### Үткән юлдар

Һуҙылып ҡала юлдар
Ентәй энә артынан,
Минең үткән юлдарҙы
Эҙләмәгеҙ картанан.

Күңел йөрәктәр аша
Дуҫлыҡ булып һуҙылған.
Дуҫ-иштәр менән бергә
Күпме юлдар уҙылған.

Ҡай урында уралып,
Нағышлап, биҙәп киткән,
Упҡын ситләп тә үткән,
Янып ҡына бик ситтән.

Сыуалсыҡ ере лә бар
Төйөнләнгән ҡай ерҙә,
Тик әҙәлмәҫ бер ҡасан
Тере сағымда бер ҙә.

**Фидаил САФИН.**
**Ҡариҙел районы.**

✓ *Күстәнәс ярты ҡаҙҙы күргән Фәрит: "О-о-о, минең буласаҡ кәләш бик һаран булмаҡсы әле ул. Ҡаҙҙың яртыһын ҡайҙа иттең?"- тип көлөп ебәрҙе. Миләүшә уңайһыҙланып китте.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТЕЛЕФОН...
## сирҙе билдәләй ала

■ Йель университеты (АҠШ) ғалимдары асыҡлауынса, медитация психик ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән шизофрения һәм аутизмды иҫкәртеү өсөн иң яҡшы сара булып тора. Невролог Джадсон Брюэр медитация ваҡытында баш мейеһе ҡабығы әүҙемлеген тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән. Оҙайлы ваҡыт медитация менән шөғөлләнеүселәр сит йоғонтоға бирелеп бармай, улар үҙҙәренең хәлен дөрөҫ баһалай ала. Шизофрения һәм аутизм менән яфаланыусы пациенттарға үҙҙәре тураһындағы уйҙар тынғы бирмәһә, медитация бындай уйҙарҙы ситкә ҡыуып, күберәк әлеге ваҡытта тирә-яҡта барған ваҡиғаларға йүнәлтергә мөмкинлек бирә.

■ Һуңғы осорҙа тикшеренеүселәр социаль селтәрҙәрҙең кешегә тәьҫирен өйрәнеүгә күп иғтибар бүлә. Табиптарҙың һуңғы асышы буйынса, Facebook баш мейеһендә үҙгәрештәргә алып килеүе ихтимал. Ғалимдар әлегә социаль селтәрҙәр менән әүҙем ҡулланған 125 кешене тикшереп, бик ҡыҙыҡлы һығымтаға килгән. Баҡтиһәң, баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәре ҙурыраҡ булған кешеләрҙең был селтәрҙәрҙә дуҫтары ла күберәк булған. Лондон университеты колледжы докторы Рйота Канаи әйтеүенсә, тикшеренеүҙәр барышында баш мейеһенең реаль һәм виртуаль дуҫтарҙың һанына бәйле булған өлөштәре барлығы ла асыҡланған. Әммә белгестәр әйтеүенсә, был күренештә социаль селтәрҙәрҙең бер ҡатнашлығы ла булмауы ихтимал. Мәҫәлән, интернет менән ҡулланыу ваҡытының оҙайлығы, кешенең үҙенең аралашыусан булыуы, мейе төҙөлөшөнөң үҙенсәлектәре лә быға сәбәпсе була ала. Шуға ла был өлкәлә тикшеренеүҙәр дауам итә.

■ Ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа, хатта машина йөрөткәндә лә кеҫә телефонығыҙҙы гел эргәгеҙҙә тотаһығыҙ, уны йыш-йыш алып ҡарап бараһығыҙмы? Арканзас университеты ғалимдары әйтеүенсә, юлда йөрөгәндә лә телефонын ҡулына ҡыҫып ултырыусылар обсессив-компульсив невроз менән яфалана. Сэм М. Валтон бизнес-колледжы белгестәре фекеренсә, телефонды гел генә ҡулда тоторға теләү стресс һәм хәүеф тойғоһоноң юғары кимәле тураһында һөйләй. Был осраҡта кешенең башында уны хәүефләндереүсе ниндәйҙер уйҙар барлыҡҡа килә, уны табиптар обсессия тип атай. Уларҙан ҡотолоу өсөн кеше бер үк һәм йөҙәткес хәрәкәттәрҙе - компульсияларҙы ҡабатлай башлай.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көй тыңлау хәүеф тойғоһон һәм депрессияны кәметә, кәйефте яҡшырта һәм баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәрен уята. Әммә Америка ғалимдары билдәләүенсә, эш эшләгән ваҡытта яраҡан көйөңдө тыңлау эштең сифатына кире йоғонто яһай икән. Неврологтар көй һәм тауыштарҙың мейе функцияларына тәьҫирен тикшереп, тулы тынлыҡта ғына мейенең яҡшыраҡ эшләй алыуын асыҡлаған. Белгестәр әйтеүенсә, көй яңғырап торған саҡта мейе бер юлы бер нисә мәсьәлә башҡара һәм уның когнитив функцияларының һөҙөмтәлелегә кәмей.

ӘЙ, ЯҘМЫШ...

# ДИМСЕ ДИҢГЕҘ КИСТЕРЕР



**Шулай бер көндө әхирәтенең әсәһе шылтыратты Миләүшәгә:"Ғүмер буйы яңғыҙ йөрөмәҫһең.Үҙеңә ҡулайлы ғына бер иш таптым әле. Айырылған, ҡыҙы үҙаллы тормош көтә. Яҡшы ғына ҡатын менән таныштырыуымды һорай. Бик күптәрҙе күҙ уңынан үткәргәндән һуң, һиңә туҡталдым. Бәлки, тағы ла бәхетеңде һынап ҡарарһың? Эсмәй, тартмай, кеҫәһе лә ныҡлы, үҙе лә әҙәпле күренә. Һинең номерыңды бирҙем, ошо арала шылтыратыр... "**

Миләүшә был апайҙың да һүҙҙәренә әллә ни иғтибар итмәне, көлөп кенә ҡуйҙы. Апай әйткән ир 3-4 көндән телефондан шылтыратты. Ышаныслы итеп һөйләшә, эште ҡыҫҡа тоторға уйлай. Әйтерһең, уны ғына көтөп, зарығып ултыралар. "Беҙ хәҙер йәш-елкенсәк түгел, осрашайыҡ, һөйләшәйек", тип, үҙе йәшәгән ҡалаға ҡунаҡҡа саҡырҙы үҙен Ринат тип таныштырған был ир. Әммә сит ирҙең "һайт" тигәненә "тайт" тип сығып китергә Миләүшәнең баҙнаты ла, ғорурлығы ла етмәне. Бераууыҡ шулай телефондан ғына һөйләшеп аралаштылар. Бер көндө Ринат: "Танышыуыбыҙға күп кенә ваҡыт үтте, һаман бер-беребеҙҙе күргәнебеҙ юҡ, бөгөн көт, кискә киләм", - тип шылтыратты.

Миләүшә барынса өҫтәл әҙерләне. Ҡыҙыҡһынып та, тулҡынланып та буласаҡ осрашыуҙы көтә башланы. Ҡыңғырау шылтырау менән ишекте барып асты. Өйгә үҙенән күпкә олораҡ, төҫ-башҡа арыу ғына ир килеп инде. Бер-береһенә тиҙ генә һынамсыл ҡарап алғас, Миләүшә ҡунаҡты түргә саҡырҙы. Улы менән таныштырҙы. Өҫтәл артына ултырышҡас, Ринат тып иттереп араҡы сығарып ҡуйҙы. Миләүшәнең күңелендә нимәлер келт итеп ҡалғандай булды. Шулай ҙа йөҙөнә сығарманы, бер ни булмағандай, тыныс ҡына:

- Миңә ҡоймаһаң да була, эсмәйем, - тине.

- Бик яҡшы, эскән ҡатындарҙы йәнем һөймәй. Үҙемдең дә эскем килмәй, былай ғына һөйләшеп ултырайыҡ, улайһа...

Ҡунаҡ алдына ҡуйылған тәрилкәһенә эйелде һәм ҡапыл:

- Абау, салатҡа һуғанды ҡалай эре турағанһың. Мин үҙем ваҡ ҡына туралғанын яратам, - тине көлөп. Шунан тағы өҫтәне: - Мул ғына ҡуллы икәнһең, майонездың да ҙур һауытлыһын алғанһың, икәүегеҙгә генә шул тиклем китәме?..

Миләүшә аптырап ҡалды, уңайһыҙланды. Ә ҡунаҡ бер ни булмағандай һүҙен дауам итте:

- Бына шулай, Миләүшә , әйтеүемсә, беҙ бала-саға түгел. Һиңә - ир, улыңа - атай, миңә яҡшы ҡатын кәрәк. Ҡатындар булманы түгел, бик күп булдылар. Тик барыһына ла тәү сиратта аҡса, машина, фатир кәрәк. Шуға күрә алдан әйтеп ҡуяйым, аҡса тоҡсайы тип уйлама, эш хаҡым да бәләкәй генә. Фатирымды ла ҡыҙыма ҡалдырырға йөрөйөм. Ә һинең улың былай тәртипле, аҡыллы ғына күренә, бәлки, торабара үҙемдең исемгә лә яҙҙырырмын. Ләкин туғыҙ айҙан мотлаҡ үҙебеҙҙең малай тыуырға тейеш. Үҙемдең ҡаланан берәй яҡшыраҡ эш белешәм, күсеп килерһең...

Миләүшә, был мине һынар өсөн һөйләйме, әллә шаяртамы, тип, бер ни аңламай тыңлап тик ултырҙы. Ысынды һөйләй тиһәң, бигерәк көлкө. Әйтерһең, уға кейәүгә сығырға ризалыҡ биреп, бөгөндән артынан эйәреп китергә ултыра. Юҡ инде, яңғыҙы ғына анау тиклем ауырлыҡтарҙы йырып сығып, үҙ мөйөшөн булдырып, эшендә арыу ғына вазифа биләп өлгөргәс кенә тәү күргән берәүҙең арбаһына ултырып сығып китә алмай ул хәҙер. Ә Ринат һүҙен дауам итте:

- Минең хәҙер йәш тә бара, әле зарланырлыҡ булмаһа ла, һуңынан ҡытыршылыҡтар ҙа килеп сығыуы бар. Улай-былай була ҡалһа, тегендә-бында йөрөп, күңел асырмын, тип уйлама ла. Икенсе аҙнала килеп, донъямды күрһәтергә алып ҡайтырмын. Былай миңә оҡшаның. Эш мәйеле белгәнгә оҡшағанһың, тәрбиәле лә күренәһең...

Ринат икенсе аҙнала әҙер торорға ҡушып, хушлашып ҡайтып китте. Ул сығып киткәс, был ни ғәләмәт булды әле, тигәндәй, оҙаҡ ҡына аптырап ултырҙы Миләүшә. Шул тиклем үҙ-үҙенә ышанған кешеләр ҙә була икән. Ундайҙар башҡаларҙың да үҙ фекере булыуын уйламай ҙа, күрәһең.

Саҡ ҡотолдо Миләүшә унан. Алдан бик ҡоро ғына, үҙ талаптары менән генә һөйләшкән Ринат хәҙер инде уны кейендереп-яһандырып, эшләтмәй генә өйҙә ултыртып ҡуйырға булып китте, башҡа талаптары ла йомшарҙы. Донъя тар бит ул, һуңынан уртаҡ таныштар ҙа килеп сыҡты. "Ҡырҡһаң, ҡаны сыҡмаҫ ҡарун, ҡатындан-ҡатынға йөрөй. Шул ҡарунлығы арҡаһында тәүге ҡатыны менән айырылышты", тинеләр уның тураһында. Ә бер танышы юл айҡан уның машинаһына ла ултырып килгән булып сыҡты. Юлға аҡса биргәс: "Ошондай һылыу ҡатын шулай һаранмы ни? Әллә аҡсаһы юҡмы? Ә үҙе ҡайһылай ҡыйбатлы тун кейеп алған", - тип, ризаһыҙ ғына көлөп ултырып ҡалған.

* * *

Ошо хәлгә бер йыл үткәс, һеңлеһе: "Апай, үҙеңде берәү менән таныштырам. Беҙ ҡуртымға алған өйҙөң хужаһы. Себерҙә йәшәй, шунда эшләй. Килешеп китһәгеҙ, беҙ төҙөп ятҡан өйгә күрше генә булыр инегеҙ. Телефон номерыңды бирҙем,- тине.

Фәрит менән шулай танышып киттеләр. Бик күңелле, романтик кеше булып сыҡты ул. Матур-матур йылы һүҙҙәрен дә йәлләмәне, алтын тауҙар ҙа вәғәҙә итте. Миләүшәнең күңелһеҙ генә барған бер төрлө тормошо йәнләнеп ҡалғандай булды. Телефон шылтырауын да көтөп алыр булып китте. Саҡ ҡына шылтыратмайыраҡ торһа, берәй нәмә әйтеп, үпкәләтмәнемме икән, тип, борсолоп уҡ китә ине. Шулай дүрт ай тирәһе телефондан һөйләшеп йөрөй торғас, Фәрит Миләүшәне ҡунаҡҡа саҡырҙы. Матур һөйләшә белгән кешенең күңеле лә, үҙе лә арыуҙыр әле, тип, тәүәккәлләргә булды Миләүшә. Сәсен йәштәрсә киҫтерҙе, асыҡ төҫкә буятып, яңы прическа эшләтте. Күстәнәскә төрлө ҡайнатмалар, бал, ҡаҙ алып, Себергә сығып китте. Батырланып сығып китеүен китте лә ул, ә бына такси менән кәрәкле йорт алдына килеп туҡтағас, бар ғына ҡыйыулығы сигенеп, уңайһыҙланды ла ҡалды. Анау тиклем ер үтеп килгәс, кире боролғо ла килмәй. Икеләнеп, уңайһыҙланып тора биргәс, ни булһа ла булыр, тип, инергә ҡарар итте. Ишекте мыҡты ғына кәүҙәле, күҙҙәре көлөп торған ир асты. Миләүшәне әйҙүкләп түргә үткәргәс, сәй әҙерләү өсөн үҙе аш бүлмәһенә сығып китте. Фатирҙың эсе яңғыҙаҡ ир йәшәүенә ҡарамаҫтан, бик йыйнаҡ һәм ҡотло ғына ине. Ипле, бөхтә кеше йәшәгәне әллә ҡайҙан күренеп тора. Сит фатирҙа ни эшләргә белмәй аптырап ҡалған Миләүшәнең бар уңайһыҙланыуҙары юҡҡа сығып, күңеле күтәрелеп китте. Фәрит эргәһенә сығып, өҫтәл әҙерләшә башланы. Күстәнәстәрен сығарып ҡуйҙы.

Күстәнәс ярты ҡаҙҙы күргән Фәрит: "О-о-о, минең буласаҡ кәләш бик һаран булмаҡсы әле ул. Ҡаҙҙың яртыһын ҡайҙа иттең?"- тип көлөп ебәрҙе. Миләүшә уңайһыҙланып китте. Бынау эҫелә әллә барып етә, әллә юҡ, тип, ярты ғына ҡаҙ алғайны шул. Бөтәүләй генә алманы шуны, хәҙер былайтып уңайһыҙланып та тормаҫ ине.

Табын әҙер булғас, өҫтәл артына ултырыштылар. Танышыу хөрмәтенә шарап эсеүҙән баш тартҡас, Фәриттең ҡашы һикереп китте.

- Нишләп эсмәйһең?

- Шарапҡа минең аллергия шул...

Фәрит был яуапты ишеткәс, Миләүшәгә һынамсыл ғына ҡарап ҡуйҙы ла, артыҡ көсләшеп тормай, ҡойолған шарапты төп күтәрә эсеп ебәрҙе. Шулай итеп, һөйләшә-һөйләшә яйлап ҡына бер үҙе эсеп ултыра торғас, Фәриттең теле лә сиселеп китте. Миләүшәгә оҙаҡ ҡына һынамсыл ҡарап ултырғандан һуң, ҡулдары менән ҡапыл ғына уның килешле итеп эшләнгән прическаһына ҡағылып ҡуйҙы һәм:

- Бергә йәшәй башлаһаҡ, бындай прическа менән йөрөмәҫһең, йәме, аҡыллым, сәсеңдең төҫөн дә үҙгәртеп ебәрһәң, тағы ла яҡшыраҡ булыр... - тине. Миләүшә бер нәмә лә әйтмәй, йылмайып ҡына ҡуйҙы. Быны күреп, Фәрит тамам йәнләнеп китте:

- Бына шулай, Миләүшә, яңғыҙ булһам да, башҡаларҙан ҡалышмай ғына йәшәп ятҡан булам. Килешеп китһәк, киләсәккә матур-матур пландар ҙа ҡороп ташланым әле. Минең ауылдағы өй буш тора бит. Улың менән шунда күсеп килһәң, һуғымлыҡ мал алып, ҡош-ҡорт үрсетеп, баҡса үҫтереп, бынамын тигән итеп йәшәргә булыр ине. Мин бында аҡса эшләрмен. Һин быға нисек ҡарайһың, матурым?

✔ *Беҙҙең ашҡаҙаныбыҙ ике йоҙроҡ ҙурлыҡ. Йәғни уға ни бары 200-250 грамм ғына аҙыҡ һыя. Тап шул күләм өсөн генә ашҡаҙан һуты бүленә: организм бик рациональ!*



ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

Миләүшә албырғап китте. Туҡта, быға ауылдан бал-май, ит-һөт ебәреп ятыусы хеҙмәтсе кәрәкмә әллә? Икең ике яҡта йөрөгәс, нимәгә уға ир? Әле лә ирһеҙ йәшәп ята лаһа. Һөйләшеп, Фәриттең киләсәккә пландарын тыңлап ултыра торғас, шешәләге шарап та бөттө.

-Яҡындағы магазинда бик шәп коньяк һаталар, тиҙ генә барып киләйем, гүзәлем? Бигерәк матур ултырабыҙ бит...

Фәриттең артынан ишек ябылыу менән Миләүшә ырғып торҙо ла, әйберҙәрен йыя башланы. Шарт-шорт йыйынып, килтергән күстәнәстәрен дә кире һалып алғас, фатирҙан сығып һыҙҙы. Урамға килеп сыҡҡас, ҡаушауынан ҡайҙа китергә белмәй, аланйолан ҡаранып торҙо ла, Фәрит килеп сыҡмаҫ борон тип, шундағы өйҙәр араһына инеп юғалды. Ҡурҡышынан йөрәге дөп-дөп тибә, әйтерһең, берәй нәмә урлап, ҡасып бара. Фәриткә осрап ҡуймайым тип, тирә-яғына ҡарана-ҡарана ғына такси тотто ла, таныштарына һыпыртты. Юлда барғанда Фәрит шылтырата башлағас, телефонын бөтөнләй һүндереп үк ҡуйҙы.

Бер ниндәй иҫкәртеүһеҙ ахвах итеп килеп ингән Миләүшәне күреп, таныштарының күҙе дүрт булды. Миләүшә көлә-көлә хәлде һөйләп бирҙе. Шулай итеп, үҙе килтергән ҡаҙҙан бәлеш бешереп, рәхәтләнеп күңел асып, күптән күрешмәгән дуҫтары менән осрашып, бер ниндәй үкенесһеҙ генә йөрөп ҡайтты ул Себерҙән. Тик хәҙер берәйһе менән таныштырам, тиһәләр, ҡулын ғына һелтәп ҡуя. Уға тигәндәр үҙ-үҙенә артыҡ ышанып, ҡарун була ла ҡуя торған. Яҙған булһа, димләүҙәрһеҙ ҙә килеп сығыр әле уның да ярҙыны...

## Кем һуң ул димсе?

Рәсәйҙә димселәр элек-электән хөрмәтле кешеләр һаналған. Күп быуаттар элек Европала ла димселәр хеҙмәте дәүләт һәм сиркәү тарафынан иң абруйлы һәм кәрәкле һөнәр һаналған. Был хеҙмәт өсөн юғары хаҡ түләнгән. Уларҙы һәр өйҙә яҡты йөҙ, оло хөрмәт менән ҡаршы алғандар, сөнки нәҡ димселәр йәше еткәндәрҙең матди һәм социаль хәленә ҡарап, үҙ ишен табырға ярҙам иткән һәм уларҙың киләсәк ғаилә тормошон хәл иткән. Ғөмүмән, өйҙән-өйгә йөрөгән димселәр ауылдағы бөтә яңылыҡтарҙы ла белеп торған. XX быуатта димсе хеҙмәте үҙенең элекке дәрәжәһен юғалта төшә, ләкин 100 йылдан һуң был хеҙмәт яңы исем аҫтында тағы ла үҙ асылына әйләнеп ҡайта.

Статистика һәм психологтар хәбәр итеүенсә, XXI быуат башында яңғыҙлыҡ мәсьәләләре ҡырҡа артҡан. Кешеләр үҙ эсенә, үҙ мөхитенә бикләнгән. Күбеһе йә эшкә сумған, йә компьютер, интернет ауына эләгеп, бер-береһе менән аралашыуҙан, үҙ-ара мөнәсәбәттәр булдырыуҙан туҡтаған. Шунлыҡтан, күпме ғаиләләр ҡоролмай, күпме балалар тыумай ҡала. Нәҡ бына ошо сәбәптәр арҡаһында элекке димселәр хеҙмәтен булдырыу зарурлығы яңынан ҡалҡып сыға. Яусылар хеҙмәте күрһәтеү буйынса үҙ эшен асҡан шәхси эшҡыуарҙар ҙа, ауылдарҙа йәшәгән оло йәштәге инәй-бабайҙар ҙа яңғыҙаҡтарға үҙ ишен табырға ярҙам итә. Яусылар хеҙмәтенә ябай кешеләр генә түгел, ә ҡайҙандыр үҙ ишен эҙләп йөрөргә ваҡыты булмаған билдәле кешеләр ҙә мөрәжәғәт итә, сөнки юғары даирәләрҙә йөрөп тә, үҙ мөхитенән булмаған ябай ғына кешеләр менән танышырға теләүселәр ҙә күп һәм улар араһында димләү буйынса мактур ғына ғаилә ҡороусылар ҙа юҡ түгел.

Бөгөнгө көндә электрон яусылар ҙа етерлек. Ҡайһы берәүҙәр ваҡыт әрәм итеп, кеше күҙенә салынып, урам, кафе, театрҙар буйлап йөрөгәнсе, бер ҡайҙа ла сығып йөрөмәйенсә, рәхәтләнеп өйҙән генә танышыуҙы хуп күрә. Ләкин, бындай танышыуға әллә ни ышаныс юҡ. Тәжрибә күрһәтеүенсә, кеше факторҙарының булмауы сәбәпле, машина формаль йәки яңылыш яуаптар бирә. Бынан тыш, кешелә уның уй-фекере, аҡылынан тыш, үҙенә генә хас нур ҙа була бит әле. Ҡайһы саҡта ошо нур кешенең ҡайһы бер етешһеҙлектәрен дә ҡаплап ҡуйыуға һәләтле. Интернет аша танышып, оҙаҡ ваҡыт аралашып, бер-береһе хаҡында бөтә нәмәне белеп бөтһәләр ҙә, күптәр үҙҙәре төҙөгән иллюзияны боҙоуҙан ҡурҡып, ысынлап осрашыуҙан ҡаса. Шуға күрә электрон яусылар бер ваҡытта ла ысын конкурент була алмай.

**Ҡыҙыҡ өсөн яусылыҡ менән шөғөлләнеүсе эшҡыуар ҡатындың интернет аша һөйләгәндәрен тыңлап үтәйек:** "Мөрәжәғәт иткән кешенең фотоһын, уның характеры, тормошҡа ҡарашы, һөнәре, йәмғиәттәге урыны буйынса белешмә алам. Һуңынан уртаҡ ҡыҙыҡһыныуҙары, ҡараштары булған икенсе кешегә ошо фотоны күрһәтәм. Фотолар буйынса бер-береһен оҡшатһалар, осраштырам. Әгәр ҙә инде кемдер телефон аша ярҙам һораһа, тест һорауҙарына бирелгән яуап буйынса яраҡлы кандидат һайлайым. Бөтә ирҙәр ҙә иң беренсе урынға тышҡы ҡиәфәтте ҡуя. Быға тиклем әле бер ирҙең дә, тышҡы йөҙө нисек булһа ла ярай, тигәне булманы. Күп ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙың сөйәр яҡтарына тыныс ҡарай, бары тик улар тиҙ асылмаһын. Ирҙәр менән һөйләшкәндә уның быға тиклем өйләнгәнме, юҡмы икәнлеген дә белеп була. Ғәҙәттә, айырылған ирҙәр ҡатын-ҡыҙға әллә ни талапсан түгел. Ә өйләнмәгәндәрҙең иһә үҙ ҡатын-ҡыҙ образы була. Улар үҙҙәре теләгән тышҡы ҡиәфәт, торош, характерҙы ентекләп һүрәтләй. Буйҙаҡтар бигерәк тә артырап ебәрә. Ундайҙарға кейәүгә сығыусы ла ҡурҡыныс һымаҡ, ә никахта иһә улар ышаныслыҙ булыусан. Сөнки улар 20, 30-ҙа таба алмаған идеалдарын 40, 50-лә табырына өмөтләнә..."

**Бер нисә ишле ҡауыштырыусы Сәриә апай һөйләй:** "Димләү енел-елпе эш түгел. Кешене тота килеп кенә ҡауыштырып булмай. Уның да төрлө нескәлектәре була. Өйләндергән хәлдә лә эш тамам түгел әле, ҡауыштырған кешеләрең берегеп, ысын ғаилә булып киткәнсе борсолаһың. Әгәр инде өйләнешеп тә айырыла ҡалһалар, төрлө насар һүҙҙәр ҙә ишетергә тура килә. Күпме иште ҡауыштырҙым, ләкин әле быға тиклем береһенең дә рәхмәт әйткәне булманы, димләп өйләндергәндәр, тигән һүҙҙән кәмһенәләрме икән әллә, тип уйлап ҡуям..."

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**
**Белорет ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Нисек итеп бәхәстә материалисты еңергә?

**Бының өсөн бары тик биш принципты ғына иҫтә тотоу ҙа етә: мөхәббәт, аңлау, уйлап эш итеү, ихтыяж һәм килешеү.**

Дәғүәсең менән бәхәсләшкәндә, уны нисек яратмаҡ кәрәк? Ҡарашы һеҙҙең ҡарашҡа ҡапма-ҡаршы булған кешене нисек аңларға? Дошман булған кешегәҙгә нисек яҡынларға? Теге йәки был сиккә килтереп ҡыҫҡанда, нисек итеп гүзәл булып ҡалырға? Тәү ҡарашҡа был мәсьәләләр ҡапма-ҡаршы кеүек күренә, әммә рухи үҫешкән кеше өсөн түгел.

Алда һеҙ тышҡы ҡапма-ҡаршылыҡ кимәлендә метафизик эш менән таныштығыҙ, сөнки кинлек, ваҡыт һәм аралашыу тураһында физика ҡанундарын емерҙегеҙ. Һеҙ ошо ҡанундарҙан бейеккәрәк, менталь, икенсе ҡағиҙәләргә буйһонған, бик йыш физика ҡанундарына ҡаршы килгән кимәлгә күтәрелдегеҙ.

Бер миҫал ҡарайыҡ. Магниттың нимә икәнен яҡшы беләһегеҙ. Уның ике полюсы бар. Әгәр бер магниттың төньяҡ полюсын икенсе магниттың көньяҡ полюсына килтерһәк, улар бер-береһенә тартылыр. Икенсе яҡтан, бер төрлө полюстарҙы берләштерергә тырышһаҡ, улар бер-береһен ситкә этәрер. Тимәк, физик донъяла ҡапма-ҡаршылыҡтар тартыла, бер төрлөләр бер-береһенән ситләшә.

Ә менталь планда хәлдәр нисек тора? Һеҙҙе үҙегеҙгә оҡшамаған кешеләр ылыҡтырамы? Әлбиттә, юҡ. Беҙ барыбыҙ ҙа үҙебеҙгә оҡшаған кешеләргә өҫтөнлөк бирәбеҙ. Ә ҡаршы енес вәкилдәренән (физик мәғәнәлә) беҙҙең ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙҙы һәм инаныуҙарыбыҙҙы бүлешкән кешене (менталь кимәл) һайлайбыҙ.

Шулай итеп, бер аҙға ғына физик планды онотоп, юғарыраҡ, рухи кимәлдәге бәхәстә енеп сығыу, йәғни үҙегеҙҙән алыҫ торған кешене инандырыу, уға тормошҡа һеҙҙең күҙлектән бағырға ярҙам итеү өсөн биш принципты ҡулланып ҡарайыҡ.

**Менталь кимәлдәге эш ҡағиҙәләре:**

Мөхәббәт. Тышҡы ҡиәфәт буйынса айырмалыҡтар булһа ла, беҙ барыбыҙ ҙа кеше. Үҙенсәлегебеҙгә ҡарамаҫтан, беҙ кешелектең бер өлөшө: әгәр беребеҙ донъяны бысратһа, башҡалар ҙа зыян күрә; берәү башҡаларға ярҙам итә икән, тирә-яҡтағыларҙың да күңеле күтәрелә Айырмалыҡтар тураһында онотоп, берлегебеҙ тураһында уйлағыҙ. Быны хәҙер үк эшләһәгеҙ, бер нисә секунд дауамында йылы тулҡын килеүен тойорһоғоҙ.

Аңлау. Һеҙ тәрбиә, шәхси тәжрибә, тышҡы донъя сигналдары һөҙөмтәһендә бөгөнгө кимәлгә еткәнһегеҙ. Һеҙҙең ҡаршыла ултырыусы ла уны нисек тәрбиәләгәндәр һәм уҡытҡандар - шуның һөҙөмтәһендә шундай кимәлгә еткән. Уның шәхси тәжрибәһе һеҙҙекенән ныҡ айырыла. Әгәр һеҙ үҙ-үҙегеҙ булып ҡалырға хаҡлы икән, ни өсөн ул был хоҡуҡтан мәхрүм булырға тейеш? Уны аңларға, йәғни уның үҙ-үҙе булырға хоҡуғы барлығын аңларға тырышығыҙ.

**Роберт СТОУН.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Туҡланыу тураһында

Күп сирҙәрҙең сәбәбе - дөрөҫ туҡланмауҙа. Шул уҡ ваҡытта төп проблема артыҡ күп ашауҙа ла булыуы мөмкин. Беҙҙең ашҡаҙаныбыҙ ике йоҙроҡ ҙурлыҡ. Йәғни уға ни бары 200-250 грамм ғына аҙыҡ һыя. Тап шул күләм өсөн генә ашҡаҙан һуты бүленә: организм бик рациональ!

Шул уҡ ваҡытта ағзаларыбыҙҙың ныҡлыҡ запасы бик ҙур һәм ашҡаҙан бик ныҡ һуҙылыуы һәм бер нисә килограмм аҙыҡты һыйҙырыуы ихтимал. Шунан тағы бер нисә сынаяҡ сәйҙе... Һөҙөмтәлә ашҡаҙан һуты күп тапҡыр шыйыҡлана. Бындай туҡланыуҙан һуң унда бер нәмә лә йүнләп эшкәртелмәй. Бөтөн нәмә эсәктәргә китә һәм шунда серей, әсей. Һөҙөмтәлә - организм шлаклана, дөйөм интоксикация барлыҡҡа килә. Барлыҡ ағзалар һәм система шунан яфалана, барлыҡ ауырыуҙар шунан барлыҡҡа килә. Шул уҡ ваҡытта организм токсиндарҙы нейтраллəштерергә тырыша, уларҙы май күҙәнәктәре менән ҡаплай - һимереү шулай килеп сыға.

Ни тиклем аҙыраҡ ашаһаҡ, аҙыҡ шул тиклем яҡшыраҡ үҙләштереләсәк, шул тиклем сәләмәтерәк буласаҡбыҙ!

Шыйыҡлыҡты ашағанға тиклем ярты сәғәт элек һәм ашағандан һуң ике-өс сәғәт үткәс эсегеҙ. Ашағанда уҡ беҙ бик күп һыу ҡабул итәбеҙ (аҙыҡ-түлек үҙе уҡ 80-90 процентҡа һыуҙан тора). Ашағандан һуң шыйыҡлыҡ эсеү ихтыяжы ауыҙ ҡыуышлығында аҙыҡ ҡалдығы ҡалған өсөн барлыҡҡа килә, шуға аш ҡабул иткәндән һуң мотлаҡ ауыҙығыҙҙы сайҡағыҙ.

Икенсе проблема - сүпрәле икмәк. Сүпрә таяҡсалары хатта йылылыҡ менән эшкәрткәндә лә юҡҡа сыҡмай. Әгәр ашҡа шөкәрә киҫәген ташлаһаҡ, тиҙҙән аш әсейәсәк. Әгәр шөкәрәне һыулы банкаға һалып, шәкәр өҫтәһәк, ул әсей - сүпрә бактериялары шәкәрҙе ашай башлай.

Ашҡаҙанға эләгеп, сүпрә таяҡсалары тиҙ үрсей һәм организмға кәрәкле бактерияларҙы - аминокислоталарҙы ашай. Шунан дисбактериоз барлыҡҡа килә, һөҙөмтәлә аҙыҡ-түлекте эшкәртмәү һәм интоксикация, йәғни организмдың үҙ-үҙен ағыулауы башлана.

Беҙ даими рәүештә туймаҫ сүпрә таяҡсаларын ашатабыҙ түгелме? Барыһы ла сүпрә икмәген ашау һөҙөмтәһе. Сүпрә таяҡсалары аҙыҡ-түлекте тарҡатыусы әсәк бактерияларын, интерферонды - иммунитет нигеҙе эшләп сығарыусы әсегән һөт аҙыҡтары бактерияларын ашай.

Дисбактериоздың билдәләре - ҡоро тире, сәс ҡойолоу, күҙ аҫтындағы күк һәм шешенеү, ашағандан һуң эс тартыу, ауыҙҙан, тәндән, енес ағзаларынан насар еҫ килеү.

Ҡомалаҡлы икмәк ашағыҙ - тәмле лә, файҙалы ла. Йәки икмәкте өйҙә, сүпрәһеҙ бешерегеҙ йәиһә бөтөнләй икмәктән баш тартығыҙ. Көрпәле икмәк (хлебцы) ҡулланырға мөмкин - уларҙа сүпрә юҡ.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**



## 12 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жизнь и приключения Мишки Япончика". Сериал
22.30 "Судьба на выбор"
23.30 "Познер"
00.30 Ночные новости
00.40 "Форс-мажоры", 12-я серия
01.30, 03.05 "Реклама для гения". Драма
03.00 Новости
03.25 "Александр Зацепин. "В огнедышащей лаве любви..."
04.25 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему", 230-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 200-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 46-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Утомленные солнцем-2". "Цитадель", 3-я и 4-я серии
22.45 "СССР. Крушение". Док. фильм
23.50 "Исаев", 5-я серия
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.15 "Чак-2". Сериал
04.30 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.25 "Дикий-2". Криминальный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "В зоне особого риска"
02.20 "Один день. Новая версия"
03.00 "Ставка на жизнь". Остросюжетный сериал
04.55 "Сыщики". Детективный сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15, 00.00 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Новости недели"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Хазина". Конкурс им. Ю. Исянбаева. 2-я часть**
**17.15 "Надо знать!"**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Следопыт"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.15 "Пора разобраться"**
**23.25 "Любимые мелодии"**

## 13 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жизнь и приключения Мишки Япончика". Сериал
22.30 "Владимир Высоцкий. "Так оставьте ненужные споры..."
23.30 Ночные новости
23.55 "На ночь глядя"
00.50 "Terra nova". Сериал
01.40, 03.05 "В тылу врага: Колумбия". Боевик
03.00 Новости
03.34 "Аркадий Райкин. Король и шут страны Советов"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему", 231-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 201-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 47-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Утомленные солнцем-2". "Цитадель", 5-я и 6-я серии
22.55 "СССР. Крушение"
23.55 "Исаев", 6-я серия
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.15 "Честный детектив"
02.45 "Чак-2"
04.15 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.25 "Дикий-2". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "ГРУ. Тайны военной разведки"
01.30 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк
01.10 "Таинственная Россия: Ямало-Ненецкий автономный округ. Проклятие шаманов?"
02.05 "Кулинарный поединок"
03.05 "Ставка на жизнь"
04.55 "Сыщики". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Пора разобраться"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Башкорт йыры"**
**14.15 "Весело живем"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Байтус"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 "Хазина". Конкурс им. Ю. Исянбаева. 3-я часть**
**18.00 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**18.15 "Взгляд без слов"**
**18.30, 22.30 Новости "(на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Действующие лица"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 "Ностальгия". Концерт**

## 14 ДЕКАБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жизнь и приключения Мишки Япончика"
22.30 "Среда обитания"
23.35 "Ночные новости"
23.55 "Убийство"
01.05 "Возвращение универсального солдата"
02.35, 03.05 "Воссоединение семьи Медеи"
03.00 "Новости"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 202-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 48-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Утомленные солнцем-2". "Цитадель", 7-я серия
21.55 "СССР. Крушение"
00.05 "Исаев", 7-я серия
01.05 "Вести+"
01.25 "Профилактика"
02.30 "Горячая десятка"
03.25 "Чак-2"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.25 "Дикий-2"
23.20 "Сегодня. Итоги"
23.40 "Путь самца". Мелодрама
01.50 Футбол. Лига Европы УЕФА
04.00 "Лига Европы УЕФА. Обзор"
04.30 "Квартирный вопрос"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Борсак"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.45, 17.15 "Дело мастера"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Байык"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семер"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 "Республиканский праздник шэжерэ в Краснокамском районе". 1-я часть**
**17.15 "Дело мастера"**
**18.00 "Тарихи фараз"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Пора разобраться"**
**00.15 "Поет Назира Закирова"**

## 15 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жизнь и приключения Мишки Япончика"
22.35 "Человек и закон"
23.35 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная России - сборная Финляндии (в перерыве - "Ночные новости")
01.40, 03.05 "Месть". Криминальная драма
03.00 "Новости"
04.05 "Участковый детектив"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 203-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 49-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Загадка для Веры". Детектив
23.50 "Исаев", 8-я серия
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.15 "Чак-2"
03.45 "Комната смеха"
04.30 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.25 "Дикий-2"
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Женский взгляд"
00.20 "Всегда впереди. Казанский (Приволжский) федеральный университет"
01.20 "Дачный ответ"
02.20 "Один день. Новая версия"
02.55 "Ставка на жизнь"
05.00 "Сыщики". "Сахарная кривая"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Тамле" (на русск. яз.)**
**12.45, 17.15 "Дело мастера"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Пора разобраться"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 "Республиканский праздник шэжерэ в Краснокамском районе". 2-я часть**
**18.00 "Волшебный курай"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 Юлаевский стиль. 50-летию хоккейного клуба "Салават Юлаев" посвящается**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Пятый угол"**
**00.15 Итоги II Международного конкурса музыкантов-исполнителей им. З. Исмагилова**
**00.45 "Музыка на канале"**

## 16 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Республика Казахстан. Куда приводят мечты"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Поле чудес"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Государственному Кремлевскому дворцу 50 лет!" Юбилейный концерт
23.35 "Дневник Бриджит Джонс". Комедия
01.20 "Принц приливов". Мелодрама
03.45 "Зуд седьмого года"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Мой серебряный шар. Анастасия Вертинская"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 204-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 50-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Кривое зеркало"
23.05 "Мужская интуиция". Мелодрама
01.15 "Мой сын, мой сын, что ты наделал?" Драма
02.55 "Один - одинокое число"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный"
21.30 "История всероссийского обмана. Народная медицина"
23.15 "20 лет. История о будущем". Док. фильм
00.25 "Одиночка". Боевик
02.30 "Ставка на жизнь"
04.25 "Сыщики". "Сахарная кривая". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Царь горы"**
**16.45 "Автограф"**
**18.00 "Йома"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 Юлаевский стиль. 50-летию хоккейного клуба "Салават Юлаев" посвящается**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 "Муз-базар"**
**00.45 "Народные мелодии"**

## 17 ДЕКАБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Али-баба и сорок разбойников"
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Владимир Высоцкий. "Так оставьте ненужные споры..."
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Суета сует"
13.55 "Зима в Простоквашино"
14.10 "Умница красавица"
16.00 "Все хиты "Юмор VM" на Первом"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.25 "Болеро"
21.00 "Время"
21.15 "Два дня". Драма
22.55 "Прожекторперисхилтон"
23.30 "Что? Где? Когда?"
00.40 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная России - сборная Швеции
02.40 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная Чехии - сборная Финляндии
04.40 "Алексей Булдаков. Ну вы, блин, даете!"

### РОССИЯ 1
05.00 "Время радости"
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Дела и люди"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив"
12.25 "Пятая группа крови". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Пятая группа крови". Продолжение
16.55 "Новая волна-2011". Лучшее"
18.55 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "В полдень на пристани". Мелодрама
00.35 "Девчата"
01.10 "Клинч". Драма
03.00 "Мажестик"

### НТВ
05.35 "Аэропорт". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Дорожный патруль-4". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Таинственная Россия: Иркутск и Улан-Удэ. Гости из будущего?"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа, максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Последнее слово"
00.00 "Отставник-2". Боевик
01.55 "Дорожный патруль-4". Сериал
03.50 "Кремлевская кухня"

### БСТ
**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 Мультфильм**
**08.00 Республиканский фестиваль-марафон национальных культур народов РБ**
**09.30, 13.30 "Взгляд без слов"**
**09.45 "Надо знать!"**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Дело мастера"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Взгляд без слов"**
**13.45 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню"**
**15.55 День хоккея, посвященный 50-летию ХК "Салават Юлаев"**
**18.00 Открытый чемпионат России по волейболу. Суперлига. "Урал" (Уфа) - "Зенит" (Казань). Прямая трансляция**
**20.00 "Башкорттар"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "За порогом"**
**21.00 "Парад планет"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Парад планет"**
**22.45 "Башкорт йыры"**
**23.15 "КВН. Уфимская лига. Финал"**

## 18 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Отряд особого назначения"
07.50 "Армейский магазин"
08.25 "Дисней-клуб"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Женский журнал"
10.25 "Непутевые заметки"
10.40 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "Виталий Соломин. Между Ватсоном и "Зимней вишней"
13.10 "Специальное задание"
14.20 "Умница красавица"
16.05 "Ералаш"
16.35 "Старики-разбойники"
18.20 "Юрий Никулин. Признание в любви"
19.20 "Премьера. Юрию Никулину - 90!"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.05 "Красная звезда"
00.15 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная России - сборная Чехии
02.15 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная Швеции - сборная Финляндии
04.15 "Участковый детектив"

### РОССИЯ 1
05.40 "Тайна "черных дроздов". Детектив
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Обменяли хулигана на Луиса Корвалана..."
12.20 "Пятая группа крови". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Пятая группа крови". Продолжение
16.00 "Смеяться разрешается"
18.05 "Стиляги-шоу с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Однажды в Новый год". Мелодрама
23.05 "Специальный корреспондент"
00.05 "Отдамся в хорошие руки"
02.15 "Полтергейст
04.15 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.00 "Аэропорт". Сериал
07.00 "В поисках Франции"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20"Дорожный патруль-4". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Тайный шоу-бизнес"
22.55 "НТВшники"
00.20 "Обитель". Криминальная драма
02.00 "Первый снег". Триллер
04.00 "Дорожный патруль-4"

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 Концерт, посвященный 25-летию БХК**
**08.45 "Взгляд без слов"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Автограф". Х. Иргалин**
**10.00 "Баурсак"**
**10.10 "Городок АЮЯ"**
**10.25 "Семэр"**
**10.40 "Шатлык йыры"**
**10.50 "Шэп арба"**
**11.00 "Байтус"**
**11.15 "Сулпылар"**
**11.30 "Гора новостей"**
**11.45 "Дарман"**
**12.30 Новости недели**
**13.00 "Тамле"**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30 "Замандаштар"**
**16.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Мечел" (Челябинск). Прямая трансляция**
**19.15 "Сэнгелдек"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "Новости спорта. Итоги"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык"**
**23.00 "Вечер.com"**
**23.45 "Вахит Хызыров собирает друзей"**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# КҮҢЕЛ ТӨШӨНКӨЛӨГӨНӘН...



## ит, картуф һәм шоколад ҡотҡара



**Ҡышҡыһын ниндәй аҙыҡ-түлектәргә өҫтөнлөк бирергә? Ошо турала белгестәр фекеренә ҡолаҡ һалайыҡ.**

Диетологтар әйтеүенсә, файҙаһыҙ аҙыҡтарҙың булыуы мөмкин түгел, файҙаһыҙ күләм генә бар. Мәҫәлән, бөтәбеҙгә лә мәғлүм булыуынса, шоколад күңел төшөнкөлөгөнән иң яҡшы сара булып тора. Ҡайһы берәүҙәр һимертә, тип, шоколадтан баш тарта. Көн һайын булмаһа ла, организм өсөн шоколад файҙалы, бары тик һөтлө шоколадтарға ҡарағанда, ҡара шоколадҡа өҫтөнлөк бирергә кәрәк.

Тәҫтәрҙең кеше тормошонда ҙур роль уйнауы тураһында бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ. Хатта аҙыҡ-түлек һайлағанда ла сағыу, мәҫәлән, ҡыҙыл, ҡыҙғылт һары төҫлө йәшелсәләргә, емеш-еләктәргә өҫтөнлөк бирегеҙ. Улар рәтенә персик, ҡарбуҙ, нектарин, помидор, боростар инә. Улар организмда эндорфин бүленеп сығыуға йоғонто яһай.

Шулай уҡ сағыу төҫлө һауыт-һаба һатып алыу кәңәш ителә. Әбына ҡара-ҡора төҫлөләрен төпкә йәшерергә кәрәк. Ғөмүмән, ҡыҙыл, һары, күк төҫлө һауыттар күңелде күтәрә. Төҫ терапияһына килгәндә, сағыу төҫлө һауыт-һабаға ғына түгел, асыҡ төҫлө кейемдәргә лә өҫтөнлөк биреү яҡшы. Күтәренке кәйефтә булам, тиһәгеҙ, һоро-һары төҫтәге кейемдәрегеҙҙән ҡотолоғоҙ.

Ир-атҡа һыйыр ите ашарға тәҡдим ителә. Ҡатын-ҡыҙҙарға аҡ иткә, балыҡ ризыҡтарына өҫтөнлөк биреү кәңәш ителә. Бешерелгән картуфтың файҙаһы тураһында ла онотмағыҙ. Картуф үҙе бер дәрт, ҡеүәт сығанағы булып тора. Кәнфиттәр урынына мармелад, киптерелгән емеш-еләктәр ҡулланыу отошло булыр.

Диетологтар баҙарҙан йәки кибеттән аҙыҡ-түлек һатып алғанда түбәндәге ҡағиҙәләрҙе иҫтә тоторға кәңәш итә:

Татлы булмаған тәрҙәргә өҫтөнлөк бирегеҙ. Мәҫәлән, йәшел алма, әфлисун, киви, ҡайһы саҡта ананас та бара.

Үҙегеҙҙе персик, слива, ҡарбуҙ менән һыйларға онотмағыҙ. Пектин һәм күҙәнәктән тыш, уларҙа витаминдар күп. Әбына банан, груша, виноградты тәмтом сифатында ғына ҡулланырға кәрәк. Медицина белгестәре әйтеүенсә, кеше көнөнә биш төрлө емеш-еләк ашарға тейеш. Экзотик емештәргә аҡса түкмәһәгеҙ ҙә була, уларҙы беҙҙең организм барыбер үҙләштерә алмай.

Йәшелсәләрҙе миҙгеленә, үҫкән урынына ҡарап һайлау мөһим. Витаминдар тамырҙаҡтарҙа яҡшы һаҡлана, шуға күрә ҡышын кишер, сөгөлдөр, кәбеҫтә, һуған, һарымһаҡ кеүек йәшелсәләрҙе даими ашарға кәрәк. Укроп, петрушка, салатты ла онотмағыҙ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Беҙҙең көндәлек рационыбыҙҙа һөтлө аҙыҡ-түлектәр мотлаҡ булырға тейеш. Кешегә көнөнә икеөс порция һөт аҙығы талап ителә. Йәғни, 200-250 грамм һөт, эремсек, ҡаймаҡ гәҙәти күренешкә әйләнергә тейеш. Белгестәр иҫәпләүенсә, тышында 0 процентлы тигән яҙыулы эремсектәр, ҡатыҡтар файҙаһыҙ, сөнки майҙа иреүсе А һәм Д витаминдары бындай аҙыҡта бөтөнләй үҙләштерелмәй. Шуға күрә 2-3 процентлыларында туҡталыу яҡшы булыр. Әгәр ҙә һөт яратмаһағыҙ, уны ҡатыҡ, сыр, ойотҡан менән алыштыра алаһығыҙ. Көнөнә бер стакан һөт эсеү ҙә беҙҙе ҡурҡыныс сирҙәрҙән һаҡлап ҡала. Мәҫәлән, йыуан эсәк сире үсешен 1 стакан һөт эсеп кәметеп була.**

**1 процентлы йогурт һайлаусы ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең һаулығын хәүеф аҫтына ҡуя. Уларҙағы ҡуйыртҡыстар, тәмләткестәр, эмульгаторҙар майлы йогурттарға ҡарағанда күпкә зарарлы. Иң яҡшыһы 2,5 процентлы йогурттарҙа туҡталыу.**

**Лилиә ЯМАЛОВА әҙерләне.**

ХОККЕЙ

# ЕҢЕҮЛЕ УЙЫНДАР

**"Салауат Юлаев" Латвияның баш ҡалаһы Ригала "Динамо" командаһы менән көс һынашты. Динамосылар уйындың тәүге минуттарынан уҡ көслө, дәррәү һөжүм башланы. Көсөргәнешле көрәш күбеһенсә тиерлек юлаевсылар ҡапҡаһы яғында барҙы. Һөҙөмтәлә беренсе осор майҙан хужалары файҙаһына 2:0 иҫәбе менән тамамланды.**

Көйәрмәндәрҙең байтағы хатта төңөлә башланы. Юлаевсылар тағы ла отолормо икән ни? Алда барғанды ҡыуып етеүе һәр ваҡыт ауыр була.

Юҡ, төңөләргә ашыҡмағыҙ! Юлаевсылар тиҙ генә теҙ сүгә торғандарҙан түгел. Тәүге осорҙа гол индерә алмауҙан ғәрләнгән юлаевсылар үҙҙәре һөжүмгә күсте. Ҡапҡасы Александр Радулов һуҡҡан шайбаны тота алмай ҡалды. Иҫәп 1:2 булды.

Һуңғы өсөнсө осорҙа уйын дилбегәһен юлаевсылар тулыһынса үҙ ҡулына алды. Тәүҙә Игорь Григоренко иҫәпте тигеҙләне. Унан һуң бер-нисә минут үттеме, юҡмы, Александр Радулов "Салауат Юлаев" командаһын алға сығарҙы. Ә осорҙоң һуңғы минуттарында Петр Счастливый ҡаршы яҡ ҡапҡаға дүртенсе шайбаны сәпәне.

Шулай итеп, юлаевсылар 4:2 иҫәбе менән еңеү яуланы.

Санкт-Петербург ҡалаһының СКА командаһы менән көс һынашыу юлаевсылар өсөн ҙур һәм бик мөһим һынау булды. Көнбайыш конференцияла беренсе урында барған СКА баш тренер М.Ржига етәкселегендә айырыуса яҡшы уйнай. СКА быйыл "Гагарин" кубогын яулау өсөн көрәшә. Шуға күрә хоккей белгестәре СКА менән "Салауат Юлаев" командаларының көс һынашыуын был турҙың үҙәк матчы тип баһаланы.

СКА үҙенең конференцияла иң көслө команда икәнен уйындың беренсе минутында уҡ иҫбатланы. Уйын башланып бер минут үтеүгә, СКА тәүге шайбаны юлаевсылар ҡапҡаһына оялатты. Осор бөтөр алдынан иҫәп 2-гә етте.

Осрашыуҙың һуңғы икенсе егерме минутында юлаевсылар уйын дилбегәһен тулыһынса үҙ ҡулына алды. Александр Радулов тәүге шайбаны майҙан хужалары ҡапҡаһында ҡундырҙы. Игорь Григоренко иҫәпте тигеҙләне: 2:2. Олег Сапрыкин команданы алға сығарҙы.

Континенталь хоккей лигаһы чемпионатында был икенсе осор иң иҫтәлекле егерме минут булып ҡалыр. Был ваҡыт эсендә юлаевсылар тәүге тапҡыр бер-бер артлы дүрт шайба индерҙе. Матчтың аҙмышы өсөнсө ваҡытта хәл ителде. Юлаевсылар майҙан хужалары ҡапҡаһына бишенсе шайбаны сәпәне. Голдың авторы - әлеге лә баяғы Александр Радулов булды. Өсөнсө ваҡыт булһа ла, еңеү - еңеү инде ул. Өҫтәүенә, бай һәм ҙур тәжрибәле М. Ржига етәкләгән команданы отоу юлаевсыларҙың еңеүле уйындарын дауам итеүе булды.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ШЫРШЫ УРЛАҺАҢ...

## биш мең штраф түләрһең

**Оҙаҡламай шыршы һатыу баҙарҙары үҙ эшен башлаясаҡ. Шыршыларға хаҡтар әллә ни тешләшмәһә лә, ҡайһы берәүҙәр аҡсаһын экономиялау маҡсатында уны яҡын-тирәләге урмандан ҡырҡып алып ҡайтырға тырыша.**

Бындай ҡырағайлыҡҡа юл ҡуймау маҡсатында Көньяҡ Урал дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы "Шыршыҡай" операцияһы ойоштора. Операция барышында ете урмансылыҡтың дәүләт инспекторҙары һәм ҡурсаулыҡтың оператив төркөмә ылыҫлы ағастарҙы ҡырҡыуҙан һаҡлаясаҡ. Улар урман биләмәләрен һәм урман сиген, халыҡ йәшәгән урындарҙы, шулай уҡ юл буйҙарын һәм урман юлдарын контролдә тотасаҡ. 1 метрға тиклем оҙонлоҡтағы бер ылыҫлы ағасты ҡырҡҡан өсөн 5 мең һум күләмдә штраф, ә икеү һәм унан да күберәк ағасты юҡ иткән өсөн енәйәт эше ҡуҙғатылырға мөмкин.

Ошо операция менән бер рәттән ҡурсаулыҡ эшселәре тарафынан "Йәшә, шыршыҡай!" исемле акция ла уҙғарыласаҡ. Акция йәш быуында тәбиғәткә, урманға, ылыҫлы ағастарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүҙе, халыҡтың экологик мәҙәниәтен үҫтереүҙе үҙ эсенә ала. Акция сиктәрендә ҡурсаулыҡ белгестәре мәктәп һәм ауылдарҙа тәбиғәтте һаҡлауға ҡоролған әңгәмә, лекция һәм семинарҙар уҙғарасаҡ.

**Илнур ҺИҘИӘТОВ, Көньяҡ Урал дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы белгесе.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 декабрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия
**11 декабрь "Их, кәләше лә кәләше!"** (Х. Зарипов), музыкаль комедия
**13 декабрь "Минең ғаиләм"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама
**14 декабрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия
**15 декабрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим), трагедия
**16 декабрь "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә

### М. Кәрим исемендәге Милли Йәштәр театры

**13 декабрь "Ромео һәм Джульетта"** (У. Шекспир), трагедия
**14 декабрь "Һаумы, әсәй!"** (Г. Ғиззәтуллина), моноспектакль
**16 декабрь "Тоҡ эсендәге бесәй, йәки Башкирская пленница"** (М. Кәрим), спектакль-концерт

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**20 декабрь "Йыл артынан йылдар артыла"** юмористик Яңы йыл программаһы. Лилиә Ишемйәрова менән Урал Мортазиндың концерты.

ИҒЛАН

**Ҡыш бабай, Ҡарһылыу һәм уларҙың дуҫтары һеҙҙән шылтыратыуҙар көтә!**

Мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында Яңы йыл кисәләре, шулай уҡ өлкәндәр өсөн корпоративтар ойоштораБыҙ. 2012 йыл хужаһы Аждаһа ҡатнашлығында ҡыҙыҡлы сценарийҙар ҙа бар. Байрам кисәләре башҡорт һәм рус телдәрендә алып барыла. Шулай уҡ байрам алдынан Ҡыш бабайҙы өйгә саҡырып, балаларға оло шатлыҡ бүләк итергә лә мөмкин.

**"Афарин" ижад студияһы. Телефон: 8-927-08-77-548.**

СМСНАМӘ - ШИҒРИ ӘЙТЕШ

# ҺЫУҒА ТӨШМӘЙ БЕЛЕП БУЛМАЙ

## Унының һалкын икәнен...



**Әйтешебеҙ ҡыҙыу тоҫ алды. Яңы йылға ла күп ҡалманы. Этҡол сәсәндең төртмә теленә сыҙап ҡына тор. Унын әрһыуы башҡаларға ла күсә.**

**КӨФӨ:**
**Этҡол дуҫтың атҡан уғы**
**Килеп тейҙе миңә лә.**
**Шуға күрә яуап бирәм**
**Бер тамсы үпкәләмәй.**
**Ҡыҙым миңә "ат-тай", ти ҙә,**
**Әсәһенә "әс-сәй", ти.**
**Ҡартатаһын "катай", тиһә,**
**Өләсәһен "өсәй", ти.**
**Йәш тә ун ай ғына уға**
**Февралдә тула ике.**
**Башҡортса, саф үҙебеҙсә**
**Илауҙарына тиклем.**
**Беҙҙең ғаилә мөхитендә**
**Дәүләт теле - телебеҙ.**
**Шулай булған өсөн генә**
**Милләтебеҙ тере бит.**
**Был Этҡолдоң теле үткер**
**Барыбыҙҙы бейетә.**
**Тағы кемгә тейҙе уғы,**
**Йә тағы кем ни әйтер?**

**ДАРМАН:**
Фәһемле бер әйтем бар:
Сәсән барҙа телең тый.
Уғың тейҙе, аңғартты,
Зирәк барҙа өнһөҙ тор.
Ауыҙҙағы ҡыҙыл балта
Ҡайсаҡ була айбалта.
Һандал сүкеш араһына
Гәзиз баштарың ята.
Һыуға төшмәй белеп булмай
Унын һалкын икәнен.
Аралашмай белеп булмай
Ни самала икәнһең?

**АҠЫҠ:**
Этҡол абзый ни оҡшамай,
Шуны һала бит һүҙгә.
Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ бит,
Тиеп әйтәләр беҙҙә.
Һүҙ кәҙерен белмәгәндәр
Өсөн йәшәүе ҡыйын.
Ә мин уға әйтәм бына:
Этҡол сәсән - афарин!
Ә үҙемә килгәндәме -
Ябайлыҡты хуп күрәм.
Был тормошто һөйөүсе һәм
Һөйөлөүсе бер әҙәм.

**БАТЫР:**
**Этколға:**
Аҙмы һуң әле дошманы
Ошо көндә халҡымдың?
Ҡорҙаштарҙы хурламайыҡ,
Аямайыҡ дошманды -
Ошо хаҡта яҙайыҡ!
**Ырыҫҡа:**
Ил яҙмышын хаким түгел,
Аллаһ Үҙе хәл итә:
Берәй нәмә булһын өсөн
Уға "Бул!" тиеү етә.
Яңынан-яңы юл эҙләп,
Нинә башты ватырға.
Кисә коммунизм булды,
Бөгөн - демократия...
Ә иртәгә йәнә лә бер
Модный термин табырҙар...
Ә мосолмандар шул арала
Аллаға табынырҙар...
Шарран асылырға тигәс,
Асылайым һуң шарран:
Үҙем ябай мосолманмын,
Мөъминмен, иншә Аллаһ.
Мин - Аллаһын бер ҡоломон,
Атай-әсәй улымын,
Студенты булып торамын
Баш ҡалабыҙ вузының.
Табынамын Аллаһҡа мин,
Һорайым Унан доға:
Сығарһын ине халҡымды
Бер юлға, Тура юлға!
Йәннәттәрҙә, эй ҡорҙаштар,
Бергә ултырһаҡ ине!
Был донъя тик һынау ғына -
Шуны аңлаһаҡ ине.
Аллаһ ҡушҡан әмерҙәрҙе
Үтәмәйсә буламы?
Сәй-ҡәһүәләр генә эсеп,
Динле булып буламы?
Саф шишмәнән укшып-укшып,
Зәм-зәм һыуын да эсәйек,
Яһил булып йәшәмәйек,
Динле булып йәшәйек,
Динле булып үләйек!

**ЫРЫҪ:**
Батыр туған, һин әйткәндәр
Майҙан тотоу хаҡында,
Тотош түгел, тик хоҡуҡһыҙ
Ҡоролошҡа ҡағыла.
Хоҡуҡи илдә урамға
Баҫа йөҙәр мең халыҡ.
Һөрәнләп үтәләр атлап,
Ҡайып китә төҙ баҫып.
Хоҡуҡһыҙ илдәрҙә инде
Ҡурҡыуҙарға сәбәп бар.
Тик тормош шуға өйрәтә -
Ҡурҡыуҙың да сиге бар.
Конституцияға ярашлы
Урамдарға сығаһың,
Дөрөҫлөк бит һинең яҡта -
Ил яҙмышын ҡарайһың.
Ныҡышмымбыҙ, ашыҡмайбыҙ
Хатабыҙҙы танырға.
Илебеҙ өсөн үҙебеҙ
Яуаплылыҡ алырға.
Кешенән дә көләп алыу
Зыян түгелдер, Көфө.
Бизмәндә тигеҙләр өсөн
Күҙ алдыбыҙҙа көҙгө.
Фекер әйтеү телмәр өсөн
Тарыраҡ мөхит, Аҡыҡ.
Кешеләргә әйтер һүҙең
Булыуы үҙе аҡыҡ.
Оялсанлыҡ, ҡыйыуһыҙлыҡ
Олоғая, сигенә.
Аҡ һаҡаллы оялсанды
Ос(о)раттым бер генә.
Һиндәгеләй миндә лә күп
Әйтелмәгән фекерҙәр.
Самиздатта донъя күрер
Һөйләнмәгән телмәрҙәр.
Ауыл һайын бәрәү була
Этҡол һымаҡ егеттәр.
Ындайҙарҙың тел осона
Эләкмәү хәйерләрәк.
Шуныһы шикһеҙ, әлбиттә,
Бындай егеттәр кәрәк.

**ЭТҠОЛ:**
**Батырға:**
Һин һайлауға барҙыңмы?
Бюллетенең алдыңмы?
Ҡушҡандарың үтәйем, тип,
Билдә ҡуйып һалдыңмы?
Ҡай фирҡәне һайлауың
Минең өсөн ҡараңғы:
Вертикально баҫтырғанды
"Ура!" тип һайлай халыҡ -
Бар бит әле шул яғы.
Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә,
Ҡаҡтығып ситкә китә.
Һелкенмәй Урал ташы,
Бер үк балыҡтың башы.
Халыҡ һүҙе ҡомалаҡ,
Ҡомалаҡтай тумалаҡ.
Йомарлап та тоталар,
Урнаға ырғыталар.
**Көфөгә:**
Ҡыҙыңа ике тулғанда,
Ҡотла минең исемдән.
Ҡыҙың түгел, хатта һин дә
Һиҫ күрмәгән кешенән.
Ике йәше тулғанда
Бүләк итмә сәскәләр.
Был ғүмерҙәр тиҙ үтер,
Ҡыҙың да үҫеп етер.
Ун етеһе тулғанда
Ошо һүҙемде еткер:
Сәскәләрҙән матур була
Яҙ , дала...
Тиле сағың, алданмаҫы,
Ҡыҙ бала!
**Ырыҫҡа:**
Ҡоллоҡтан туйҙыҡ микән,
Иректе алдыҡ микән?
Емештәрен кем алыр,
Халыҡҡа нимә ҡалыр?
Ауыр һулап уфтаныуым
Ыңғырашҡан ерем өсөн,
Ғәрләнеүем ҡол булыуҙы
Байрам иткән илем өсөн.
Халыҡ әле бөгөлмәгән,
Йоҙроҡ әле төйөлмәгән.
Ярһып тешләнеп ҡуйһа ла,
450 йыл булһа ла...
**Шиғыр-әйтештә ҡатнашҡан**
**Бөтә дуҫтарға һорау.**
**Көфө башлаған бәйге**
**Аҙағына яҡынлай.**
**Хәҙер һеҙҙе мин һанайым**
**Бер туғандай, яҡындай.**
**Ҡараңғыла һөрмәнәбеҙ,**
**Барыр юлдар билдәһеҙ.**
**Киләсәккә кем күрәҙә -**
**Әйтегеҙсе, белһәгеҙ?**
**Ырылдашып талашабыҙ,**
**Иркен донъя тар микән?**
**Ыҙғышмайса, татыу ғына**
**Йәшәгән ер бар микән?**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йә, йәмәғәт, Этҡол сәсәндең был һорауына кем ни тип яуап бирер? Яңы йыл етә, һүҙегеҙҙе әйтеп ҡалығыҙ! Беҙҙең телефон: 8-917-477-09-74.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА

**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәрендә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИСӘР ЙҮКӘ ҺУЙЫР...

## аҡыллы тәкә һуйыр

Дуҫ итеп серең һөйләмә, таңда дошман булмаһын, дошман тип хәтерен ҡалдырма, таңда дуҫың булмаһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бер аҙым эшләү өсөн егерме йыл икеләнергә мөмкин, әммә ул аҙымды эшләгәнһең икән, сигенергә ярамай.

**(Альфред де Мюссе).**

Үҙ уйҙарығыҙға ҡарата иғтибарлы булығыҙ, улар һәр ҡылыҡтың башы.

**(Лао-цзы).**

Доғалар яуаплыҙ булырға тейеш, шунһыҙ, ул доға булыуҙан туҡтар һәм ҡара-ҡаршы әйтешкә әүерелер ине.

**(Оскар Уайльд).**

Йәшәү мәғәнәһе - ул барлыҡ теләктәреңде ҡандырыу түгел, ә теләктәреңдең булыуы.

**(Михаил Зощенко).**

Кеше үҙенең ҡайғыларын һанарға ярата, ә бына шатлыҡтарын һанамай.

**(Федор Достоевский).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер саҡ Һиндостан батшаһына бик үҙенсәлекле бүләк бирәләр: өс алтын һын һәм барыһы ла бер төрлө. Был бүләккә, һындарҙың һәр береһенең үҙ тәғәйенләнеше бар һәм уларҙың береһе генә үтә ҡиммәтле баһаға эйә, тип яҙылған хат та беркетелгән була. Батша үҙенең барлыҡ кәңәшселәрен һәм аҡыл эйәләрен саҡырып ала һәм был бүләк-һындарҙағы айырманы табырға бойора. Аҡыл эйәләре бик оҙаҡ баш вата, һындарҙы төрлөсә тикшерә: уларҙың ауырлығын да, алтынының сифатын да, эшләнешен дә тикшереп ҡарай, әммә береһе лә улар араһындағы айырманы таба алмай. Шул саҡ батша һарайына көскә-көскә атлап бер ҡарт килеп инә. Тикшереп сыҡҡас, һындарҙың ҡолағында бәләкәй генә тишек булыуын шәйләй. Тишектәргә нәҙек тимерсыбыҡ тығып ҡарай. Тәүге һындың ҡолағына тығылған тимерсыбыҡ осо - икенсе ҡолағынан, икенсе һындыҡы - ауыҙынан, өсөнсө һындыҡы кендегенән килеп сыға. Ҡарт был йомаҡ өҫтөндә бер аҙ уйланғандан һуң, шундай аңлатма бирә:**

**- Был һындарҙың хикмәте шунда: беренсеһе бөтә хәбәрҙәрҙең бер ҡолағынан инеп, икенсеһенән сыҡҡан кешене кәүҙәләндерә. Икенсе һын - ул һәр ишеткән хәбәрен нықлап уйлап, тикшереп-үлсәп тормай, башҡаларға һөйләргә ашыҡҡан кеше. Ә өсөнсө һын һәр ишеткәнен йөрәге аша үткәреп, хәтеренә һеңдереп, һығымталар яһаған кешене хәтерләтә. Тимәк, ошо өсөнсө һын иң ҡиммәт баһаға эйә..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 9 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5203
Заказ 4873